ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

17-23 декабрь (аҡъюлай) 2022

№50 (1040)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Мин һеҙгә ышанам, яҡташтар!**



4-5

**Туған телебеҙ...**

көн һайын байрамға сәбәп булһын



6

**Беҙ - Миһран карттың балалары**



8-9

**Һынауҙыр был...**



12

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

*Иғтибар! "Киске Өфө" гәзите менән бергә булыусы аңлы, зыялы уҡыусыларыбыҙҙы 5 декабрҙән 19 декабргә тиклем ПР905 индекслы "Киске Өфө"гә 2023 йылдың беренсе яртыһы өсөн ташламалы хаҡ менән 642 һум 38 тингә яҙылырға саҡырабыҙ. Гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер бүләккә бик шәп китаптар аласағы тураһында ла онотмағыҙ. Бергә булайыҡ!*

*МӨХӘРРИРИӘТ.*

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Яҙыусы бөгөн халыҡ трибуны була аламы?

***Фәнил КҮЗБӘКОВ, шағир, филология фәндәре докторы, ғалим-тарихсы, профессор:*** Эйе, була ала! Был уның намыҫ эше, граждандыҡ бурысы. Тап ана шул халыҡ трибуны булыу яҙыусымын тигән яҙыусының был донъяға саҡырылмыш бурысы ла. Әгәр ҙә һиңә тәбиғәт тарафынан һүҙ ҡеүәһе, әйләнә-тирәне, кешелек донъяһын образлы күрә алыу һәләте бирелгән икән, һин уны халҡыңа хеҙмәт итеү өсөн ҡулланырға тейешһең. Киң билдәле немец шағиры Генрих Гейне (1797-1856) былай ти: "Донъялағы шартлауҙар шағир йөрәге аша үтә..." Был тетрәүҙәрҙе күпселек һиҙмәүе лә мөмкин. Шуның өсөн шағир (әҙип) үҙ кисерештәрен, һыҙланыуҙарын, һиҙемләүҙәрен халҡына ҡанатлы һүҙ аша еткерә.

XVIII быуатта йәшәгән беҙҙең Ҡарас сәсән: "Мин - халҡымдың теле", - тиер булған. Йәғни, сәсән - туған халҡының өмөт-хыялдарын, теләк-ынтылыштарын, уның булмышын асып һалыусы. Рәми ағай быны тағы ла асыҡлай төшә: "Ни мәғәнә дөрөҫ һүҙ әйтеүҙән, Дөрөҫ һүҙең әгәр һуңлаһа!" Рәми ағайҙың 60-70-се йылдарҙа әйткәндәрен беҙ 90-сы йылдарҙа байраҡ итеп күтәрҙек. Уның төп маҡсаты ла бит: "Кешеләрҙең маңлай күҙе күреп тә, күңел күҙе күрмәй үткән бөтә нәмәне тәрәнәйтеүҙә, күрерлек итеүҙә, шуларҙы уларҙың үҙҙәренеке итеп ҡайтарып биреүҙә - бик күптәргә үҙҙәренең кешелеген ҡайтарып биреүҙә". Халыҡ шағирының түбәндәге шиғри юлдары күптәрҙең йөрәгендә уйылып яҙылғандыр:

*Шағир - бер тамсыһы*
*икән үҙ халҡының,*
*Тамсы һөйләр диңгеҙ*
*хаҡында.*
*Шағир шаңдағы*
*ул заманының,*
*Һәм көсө лә уның халҡында.*

Әҙиптең бурысы, маҡсаты, ынтылышы тураһында ошо дәрәжәлә тапҡыр итеп әйтеүселәр бик һирәк. Тап был юлдар Рәми Ғариповтың асылын, тормош юлын аңларға ярҙам итә.

Ҡарас сәсәндең "Мин - халҡымдың теле" тигән ҡанатлы һүҙҙәрен эпиграф итеп алып, шиғыр яҙғайным:

### СӘСӘНЛЕК

Мин - халҡымдың теле....
Ҡарас сәсән

*Йәншишмәнән һыу уртлаған*
*Халҡымдың телемен мин.*
*Күктең күҙгөһөндәй диңгеҙ -*
*Илемдең йөҙөмөн мин!*
*Сәсән - милләттең намыҫы,*
*Рухи осош - балҡышы.*
*Йәшендәрҙе ҡайтарғысы -*
*Ил-йортонда яҙмышы.*
*Халҡы менән байрамда ла,*
*Бураҙна ярғанда ла,*
*Яуға күтәрелгәндә лә,*
*Уттарҙа янғанда ла.*
*Шулай булған.*
*Шулай булыр!*
*Сәсәнлек - ирлек бурыс.*
*Берсә ул яраға дауа,*
*Берсә яланғас ҡылыс.*
*Сәсәнлек - изге бурыс.*

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# СПОРТТА ЛА - БЕҘҘЕКЕЛӘР!

**Иҫәпләүҙәр буйынса, донъяла яҡынса 200 меңдән ашыу спорт төрө бар һәм белгестәр әйтеүенсә, был һан көн һайын тиерлек арта бара. Спорттың шахбокс спорт төрө улар араһында сағыштырмаса "йәш" булһа ла, спорт яратыусылар араһында ул киң билдәлелек яулаған. Шахмат һәм бокс кеүек ике төрлө спортты үҙенә берләштергән шахбокс буйынса рәсми ярыштар 2003 йылдан уҙғарыла. Яңыраҡ Төркиәнең Алания ҡалаһында шахбоксты үҙ итеүсе спортсылар араһында Донъя чемпионаты үтте. Ғафури районы Ҡауарҙы ауылы егете Илсур ИСХАҠОВ чемпионатта мәртәбәле исем - Шахбокс буйынса Донъя чемпионы исемен яуланы. Һүҙ - чемпионға.**



- Шахбокс - шахмат һәм бокс ҡағиҙәләрен берләштергән гибрид спорт төрө. Шахбокста спортсының интеллектуаль һәләттәре һәм көрәш (единоборство) оҫталығы һанлана, йәғни үҙенең аҡылы менән физик көсөн бер кимәлдә һәм оптималь ҡуллана белгән спортсы еңеүгә дәғүә итә: таҡ раундта шахмат буйынса ярыш уҙа, ә йоп раундта ярышташтар рингка сығып, бокс буйынса көслөнө асыҡлай.

Шахматты бәләкәйҙән уйнайым. Тренерым - атайым Исхаҡов Сабир Сабит улы. Ул миндә шахматҡа ҡарата ҡыҙыҡһыныу уятты, уйнау алымдарын өйрәтте, тәүге еңеү һәм еңелеү тойғоларын нисек ҡабул итеүемде күҙәтеүсе лә нәҡ атайым. Шахмат кешене уйларға, тиҙ генә фекер тупларға, көрәштәшеңдең шахмат таҡтаһында ниндәй аҙымдар эшләйәсәген күҙалларға ярҙам итә, шулай уҡ мейенең эшмәкәрлеген яҡшырта, хәтерҙе нығыта, һәр аҙымды анализларға өйрәтә.

(Дауамы 2-се биттә).

12+

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишерелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда, майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# БЕҘ КҮРГӘНДЕ КҮРМӘҺЕНДӘР

***Мөхәмәт ТҮЛӘБАЕВ, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, ҡурайсы, Белорет районы:*** Минә 78 йәш һәм бөтә ғүмеремде балаларға белем, тәрбиә биреүгә бағышлаған уҡытыусымын. Ологайған һайын үҙемдең бала саҡ, шул осорҙоң ауырлыҡтары иҫкә йыш төшә. Беҙ, өләсәйҙәр әйтмешләй, "тимер ашап, таш бөркөп йөрөгән ир-егеттәр"ҙең яу ҡырында ятып ҡалыуын, иҫән ҡалғандарының да аяҡ-ҡулһыҙ ғәриплән кәйтып, йәйлы тормош ҡороп китә алмай аҙапланғандарын, тылда ҡалған ҡатын-ҡыҙҙың үҙ иңенә тормоштоң бөтә ауырлығын йөкмәп ғүмер итеүен күреп үҫкән быуын. Ҡала еренә барһаң, хәйер һорап йөрөгән ғәрип ирҙәр күп осрай торғайны, уларға эш тә булмағандыр инде. Ә ауыл ҡатын-ҡыҙҙары колхоздың барлыҡ эшен ҡул көсө менән атҡарҙы. Тракторҙа ла улар йөрөнө, ә бит ул ваҡытта тракторҙы ҡул менән өйөрөлтөп тоҡандыра торғайнылар. Бесәнде көндөҙ колхозға, төндәрен үҙ хужалығы өсөн эшләнеләр, бер ҡулына балаһын, икенсеһенә эш ҡоралы тотоп йөрөүсе әсәйҙәрҙе лә күрҙек. Һылыу-һылыу йәш апайҙар һуғыштан ирҙәрен көтөп, башҡаса кейәүгә сыҡмай ҡартайҙылар, уларҙы "фронтовичка" тип йөрөтәләр ине. Нисек кенә ауыр булмаһын, шул ҡыйынлыҡтарҙы тырышып эшләп еңеп сыҡты, ас-яланғас йылдарҙы артта ҡалдырҙы халҡыбыҙ.

Ниһайәт, тормош яҡшырып, һуғыш афәтен күрмәгән-белмәгән йәш быуын үҫеп етте, күптәре үҙҙәре атай-әсәй булды. Һәм бына тағы шул быуынға, илебеҙгә һуғыш афәте янай. Ул олоға әүерелеп китмәһен тип, шул тиклем йөрәк һыҙлай, күңелдәр болоҡһоп тора. Был заманда әйтер һүҙ-теләк бәрәү генә: батшаларға Хоҙай аҡыл-зиһен биреп, үҙ-ара килешһендәр һәм Ергә тыныс тормош ҡайтһын. Әлбиттә, Ватанды һаҡлау бурысынан милләттәштәребеҙ һис кенә лә ситкә тайпылып ҡалманы, кемдәре үҙ ирке, кемдәре ил саҡырыуына яуап биреп, һәрбиҙәр рәтенә баҫты. Был башҡорт халҡының сит кешенең ҡайғыһын үҙенекеләй күреп, ярҙам ҡулы һуҙырға әҙерлегенә, изгелекле булыуына ла бәйлелер. Ил именлеген һаҡлау ҡаныбыҙға һеңгән бит.

Бына яңыраҡ мобилизацияланған дүрт балалы ғаилә башлығының именлек-һаулығына бағышлап ҡорбан салдырҙы яҡындары. Кемдер бәрәү булһа, ҡағыҙ юлап, баш тартыр, өйҙә ятып ҡалыу яғын ҡарар ине. Ә беҙҙең ир-егеттәр улайтмай һәм был хуплауға лайыҡ сифат. Ләкин һуғыш ҡорбанһыҙ булмай. Шундай еңел булмаған замандa берҙәм булһын ине халҡыбыҙ. Еңел-елпе уйлап, һөйләп, күңел асып ҡына йәшәргә түгел, үҙебеҙҙең милли йолалар, ғөрөф-ғәҙәттәр, билдәле шәхестәр өлгөһөн иҫкә төшөрөп, уларҙы балалар, йәш-елкенсәк күңеленә лә индерерлек сараларға өҫтөнлөк биреү кәрәктер. Беҙҙең быуын күргәнде йәш быуындар күрмәһен, беҙ кисергәндәрҙе кисермәһен инде берүк.

**Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## ? Яҙыусы бөгөн халыҡ трибуны була аламы?

***Рәшит ШӘКҮР, Башҡортостандың халыҡ шағиры:*** Халыҡ трибуны булыу-булмау шәхестең үҙенән, йәғни унның үҙ алдына ниндәй маҡсаттар ҡуйып йәшәүенән, ҡараш киңлегенән, эрудицияһынан тора. Халыҡ мәнфәғәтен яҡлаусы, уның уй-ынтылышын еткереүсе тигән саҡта, иң беренсе Шәйхзада Бабичты атарға тейешбеҙ. Ул - ысын мәғәнәһендә бөйөк халыҡ трибуны. Бабич үҙенең тормошон башҡорт халҡының азатлығы өсөн ижтиһад ҡылды, Башҡорт Республикаһын төҙөүгә бөтөн ғүмерен бағышланы. Шағирҙың ижадында был асыҡ сағыла, ә түбәндәге юлдарҙы күпселек яттан белә:

*Башҡортостан -*
*гөлбостан,*
*Сөмбөлөстан,*
*нурбостан,*
*Шунда тыуған,*
*шунда үҫкән*
*Башҡорт атлы*
*арыҫлан!*

Беҙҙең дәүерҙәштәрҙән, әлбиттә, халыҡ трибуны тип Рауил Бикбаевтың исемен атар инем. Үҙенең таланты менән дә, шәхестең масштаблығы менән дә ул трибун ине. Республикаға, халҡыбыҙға ижады һәм эшмәкәрлеге менән хеҙмәт итте. Был йәһәттән ул күптәргә үрнәк булып тора. Киләсәктә лә ундай шәхестәребеҙ булыр. Һәр хәлдә, халыҡ трибуны булыу һәр кемдең үҙенә бәйләнгән.

***Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА, яҙыусы:*** "Урал батыр" эпосындағы "Яҡшылыҡ булһын атығыҙ!" тигән саҡырыу менәр йыллыҡтар аша килеп еткән икән, был һүҙ сәнгәтенең көсө тураһында һөйләй. Теге йәки был дәүерҙә сәсән, һүҙ маһиры, шағир халҡына кәрәкле һүҙҙе әйткән, уның ихтыяжын, теләген алға сығарған. Халыҡтың рухын сағылдырған был юлдар аманат булып быуаттар аша яңы быуындарға килеп еткән. Хатта былдай әҙәби ҡомарткыларҙың авторҙарын да беҙ белмәйбеҙ, ләкин "Яҡшылыҡ булһын атығыҙ!", йә иһә "Бөркөттәрең ирек аулағанда, Тамырҙарың, Башҡорт, ҡоромаҫ" (Салауат Юлаев), "Башҡорттарым, уҡыу кәрәк, уҡыу кәрәк!" (Аҡмулла) тигән өндәшеү милләт идеяһы ла булып яңғырай, үҫештең ниндәй йүнәлештә барырға тейешлеген асыҡлай, авторҙарын халыҡ трибуны итеп күтәрә.

Беҙ ҙә шундай мәшһүр шағирҙар, халыҡ трибундары менән аралашып йәшәнек һәм йәшәйбеҙ. Бәғзеләре баҡый донъяға күсһә лә йөрәгенән сыҡҡан һүҙҙәре халҡы менән бергә. Рауил Бикбаевтың "Халҡыма хат " поэмаһы - шуның асыҡ өлгөһө.

*Барыны ла*
*беҙҙең уяулыкта,*
*Беҙҙең эштә,*
*беҙҙең намыҫта.*
*Туған телем өсөн*
*кәрәк икән -*
*Бар бәхетем, әйҙә,*
*юҡ булһын...*

Минең өсөн йәнә лә халыҡ трибунының асыҡ өлгөһө - ул шағир һәм йәмәғәт эшмәкәре Рәшит Шәкүр. Уның һәр яҙғаны халыҡ рухын нығыта. Алда аталған ике ҙур шағирҙың бергә ижад иткән шиғыры Башҡортостан Республикаһының Дәүләт гимны булып яңғырай. Был һис тә осраҡлы түгел. Был - үҙ заманыңа, милләтеңә фиҙакәр хеҙмәт итеү. Был ижадсының мөҡәддәс бурысы.

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# СПОРТТА ЛА - БЕҘҘЕКЕЛӘР!

(Башы 1-се биттә).



Өфөлә уҡый башлағас, боксҡа ҡарата ла ҡыҙыҡһыныу барлыҡҡа килде, даими шөғөлләндем. Уҡып бөтөп, әрмелә хеҙмәт итеп ҡайтҡас, шахбокс менән таныштым. Бер йыл шөғөлләнгәндән һуң Рәсәй чемпионы исемен яуланым һәм донъя чемпионатына әҙерләнә башланым. Чемпионатҡа әҙерләнеү өсөн эштән киттем, сөнки көнөнә ике тапҡыр күнегеүҙәр үткәрергә кәрәк ине. Ләкин был аҙымым үҙен аҡланы, тип әйтә алам. Финалда мин ике тапҡыр донъя чемпионы булған Франция вәкиле менән көс һынаштым. Алыш көсөргәнешле булды, бер кем дә алдынғылыҡты бирергә теләмәйенсә, бар тырышлығын һалды. Шулай ҙа уңыш минә йылмайҙы һәм ярыш һөҙөмтәләре буйынса Донъя чемпионы титулын мин яуланым.

Көрәштәшем алдағы йылда реванш алыу ниәтен белдерҙе, тимәк, минә ул алышҡа ныҡлы әҙерлек менән барырға һәм быйылғы еңеүемә тағы ла ҡабатлау өсөн бар тырышлығымды һалырға кәрәк буласаҡ. Шуға күрә алда мине көсөргәнешле күнегеүҙәр көтә.

Спорт кешене үҫтерә, рухи көс бирә, сыныҡтыра, маҡсатҡа ынтылышлы итә, яуаплы булырға өйрәтә.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Спорт менән шөғөлләнгән һәр кем һоҡланғыс шәхес, сөнки барыһында ла оҙайлы йылдар дауамында көсөргәнешле күнекмәләрҙе ҡалдырмайынса шөғөлләнерлек ихтыяр көсө юҡ. Шулай уҡ ярыштар ҙа физик йәһәттән генә түгел, ә рухи көслөлөктө лә талап итә, сөнки тиҫтәләгән спортсыға ҡаршы сығырлыҡ күңел ныҡлығы кәрәк. Көслө яҡташыбыҙ, Башҡортостан, Рәсәй данын бөтә донъя кимәлендә лайыҡлы яҡлап сыҡҡан Илсур Исхаҡов ошондай һоҡланғыс спортсыларҙың береһе. Артабан да уңыштар юлдаш булһын!**

**Гөлназ САФУАНОВА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Мобилизацияланған яҡташтарыбыҙҙың ғаиләләренә Яңы йылға 20-шәр мең һум аҡса ошо аҙнала уҡ түләнә башлай. Был хаҡта ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министры Ленара Иванова хәбәр итте. Уның һүҙҙәренсә, 11 декабрҙә кискә аҡса юллау өсөн 4 141 ғариза килгән. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, 5 декабрҙә Радий Хәбиров мобилизацияланғандарҙың ғаиләләренә бер тапҡыр бирелә торған матди ярҙам тураһындағы указға ҡул ҡуйғайны.

✓Башҡортостандан махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларҙың шифахана-курорт ялына 2023 йылда 100 миллион һумға яҡын аҡса йүнәлтелә. Был хаҡта республика Премьер-министры Андрей Назаров хәбәр итте. Билдәләнеүенсә, ирекле батальондарҙың яугирҙары йәки өлөшләтә мобилизация буйынса саҡырылғандар бер тапҡыр барып ял итеү хоҡуғына эйә. Уңайлы булһын өсөн шифаханаларҙа резерв номер фонды булдырыла. Һауыҡтырыу учреждениеларының тулы исемлеге һәм хеҙмәт күрһәтеү тәртибе һуңғараҡ баҫылып сыға.

✓Рәсәйҙә йәшәүселәр грипп һәм кисҡен респиратор вирус инфекцияһы менән йышыраҡ ауырый башлаған. Роспотребнадзор мәғлүмәттәренә ярашлы, был аҙнала сир күрһәткесе 35,4 проценттан артҡан, ә 37 субъектта ул ил кимәленән артып киткән. Иң ныҡ таралған штамм - А (H1N1)-2009 йәки "сусҡа гриппы"... "сусҡа киҙеүе", ул Рәсәйҙең 82 субъектында теркәлгән. Табиптар А(H3N2) һәм В вирусының да баш ҡалҡытыуын билдәләй. Ведомствола билдәләүҙәренсә, илдә прививка кампанияһы барышында 74 миллиондан ашыу кеше вакцина яһатҡан - был халыҡтың 52 проценты. Башҡортостанда иһә ул 49,9 процент тәшкил иткән.

✓Үҙенең телеграм-каналында республиканың мәғариф һәм фән министры Айбулат Хажин грипп һәм кисҡен респиратор инфекцияларына бәйле эпидемиологик хәл ҡатмарлашҡан осраҡта мәктәптәр санитар ҡағиҙәләргә һәм нормаларға ярашлы эш итергә тейешлеген иҫкә төшөрҙө. 2694-се пунктҡа ярашлы, балаларҙың 20 проценты һәм унан күберәге мәктәпкә килмәһә, белем биреү учреждениеһы етәксеһе уҡыу процесын туҡтатырға хоҡуҡлы.

✓Башҡортостан буйынса Эске эштәр министрлығында кадрҙар үҙгәрҙе. Ведомство етәксеһе Роман Деев вазифаһын ҡалдырҙы, вазифаға ваҡытлыса Артур Сәйфуллин тәғәйенләнде. Ул 2020 йылдың ноябренән Роман Деевтың урынбаҫары булып эшләгән.

✓ *Күпме аҡса түгелә һис туймаҫ Торлаҡ-коммуналь хужалыҡ "табағы"на: ҡаҙнанан да, ил граждандары кеҫәһенән дә! Ҡайҙа китеп тора ул аҡсалар? Йыл да бер үк проблемалар һәм уларҙы хәл итергә уйлаған кеше лә юҡ.*



*БЫНАҒАЙЫШ!*

# "СУРТАН"ДАРҒА ҺУНАР БАРА!

**Һуңғы осор әле социаль селтәрҙәрҙә, әле гәзит биттәрендә коррупция һәм ришүәтселектә ғәйепләнеп ҡулға алыныусы төрлө дәрәжә чиновниктар хаҡында хәбәрҙәр йышайҙы. Бының берәй ғилләһе бармы, әллә сираттағы кампанияларҙың береһенә старт бирелдеме?**

Яныраҡ, 9 декабрҙә, Коррупция менән көрәш көнө айҡанлы Рәсәйҙең Генераль прокуроры Игорь Красновҡа һорау биргән ТАСС хәбәрсеһе лә шулай уйлағандыр, бәлки. "Рәсәй пандемия менән бәйле ҡатмарлы осор кисерҙе, әле иһә махсус хәрби операция алып барыла, өҫтәүенә, сит ил санкциялары дауам итәлә. Бындай шарттарҙа коррупция менән көрәш икенсе планға күсмәнеме?"- тип һорай хәбәрсе. Ысынлап та, арыуыҡ ваҡыт был өлкәлә тынлыҡ урынлашҡандай тойолдо, әммә, И.Краснов әйтеүенсә, киң мәғлүмәт сараларында ғына. "Беҙҙең өсөн, - ти Генераль прокурор, - коррупцияға ҡаршы эшмәкәрлек уғата мөһим һәм көнүҙәк мәсьәлә булыуҙан туҡтағаны юҡ".

Аныҡлабыраҡ әйткәндә, был өлкәләге бөтөн эшмәкәрлек ил Президенты Владимир Путин тарафынан индерелгән "2021-2024 йылдарға коррупцияға ҡаршы көрәш буйынса Милли план"ға ярашлы алып барыла. Ә бит ришүәт, мутлашыу һәм коррупция осраҡтары менән беҙ көн дә тиерлек осрашабыҙ. Әйтәйек, әлеге хәбәрсе иҫкә алған пандемия осоро башланғаҫ ҡына ла битлектәр һәм респираторҙар менән бәйле әллә күпме мутлашыу, алыпһатарлыҡ, шәхси һаҡланыу сараларына ҡытлыҡ килтереп тыуҙырыуҙарҙың шаһиты булдыҡ! Мәҫәлән, бер генә факт: әлеге ваҡытта суд Иркутск өлкәһенең һаулыҡ һаҡлау министры вазифаһын башҡарған һәм улының фирмаһы аша алынған сифатһыҙ контрафакт битлектәр һатып алыу һылтауы менән 25 млн ҡаҙна аҡсаһын үҙләштергән ҡатынға ҡарата енәйәт эшен ҡарай. Башҡа өлкәләрҙәге коррупция енәйәттәре менән сағыштырғанда, был бер тамсы ғына. Коррупцияға ҡаршы Милли комитет рәйесе Кирилл Кабанов, электрон паспорт проекты буйынса елгә осҡан миллиардтар, дәүләт заказы системаһын булдырыу, контракттар буйынса юғалтыуҙарға бәйле юғары хәүеф сығанағы булараҡ, IT өлкәләге мутлашыуҙарҙы беренсе урынға ҡуйһа, икенсе урында - торлаҡ-коммуналь хужалыҡ (ЖКХ), ти. Ә бының шулай икәнен беҙ үҙ елкәбеҙҙә татып та һәйбәт беләбеҙ. Күпме аҡса түгелә һис туймаҫ Торлаҡ-коммуналь хужалыҡ "табағы"на: ҡаҙнанан да, ил граждандары кеҫәһенән дә! Ҡайҙа китеп тора ул аҡсалар? Йыл да бер үк проблемалар һәм уларҙы хәл итергә уйлаған кеше лә юҡ. Шул уҡ серек торбалар, шул уҡ нигеҙһеҙ сығымдар...

Бынаһына, ярай, күнгәнбеҙ ҙә ти, ә быуна ил өсөн ҙур һынау мәлендә дәүләт оборона заказы өлкәһендәге енәйәттәрҙе нисек аңларға? Йәп-йәш балалар махсус



операция барышында йәндәрен фиҙа ҡылғанда, кемдәрҙер үҙ ҡорһаҡтарын хәрәм аҡса менән тынҡыслай, башҡа һыйғыһыҙ! Рәсәй Тәфтиш комитеты быйыл ғына ла оборона-сәнәғәт комплексының 60 вазифалы чиновнигын һәм дәүләт оборона заказы менән бәйле 27 кешене енәйәт яуаплылығына тарттырған. Был коррупция тамырҙарының Рәсәй тәненә ни тиклем тәрән үтеп инеүе, хатта ки ошондай енәйәттәргә ҡаршы көрәшергә бурыслы органдарҙы ла ҡармап алыуы тураһында һөйләй, ватаныбыҙ өсөн ҡурҡыныс булып китә...

Быға тиклем хоҡуҡ һаҡлау органдарындағы коррупция кимәлен "Менттар һуғышы" сериалынан ҡарап, әкиәт, тип уйлай инек, асылда, бөтәһе лә тап фильмдағыса. Хәйер, был хаҡта бөтәбеҙгә лә мәғлүм булһа ла (шуларҙың берәгәйлеһе - 1,4 млрд һум күләмендә ришүәт алғаны өсөн 16 йылға хөкөм ителгән "алтын полковник" Д.Захарченко), тап хоҡуҡ һаҡлау органдарындағы, бигерәк тә коррупцияға ҡаршы көрәш ведомстволарындағы енәйәтселек масштабтарын күҙ алдына килтереүе лә ҡыйын. Быйылғы йыл башынан ғына ла Рәсәйҙә 1,4 мең хоҡуҡ һағы хеҙмәткәре, 679 хәрби, 420 урындағы үҙидара органдары чиновниктары, 356 мәғариф һәм 259 һаулыҡ һаҡлау системалары хеҙмәткәрҙәре енәйәт яуаплылығына тарттырылған, тип һөйләй Тәфтиш комитеты рәйесе Александр Бастрыкин "Новости" мәғлүмәт агентлығы менән әңгәмәлә. Ә инде масштабтарҙы күҙ алдына килтереү өсөн төпкәрәк китеп, иҫәпләп ҡарағанда, 2011 йылдан алып 72 мең вазифалы кеше хөкөм ителә, ә улар килтергән зыян 220 млрд һум тәшкил иткән.

Бына ҡайҙа беҙгә түләнеп еткерелмәгән эш хаҡтары, пенсиялар! Бына ни өсөн фәҡирлектән башыбыҙ сыҡмай. Быйыл иһә илдә коррупция енәйәттәренән күрелгән зыян 24,6 млрд һум тәшкил иткән. Ә ошо араларҙа ғына "суртан"дың оһоллоһон эләктергәндәр: Федераль таможняның коррупция менән көрәш өсөн төп яуаплы генералы Д.Мурышыв тиҫтәләгән млн ришүәт алғаны өсөн бер нисә статья буйынса ғәйепләнеп, ҡулға алынған. Балыҡ башынан серей, тигәндәре дөп-дөрөҫ. Хәйер, миҫалдар артынан бик алыҫ йөрөмәгәндә лә була. Өфө ҡала полицияһының иҡтисади хәүефһеҙлек һәм коррупцияға ҡаршы бүлек начальнигы Руслан Әхмәҙишин ҡалалағы казино хужаларына "ышыҡ" булып хеҙмәт иткәне һәм миллионлап ришүәт алғаны өсөн ошо араларҙа хөкөм алдына баҫасаҡ. Был нимә әле! Президент В.Путиндың 5 декабрь указы менән Башҡортостан буйынса Эске эштәр министры Роман Деев эштән бушатылды һәм был тикмәгә түгел, тип яҙа мәғлүмәт сығанаҡтары. Социаль селтәрҙәрҙә министрҙың яҡын кешеһе һәм урынбаҫары Андрей Москвитиндың ҡулға алыныуы менән бәйләйҙәр юғары чиновниктың отставкаһын. Унан һуң енәйәтсел төркөм ойоштороп, "алтынға ҡойонған" гаишник Илдус Шәйбәков тигән мут әҙәмде хәтерләйһегеҙме? "Дандары" илгә таралған был хеҙмәттәштәре лә нıҡ "ярҙам" иткәндер, күрәһең, министрҙың эштән китеүенә.

Һуңғы ваҡыттарҙа, эйе, көрәш бер ни тиклем әүҙемләшеүгә ҡарамаҫтан, юғары дәрәжәләге чиновниктар бик аҙ килеп эләгә. Нигеҙҙә ваҡ түрәләр һәм түбәнге чин хоҡуҡ һағы чиновниктары күпселеге 50 меңгә тиклем ришүәт алғандары өсөн рисуай була, ә бит, баяғыса, балыҡ башынан серей тигән кеүек, коррупция ептәрен тартып, сценарий режиссерҙары ролендә юғары пост башында ултырыусы эре вазифа биләүселәрҙән арыныу кәрәк иң тәүҙә. Коррупционерҙарҙың милкен, шулай уҡ сит илдәрҙәге активтарҙы ла, кире ҡайтарып, ил ҡаҙнаһына күсереү эше - башланмаған сиҙәм генә әле. Хәйер, был социаль афәтте еңеүсе ил юҡ, хатта үлем язаһы менән көрәшеүсе Ҡытайҙа ла ул дауам итә, тиеүҙәренә ҡарамаҫтан, көрәш торған һайын аяуһыҙыраҡ һәм компромисһыҙ алып барылһа ғына ниндәйҙер һөҙөмтә мотлаҡ буласаҡ, ти оптимистар.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## ? Яҙыусы бөгөн халыҡ трибуны була аламы?

***Миңлеғәле НӘҘЕРҒОЛОВ, филология фәндәре докторы, яҙыусы:*** Был бик етди һорау, әлбиттә. Эйе, ижадсы халыҡ трибуны булһа, ысын мәғәнәһендә халыҡ яҙыусыһына әйләнә. Беҙҙең әҙәбиәтебеҙ тарихына күҙ һалһаҡ, әллә күпме әҙиптәребеҙ, шағирҙарыбыҙ, драматургтарыбыҙ халыҡ мәнфәғәттәрен ҡайғыртып, халыҡ өсөн хәсрәтләнеп, янып ижад иткән тап ошондай шәхестәр булып тора ла инде. Әҙәбиәт тарихында ла, бөгөнгө әҙәбиәтебеҙҙә лә байтаҡ миҫалдар килтерергә була. Совет осорона тиклемге әҙиптәрҙе алғанда, Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев халыҡ трибуны булмағанмы ни? Ысын мәғәнәһендә шулай булған, башҡорт ерҙәре талаңыуға ҡаты ҡаршы сығып, батшаларға, урындағы власть органдарына бик күп тапҡырҙар мөрәжәт иткән. Хронологик тәртиптә дауам итһәк, Шәйхзада Бабич - туп-тура мәғәнәлә халыҡ трибуны. Хатта бәләкәй генә "Көтәм" тигән шиғырында ла туған халҡы өсөн янып-көйөп, дәлилле фекер әйтеүе, хис-тойғоларға бирелеүе бының сағыу бер миҫалы булып тора. Поэмаларында, "Башҡорт халҡына көйлө хитаб"ында Бабич шундай шәхес булып сығыш яһай ҙа инде. Артабан иҫәпләй китһәк, Рәми ағай Ғариповтың халыҡ мәнфәғәтен ҡайғыртып, туған тел өсөн янып-көйөп яҙылған шиғырҙары уның ысын мәғәнәһендә трибун ижадсы булыуын иҫбатлай.

80-се йылдарҙың икенсе яртыһынан илдә болғаныш, үҙгәртеп ҡороуҙар башланып киткәс, халҡыбыҙҙың мәнфәғәттәрен ҡайғыртып, тәбиғәтте, телде һаҡлау һ.б. башҡа мәсьәләләрҙе күтәреп, Рауил ағай Бикбаев күпме сығыш яһаны. 1980, 1990 йылдарҙа һәм 2000 йылдың башында ул ысын халыҡ трибуны булды. Ниндәй генә әҫәрен алып ҡарама, бигерәк тә поэмаларында, уның ижади асылы үтәнәнүтә күренеп тора. Шул осор шиғриәтен күҙ алдына килтергәндә, Рауил ағай үҙенең ижады менән иң алда барҙы, халыҡ исеменән бик көслө сығыштар яһаны. Әлбиттә, бүтән шағирҙарҙы ла онотторға ярамай. Рәйес Түләктең поэмалары - шулай уҡ халыҡ трибунының әҫәрҙәре. Прозала Ноғман ағай Мусиндың тәбиғәтте ҡайғыртып яҙған романдары үҙҙәре генә ни тора! Халыҡ мәнфәғәтен, ил байлығын ҡайғыртып яҙылған был китаптар - шулай уҡ халыҡ трибунының әҫәрҙәре. Драматургияла Флорид Бүләков, Нәжип Асанбаевтар яҙғанды ла мин халыҡ трибуны ҡәләменән сыҡҡан әҫәрҙәр тип ҡабул итәм. Совет йылдарында әҙәбиәтте үҫтереү идеология өсөн кәрәк булды. Башҡортостан Яҙыусылар союзы идараһы булдырылды, финанс яғынан да ярҙам ителде. 70-се, 80-се йылдарҙа әҙәбиәткә Хөкүмәт тарафынан иғтибар бик көслө ине. Халыҡ трибуны тип аталырҙай шәхестәр ҙә үҫеп сыҡты. Һуңғы йылдарҙа союздың Хөкүмәт тарафынан финансланмауы был эштең һүлпәнәйеүенең бер сәбәбелер тип ҡабул итәм. Шулай ҙа илдә барған ҡайһы бер ваҡиғаларға, махсус операцияға бәйле хәлдәр беҙҙең власть әһелдәрен бер аҙ уйландыра төштө шикелле. Яҙыусыға ҡараш үҙгәрергә тейеш. Сөнки яҙыусының һүҙе халыҡҡа тиҙ барып етә, халыҡҡа көслө тәьҫир итә, әгәр ул ваҡытында тейешле итеп әйтелә белһә.

**Фәрзәнә ФӘТИХОВА яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Роспотребнадзорҙың Башҡортостан буйынса идаралығы 12-23 декабрҙә иртәнге 10-дан киске 4-кә тиклем граждандарҙан коррупцияға ҡағылышлы хоҡуҡ боҙоуҙар буйынса тура бәйләнешкә шылтыратыуҙар ҡабул итә. Ведомствола шулай уҡ 8 (347) 229-90-34 номерлы "ышаныс телефоны" ла эшләй. Бынан тыш, коррупцияға ҡаршы мәсьәләләр буйынса дәүләт хеҙмәте һәм кадрҙар бүлегенә 8 (347) 229-90-56, 8 (347) 229-90-77 телефондары буйынса шылтыратып, консультация алырға була.

✓Яңы йыл байрамдары алдынан пенсионерҙар ғинуар айы өсөн аҡсаны ваҡытынан алда аласаҡ. Пенсияны банкта алған осраҡта иһә, ул декабрҙең һуңғы көндәрендә таратыла. Ә почта хеҙмәттәре аҡсаны ғәҙәттәгесә 3 ғинуарҙан тарата башлай. Был турала Рәсәйҙең хеҙмәт министры Антон Котяков Президент Владимир Путинға докладында хәбәр итте. Ведомство етәксеһе һүҙҙәренсә, киләһе йылдан пенсия Рәсәйҙең социаль фонды аша түләнә. Аҡсаны таратыу көндәре элеккесә ҡала. Мәҫәлән, быға тиклем айҙың 5-се көнөндә пенсия алғандарға артабан да ошо көндә түләнә.

✓Өфөлә власть, бизнес вәкилдәрен, эксперттарҙы берләштергән иҡтисади форум ойошторолдо. Эшлекле форум 2007 йылдан алып уҙғарыла, ул саҡта донъяның 9 иленән һәм Рәсәйҙең 20 төбәгенән 1,5 мең ҡатнашыусы йыйылды. 15-се Халыҡ-ара бизнес аҙналығында 3 меңгә яҡын ҡунаҡ, 20-нән ашыу илдең вәкилдәре ҡатнашты. Ҡатнашыусылар Шанхай хеҙмәттәшлек ойошмаһы илдәренең валютаһын булдырыу мөмкинлеген һәм башҡа мәсьәләләрҙе тикшерҙе.

✓Республика халыҡ ижады үҙәгендә коллективты яңы етәксе менән таныштырҙылар. Салауат Кирәев быға тиклем Нариман Сабитов исемендәге 1-се балалар музыка мәктәбе директоры булып эшләне. Салауат Илгиз улы Кирәев Ишембай районында тыуған. Республика халыҡ ижады үҙәгенең элекке директоры Артур Әлибәков ноябрҙән Өфө ҡалаһының Киров районы хакимиәте башлығы урынбаҫары булып эшләй.

✓Ял көндәрендә Башҡортостанда юл фажиғәләрен иҫкәртеү буйынса ЮХХДИ рейдтары үткәрелә. Тикшереү барышында иҫерек водителдәрҙе һәм балаларҙы машинала йөрөтөү ҡағиҙәләрен боҙоу осраҡтарына айырыуса иғтибар бүленә. "2022 йылдың 11 айында республика юлдарында 3200-ҙән ашыу юл-транспорт ваҡиғаһы теркәлгән, 380 кешенең ғүмере өҙөлгән, 3950-һе төрлө йәрәхәттәр алған", - тип билдәләнеләр ведомствола.

*ҠЫҪҠАСА*

# СОВЕТ МАЙҘАНЫНАН...

**Салауат Юлаев исемендәге өсөнсө башҡорт ирекле батальоны командиры, Эске эштәр министрлығының отставкалағы полковнигы Артур Йомағужин республиканың ветеран һәм патриотик ойошмалары етәкселәре менән осрашыу барышында Радий Хәбировка әлеге ваҡытта батальон яугирҙарының хәрби әҙерлек үтеүе хаҡында һөйләне:** "Радий Фәрит улы, батальон барлыҡ кәрәк-яраҡтар менән тәьмин ителде, егеттәрҙең рухы һүғышсан, барыһы ла махсус хәрби операция үткәреү зонаһына юлланырға әҙер. Үҙ теләге менән беҙҙең батальонға килгән йәш егеттәрҙә лә илһөйәрлек рухын күрәбеҙ". "Декабрь аҙағында Өфөнөң Совет майҙанында Салауат Юлаев исемендәге батальонды оҙатыу тантанаһы була, - тип билдәләне Радий Хәбиров. - Шулай уҡ үҡйылған хәрби бурыстарын үтәгәндән һуң, өс батальондың яугирҙарын да ошо майҙанда ҡаршы алырға йыйынабыҙ. Был - иҫтәлекле урын. Совет майҙанында башҡа патриотик саралар ҙа үткәрергә мөмкин. 2023 йылдың йәйендә ял көндәрендә унда автомобиль хәрәкәтен ябып, йәйәүлеләр зонаһын булдырырға тигән ниәтебеҙ бар".

✔ **Быйыл Рәсәйгә гриптың һаулыҡҡа етди зыян килтергән төрө килгән. Был хаҡта "Рәсәй 1" телеканалы эфирында Роспотребнадзор етәксеһе Анна Попова хәбәр итте.** Уның һүҙҙәренсә, 2009 йылда А (H1N1) вирусы пандемияның башланыуына сәбәпсе булды. Сусҡа киҙеүе өҙлөгөүгә килтереүе менән хәүефле, һаулығы ҡаҡшаған кешеләр араһында үлем осраҡтары ла бар. Роспотребнадзор грипҡа ҡаршы тейешле саралар күрә, мәҫәлән, мәктәптәргә яңы методик хат әҙерләнгән. "Әгәр уҡыусыларҙың 20 проценттан ашыуы дәрескә килмәһә, был класты (мәктәпте) дистанцион уҡыуға ебәрергә кәрәк. Балалар сирҙе бер-береһенә йоҡтормаһын өсөн уларҙы айырыу зарур", - тине Анна Попова. Сирҙең тәүге билдәләре: хәлһеҙлек, тән температураһы күтәрелә, тамаҡ ауыртып тора. Инкубация осоро кәм тигәндә - бер нисә сәғәт, күп тигәндә өтә көн тәшкил итеүе мөмкин. Күҙәтеү ведомствоһы етәксеһе быныҡ грипмы йәки ковидмы икәнен асыҡлау өсөн шунда уҡ табипҡа мөрәжәғәт итергә кәңәш бирҙе.

✔ **Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы хәрби хәрәкәттәр ветерандарына, шул иҫәптән махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға социаль ярҙам күрһәтеүгә һәм уларҙың хеҙмәт хоҡуғын яҡлауға йүнәлтелгән федераль закон проектын Дәүләт Думаһына индерҙе.** "Хеҙмәткәрҙәр һанын ҡыҫҡартҡанда граждандарҙың ошо категорияһына эш урынын һаҡлап ҡалыуға өҫтөнлөклө хоҡуҡ бирергә тәҡдим ителә. Федераль ҡануниәт хәрби хәрәкәттәр ветерандарына киң ярҙам сараларын, шул иҫәптән пенсия тәьминәте, медицина хеҙмәтләндереүе, һөнәри белем бирeү буйынса ташламаларҙы күҙ уңында тота. Әммә уларҙың хеҙмәт хоҡуғы яҡланмаған. Уларҙың Ватан алдындағы ҡаҙаныштарын иҫәпкә алып, ҡануниәттәге ошо етешһеҙлекте бөтөрөргә кәрәк тип иҫәпләйбеҙ", - тине парламент спикеры Константин Толкачев. Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы депутаттары пенсия алды йәшендәге граждандарға ла ошондай хоҡуҡ бирергә тәҡдим итә. Ике закон проекты ла Дәүләт Думаһының хеҙмәт, социаль сәйәсәт һәм ветерандар эштәре комитетына ҡарауға индерелде.

*МӨРӘЖӘҒӘТНАМӘ*

# МИН ҺЕҘГӘ ЫШАНАМ, ЯҠТАШТАР!

**15 декабрҙә Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Хәбиров БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың 49-сы ултырышы сиктәрендә парламентарийҙарға сираттағы Мөрәжәғәтнамә менән сығыш яһаны.**



● Радий Фәрит улы сығышының башында уҡ бынан дүрт йыл элек тәүге тапҡыр Мөрәжәғәтнамә менән сығыш яһағанда алда ниндәй һынауҙар көтөрөн берәү ҙә күҙ алдына килтерә алмағанын белдерҙе. Тәүҙә - таҗвәхмәт пандемияһы, хәҙер хәрби-сәйәси хәл-торош һынай беҙҙе. Ил Көнбайыштың тупланған көсөнә ҡаршы тора. Икенсе яҡтан илебеҙгә ҡарата төрлө санкциялар ҡулланыла. "Был һынауҙарҙы атай-олатайҙарҙан аманат итеп тапшырылған тыуған илгә һөйөү, уны яҡларға әҙер булыу кеүек рухи көс менән генә еңеп сығасаҡбыҙ. Хәҡиҡәт беҙҙең яҡта!" - тине ул. Шулай уҡ хәҙергә Рәсәйҙең донъяла элекке дәрәжәһен һәм абруйын кире ҡайтарыуын, яңы союздаштар һәм партнерҙар табыуын, хәрби һәм иҡтисади ҡеүәтен үҫтереүен, ҡабаттан бөйөк державаға әүерелеүен, ғәҙеллек һәм донъяның күп ҡырлы булырға тейешлеген һаҡлап ҡалырға тырышыуын билдәләне.

Радий Фәрит улы бөгөн донъяны нацизмдан яҡлап, Рәсәй өсөн республиканың меңәрләгән ирекмәне, мобилизацияланған ир-егеттәре, Рәсәй Геройҙары Миңлеғәле Шайморатов, Александр Достовалов исемендәге батальондары һуғышыуын һыҙыҡ өҫтөнә алып, алдағы аҙнала милли батырыбыҙ Салауат Юлаев исемендәге өсөнсө батальондың хәрби хәрәкәттәр зонаһына күҙғаласағын белдерҙе һәм: "Башҡортостан менән Донбасс төбәген электәлектән айырым рухи бәйләнеш бәйләп тора - унда генерал Шайморатов һәм атлылар дивизияһы яугирҙары иҫтәлеген ҡәҙерләп һаҡлайҙар. Йөҙәрләгән ир-егет - дәүләт наградаларына, өлкән лейтенант Максим Серафимов, прапорщик Тамерлан Илһамов, өлкән лейтенант Игорь Насибуллин үлгәндән һуң Рәсәй Геройы исеменә лайыҡ булды. Ошо көндәрҙә был юғары награда тағы ике яҡташыбыҙға - гвардия майоры Борис Дудко менән өлкән лейтенант Степан Беловҡа бирелде", - тине. Ил именлеген һаҡлап яуҙа баштарын һалған яугирҙар иҫтәлеген бер минут тынлыҡ менән иҫкә алғандан һуң, Радий Хәбиров республиканың Донбасҡа гуманитар ярҙам күрһәтеү менән бер рәттән, инфраструктураһын сафҡа индереү буйынса терәк булыуына ла туҡталды, Рәсәй Президенты Указы менән Башҡортостанда база әҙерләре, йәғни иҡтисади тотороҡлолоҡ, барлыҡ социаль йөкләмәләрҙе үтәүгә айырым яуаплылыҡ режимы индерелеүен билдәләне.

● Шуға ла бөгөн төп бурыс булып республиканың барлыҡ иҡтисади секторҙарының һөҙөмтәле эшмәкәрлеген тәьмин итеү тора. Был йәһәттән республиканың алдына ҡуйылған бурыстарын үтәүен ике йыл рәттән ил буйынса **сәнәғәт сәйәсәтен** һөҙөмтәле тормошҡа ашырыу рейтингында беренсе урын алыуы ла дәлилләй. Әлеге ваҡытта Башҡортостандың 23 предприятиеһы "Газпром" өсөн эшләнгән сит ил продукцияһын ватан продукцияһы менән алмаштырған, башҡа предприятиелар ҙа ошо йүнәлештә эшләй. Сәнәғәтте үҫтереү фондын капиталлаштырыу 1,3 миллиард һумға еткән, киләһе йылда уны тағы ла 200 миллион һумға арттырыу планлаштырыла. Кластерҙар сиктәрендә сәнәғәт етештереүе кооперацияһын ойоштороуға бөгөн ҙур иғтибар бирелә. Әлеге ваҡытта дүрт кластер бар, тағы ла бишәүҙе сафҡа индереү буйынса эш бара. Авиация һәм сәнәғәт кластеры федераль исемлеккә индерелеп, федераль ярҙам алыуға дәғүә итә. Ғөмүмән, сәнәғәттең айырым тармаҡтарына ярҙам программаһы ваҡытлы һәм һөҙөмтәле булыуын аҡлай, шуға күрә Радий Фәрит улы Хөкүмәткә уларҙы һаҡларға һәм алдағы йылдарҙа финанслау күләмен арттырырға, ә киләһе йылдан инвалидтарҙы реабилитациялауҙың техник сараларын етештереү һәм түмәр-солоҡ умартасылығын үҫтереү буйынса программаларҙы тормошҡа ашыра башларға ҡушты.

● Башҡортостан **инвестиция** рейтингы буйынса илдә иң яҡшы биш субъект иҫәбенә инә. Рәсәй һәм сит ил инвесторҙары республикаға ышаныс белдерә. Әлеге ваҡытта иң һөҙөмтәле үҫешеүсе зона булып "Алға" иҡтисади зонаһы тора һәм алдағы йылда ла уның инфраструктураһы әүҙем үҫтереләсәк. Беларусь Республикаһы менән яңы сифатлы хеҙмәттәшлек булдырыған, Ҡаҙағстан, Үзбәкстан, Ҡытай Халыҡ Республикаһы менән тығыҙ эшмәкәрлек алып барыла, Иран, Көньяҡ-Көнсығыш Азия һәм башҡа дәүләттәр менән хеҙмәттәшлек ҡеүәте тулыһынса асылып бөтмәгән әле.

● **Ауыл хужалығына** килгәндә, быйыл бынан 30 йыл элекке рекорд ҡабатланған - 5 миллион тоннанан ашыу иген йыйып алынған. Был тармаҡты техник һәм технологик йыһазландырыу һөҙөмтәһендә мөмкин булған, сәнки дүрт йылда барлығы 12 мең техника һатып алынған. Киләһе йылда Ауырғазы, Илеш, Дыуан, Йәрмәкәй райондарында эре проекттар эш башлаясаҡ. "Бөгөн ауыл хужалығы ерҙәре, агросәнәғәт продукцияһы стратегик ресурс булып тора, - тине Радий Фәрит улы. - Ҡайһы бер райондарҙа буш ерҙәр ҡалмаһа, икенсе урында улар һөҙөмтәһеҙ файҙаланыла, бөгәҙеләренең бөтөнләй хужаһы юҡ. Киләһе йылда ауыл хужалығы тәғәйенләнешендәге ерҙәргә инвентаризация үткәреп, уларҙы әйләнешкә

**Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е**

✔Өфө ҡала мэры Ратмир Мәүлиев үҙенең социаль селтәрҙәрҙәге сәхифәһендә Пугачев урамын реконструкциялауҙың барышы менән таныштырҙы. Әлеге ваҡытта бында ҡоймаларҙы һәм тимер-бетон плиталарҙы алғандар. Газ селтәре көсәрелә, һыу һәм канализация торбалары һалына. Төҙөлөш өсөн 100 мең кубометр ҡом килтерелгән. Эш графикка ярашлы башҡарыла, унда хәрәкәт 2024 йылдың 30 июненә тиклем ябыҡ буласаҡ.

✔Яңы 2023 йыл алдынан 15 декабрҙән 31-енә тиклем Өфө ҡалаһында, ғәҙәттәгесә, ылыҫлы ағастар менән сауҙа итеү ойоштоpола. Шыршы баҙарҙары өсөн халыҡ күп йөрөгән урындар һайланған. Сауҙалашыу һөҙөмтәләре буйынса тейешле килешеүҙәр төҙөлгән. Өҫтәмә рәүештә ҙур сауҙа предприятиелары эргәһендәге биләмәләрҙә, ауыл хужалығы һәм фермер йәрминкәләрендә шыршы һатыу ойошторола.

✔Өфөлә Яңы йыл төнөндә байрам фейерверкы булмай. 31 декабрҙә Рус драма театры алдында баш ҡала халҡы һәм ҡунаҡтары өсөн концерт программаһы ойоштороласҡ. Концерт киске сәғәт 8-ҙә башлана һәм төнгә 2-гә тиклем дауам итә. Яңы йылды ҡаршылау өсөн Өфөлә Ленин исемендәге һәм "Торатау" конгресс-холы алдындағы майҙансыҡтарҙы әҙерләйҙәр. Шулай уҡ ҡалала 16 район шыршыһы, шул иҫәптән 8 үҙәк, сауҙа үҙәктәре һәм предприятиелар биләмәләрендә 90 Яңы йыл шыршыһы ҡуйыла, шулай уҡ йорт яны биләмәләрендәге 123 майҙансыҡты биҙәйҙәр.

✔Өфө аэропортының матбуғат хеҙмәте хәбәр итеүенсә, 5 ноябрҙән Red Wings авиакомпанияһының Өфөнән Ташкентҡа тура рейстары асылды. Осоштар шәмбе көндәрендә Sukhoi SuperJet 100 самолеттарында башҡарыла. Баш ҡала аэропортында белдереүҙәренсә, әлеге ваҡытта "ЮТэйр" һәм Uzbekistan Airways авиакомпаниялары аҙнаһына бер тапҡыр "Өфө" аэропортынан Ташкентҡа осош программаларын бойомға ашыра.

✔Әгәр декабрҙең беренсе декадаһы норманан 7-11 градусҡа һыуығыраҡ булһа, икенсе ун көнлөктә йылытыуы ихтимал. Уҙған ял көндәрендә, ниһайәт, республикала йылытты. 20 декабргә тиклем республикала уртаса һауа температураһының норманан 1-2° юғарыраҡ булыуы көтөлә.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

***✓ Һәр йылдың 14 декабре милләттәштәребеҙҙең үҙ өйөндә туған телен йәшәтеү өсөн һалған тырышлыҡҡа, хөкүмәттең был өлкәләге иғтибарлы эшмәкәрлегенә, йәмәғәтселектең әүҙемлегенә йыл йомғағы кеүек булһын ине.***



*ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!*



# БАШҠОРТ БИҘӘҮЕСТӘРЕ

## Яға

Учалы ҡалаһынан көньяҡтараҡ урынлашҡан ауылдарҙа иһә яғалар ҙурлығы, формаһы, төҙөлөшө йәһәтенән айырыла. Мәҫәлән, төп сығышы менән Яңы Байрамғол ауылынан булған Таһирова Фатима Таип ҡыҙында һаҡланыусы ҡомартҡының фотоһүрәтендә биҙәүестең барлыҡ матурлығы сағылыш тапҡан. Был яғаның үҙенсәлектәре тураһында шуны әйтергә мөмкин: өҫтән аҫҡа теҙелеп төшкән тәңкәләр рәтенең (ҡор) һаны ун икегә тура килә.



Оҙонлоғо - 42,5 см; өҫкө яҡ киңлеге - 28 см; аҫҡы яҡ киңлеге - 37 см; ауырлығы - 3115 грамм. Иң боронғо тәңкә - XVIII быуаттың тәүге яртыһына ҡараған бер һумлыҡ. Шундай ҙур аҡсалар бишәү: 1802, 1811, 1850, 1896 йылғылар.

Шул уҡ ауылға ҡараған тағы бер матур өлгө хәҙерге көндә Учалы ҡалаһында йәшәүсе Ҡолбәйетова Зөлхизә Мәүлитбай ҡыҙында һаҡлана.



Яғаның оҙонлоғо - 44 см; өҫкө яҡ киңлеге - 27 см; аҫҡы яҡ киңлеге - 37 см; ауырлығы - 1480,0 грамм. Иң боронғо тәңкә XX быуат баштарына тура килә. Өҫтән аҫҡа теҙелеп төшкән тәңкәләр рәтенең (ҡор) һаны ун бер.

Был ике яғаны үҙ-ара сағыштырып ҡарағанда уртаҡ һәм айырмалы яҡтар барлығы күҙгә салына. Күренеүенсә, төҙөлөшө йәһәтенән улар араһында айырма ҙур түгел. Өҫтән аҫҡа ҡарай төшкән тәңкәләр рәте (ҡор) һаны буйынса тулыһынса тиерлек тап килә. Ике яғаны ла берләштереүсе элемент - тәңкәһеҙ ҡалдырылған селтәрле "тәҙрә". Үкенескә күрә, хәҙерге көндә асыҡ ҡалдырылған был "тәҙрә"нең тәғәйенләнешен аңлата алыусылар юҡ. Бер фараз буйынса, кендек кешене һаҡлаусы, яҡлаусы булып иҫәпләнә, шуға күрә лә уның тапҡырын асыҡ ҡалдырыу мөһим. Өҫтәп шуны әйтергә кәрәк: башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының яғаһы тураһында һүҙ алып барылған сығанаҡтарҙың береһендә лә уларҙың төҙөлөшөнә ҡарата ҡулланылған атамалар телгә алынмай тиерлек. С.И. Руденконың "Башкиры" тигән хеҙмәтендә "төйөк" һүҙе осрай: "...сетка всегда кончалась бахромой (төйөк)". Дөйөм алғанда, "өҫтө", "аҫты", "уртаһы" тигән һүҙҙәр менән уларҙың айырым өлөштәрҙән тороуын белдерәләр. Китаптарҙа тулы киməлдә сағылыш тапмауына ҡарамаҫтан, атамалар халыҡ телендә нығынып ҡалған. Был Силәбе өлкәһе Мейәс буйы башҡорт ауылдары, Башҡортостан Республикаһы Учалы районының төньяҡ һәм көньяҡ өлөшө, шулай уҡ Әбйәлил һәм Белорет райондарының ҡайһы бер ауылдарындағы халыҡтың һөйләү телен үҙ эсенә алған мейәс һөйләшенә хас: "йағаның мына ошондай өлөштәре була: иң өҫтө - һапма, аға йетә - ҡыйыу, анан түбән - бүлмә, шунан - ҡор, билдек, селтер, өхкө тойаҡ, тойаҡ тәңкәһе". Ошо диалектологик материалға ярашлы, яға һигеҙ өлөштән тора һәм уларҙың һәр береһенең айырым атамаһы бар. Тап шул эшләнеше яғаны башҡа төр биҙәнеү әйберҙәренән айырып тора ла инде. Хәҙерге көндә яғаны тергеҙеү эшенә тотоноусыларға был үҙенсәлектәргә айырыуса иғтибар итергә кәрәк.

**Азат ҒАРИПОВ,**
**этнограф.**
**"Башҡорт биҙәнеү әйберҙәре"**
**китабынан.**

*ЙЫЛ ВАҠИҒАҺЫ*

# ТУҒАН ТЕЛЕБЕҘ...

## көн һайын байрамға сәбәп булһын



**Башҡортостан халҡы дәррәү билдәләгән матур байрамдарыбыҙ бихисап. Шулар араһында 2015 йылдан йәмәғәтселек көстәре менән ойошторола килеп, 2019 йылда Башҡортостан Башлығы Радий Хәбировтың Указына ярашлы рәсми билдәләнгән Башҡорт теле көнө лә бар. Был әһәмиәтле дата 14 декабргә, башҡорт халҡының бөйөк уланы, шағир-мәғрифәтсе Мифтахетдин Аҡмулланың тыуған көнөнә тура килә һәм йыл да төрлө ярыштар, шиғри флешмобтар, кисәләр, осрашыуҙар, түңәрәк ҡорҙар, сағыу саралар ярҙамында олоһон да, йәшен дә берләштерә. Быйыл да тап шулай булды.**

Байрам саралары Рәсәйҙең башҡорттар күпләп йәшәгән алты төбәгендә уҙғарылды. Өфөлә иһә байрам Башҡорт дәүләт педагогия университеты алдындағы Мифтахетдин Аҡмулла һәйкәленә сәскәләр һалыуҙан һәм уҡыуҙа, фәнни эшмәкәрлектә алдынғылыҡ күрһәткән студенттарға шағир-мәғрифәтсе исемендәге премия тапшырыуҙан башланды. "Башҡорт теле, милләт теле, туған тел - халҡыбыҙҙың иң мөһим байлығы булыуын барыбыҙ ҙа аңлайбыҙ. Башҡорт телен һаҡларға, үҫтерергә кәрәк. Башҡорт телен өйрәнеү модала булырға тейеш, тип әйтергә теләйем. Барығыҙҙы ла ошо байрам менән ҡотлайым!" - тип мөрәжәғәт итте Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров байрам сараларына старт биреп.

Әйткәндәй, баш ҡалабыҙҙа ғына ла ул сараларҙың һаны 50-нән ашып китте. Район һәм ҡала хакимиәттәре башлыҡтары башҡортса шиғыр һөйләү флешмобына ҡушылды, социаль селтәрҙәрҙә, киң мәғлүмәт сараларында һәм урамдарҙағы реклама бағаналарында темаға ярашлы мәғлүмәт урын алды. "Башҡортостан" дәүләт концерт залында Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы тарафынан иғлан ителгән Башҡорт мәҙәниәте йылы һәм рухи мираҫ йылын йомғаҡлау сараһын да Башҡорт теле көнөнә тура килтереп ойоштorҙолар. Республиканың алты төбәгендә үткән "Ижади майҙан" проектының һуңғыһы, йәғни етенсеһе Өфөлә үтте, төрлө майҙансыҡтар гөрләп эшләп торҙо. "Мәҙәниәт һәм әҙәбиәт" майҙансығында Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаты, Башҡортостан Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе Зәки Әлибаев, тележурналист, "Ашҡаҙар" радиоһы етәксеһе, Өфө ҡалаһы башҡорттары ҡоролтайы рәйесе урынбаҫары Гәүһәр Батталова журналистар, яҙыусылар, театр артистары, китапханасылар, студенттар өсөн "Ғаиләлә һәм мәктәптә илһөйәрлек тәрбиәһе" темаһына түңәрәк ҡор ойошторҙо. "Урал батыр" эпосының "Яҡшылыҡ булһын атығыҙ, Кеше булһын затығыҙ!" тигән саҡырыуына ауаздаш ине бында ҡатнашыусыларҙың сығыштары. Күп ер-һыу күргән әҙибә Гөлсирә Ғиззәтуллина телде һаҡлау, үҫтереү буйынса үҙенең тормош тәжрибәһе менән уртаҡлашты. Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Рәшит Шәкүр, филология фәндәре докторы Фәнил Күзбәков уҡытыу системаһына ҡалғылған мөһим мәсьәләләрҙе күтәрҙе, йәш быуынға рухи тәрбиә биреү буйынса үҙҙәренең тәҡдимдәрен дә еткерҙе. "Ағиҙел" журналының баш мөхәррире Мөнир Ҡунафин үҙенең сығышында йәштәрҙең туған телгә мөнәсәбәтенә ҡағылды, милли ғорурлыҡ тәрбиәләү, милли үҙаң тураһында фекерҙәре менән уртаҡлашты. Шағирә Гөлнара Хәлфетдинованың башҡорт телен үҙаллы өйрәнгән Шура исемле төрөк ҡыҙының тарихын бәйән итеүе күптәрҙә ҡыҙыҡһыныу уятты. "Ғаиләлә һәм мәктәптә илһөйәрлек тәрбиәһе"нә арналған майҙансыҡ үҙ маҡсатына өлгәште. Йәш кеше булһынмы, өлкәнеме, асыҡтан-асыҡ үҙенең ҡарашын еткерҙе, тәжрибәһе менән дә, шик-шөбһәһе менән дә уртаҡлашты.

Башҡортостандың халыҡ шағиры Рәми Ғарипов ижадын сағылдырған бер нисә сара ла әҙиптең тыуыуына 90 йыл тулыуға һәм Башҡорт теле көнөнә бағышланды. Мәҫәлән, баш ҡалалағы сауҙа үҙәктәрендә республика театрҙары артистары һәм төрлө уҡыу йорттары студенттары ҡатнашлығында үткән майҙансыҡтарҙа шағирҙың "Туған тел" шиғыры яңғыраны. Ә был шиғырҙың донъя халыҡтары телдәренә тәржемәһе тупланған йыйынтыҡ Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы тарафынан нәшер ителде. Проект авторы - шағирә Лариса Абдуллина һәм Беларусь Республикаһынан Светлана Быкова, рәссамы Азамат Ғарипов, дизайнеры Анатолий Корнеев. Шиғырҙы Рәсәйҙең һәм сит илдәрҙең 54 ҡәләм оҫтаһы 45 телгә тәржемә иткән. Хәҙер "Туған тел" рус, авар, себер татарҙары, нуғай, ҡумыҡ, украин, итальян, белорус, цахур, фарсы һәм башҡа телдәрҙә ғорур яңғырай.

Шулай уҡ "Башҡортостан" дәүләт концерт залында "Минең Рәми" төбәк-ара шиғри конкурсын йомғаҡлау сараһы үтте. Был ярышта быйыл 800-ән ашыу кеше ҡатнашҡан, шуларҙың ун өсө генә финалға уҙған. Бына шундай ҡатмарлы һынау үтеп, Гран-приҙы һәм 100 мең һумлыҡ сертификатты Хәйбулла районынан Тимур Сынбулатов яуланы.

Башҡортостандың Милли музейында байрам сараһы булараҡ "Тамға" III халыҡ-ара башҡорт милли кейеме оҫталары конкурсының иң яҡшы эштәре күргәҙмәһе асылды. Сарала ҡатнашыусыларҙы Башҡортостан Башлығы Хакимиәтенең беренсе урынбаҫары Урал Килсенбаев, "Бәхет биләмәһе" хәйриә фондының попечителдәр советы рәйесе Каринэ Хәбирова, РФ Дәүләт думаһы депутаты Элвира Айытҡолова һәм башҡа мәртәбәле ҡунаҡтар тәбрикләне. Экспозицияла конкурс финалына сығыусыларҙың, оҫталарҙың, костюмдар буйынса рәссамдарҙың һәм дизайнерҙарҙың эштәре күрһәтелде. "Башҡорт халҡының кейеме фотоһүрәттәрҙә һәм реконструкцияларҙа" китабының презентацияһы үтте. Китапҡа Рәсәй Фәндәр академияһының Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты фондында һаҡланған, ғаилә архивтарынын алынған һәм "Тамға" конкурсы оҫталарының фотоһүрәттәр коллекцияһы ингән.

Был көндә Башҡортостандың барлыҡ белем усаҡтарында "Башҡорт телен яратам" тигән башҡорт теле буйынса берҙәм дәрес үткәрелде. М. Аҡмулла исемендәге БДПУ-ла "Аҡмулла һүҙе" республика конкурсы, Өфө фән һәм технологиялар университетында "Туған телем - илһамым" шиғыр һөйләүселәр конкурсы, "Башҡорт теле оҫталары" викторинаһы, башҡортса КВН уйыны уҙғарылды. "Мега" сауҙа-күңел асыу үҙәгендә "Туған телем - башҡорт теле" концерт акцияһы Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы, башҡорт эстрадаһы йондоҙҙары, "Бишбармаҡ" оркестры һәм "Зәйнетдин" этно-шоу проекты ҡатнашлығында сағыу тамашаға ҡала халҡын йәлеп итте. Тағы ла З. Биишева исемендәге "Китап" нәшриәтендә "Автограф көнө" һәм балалар өсөн китаптарҙың презентациялары уҙғарылды. Көн дауамында шау-гөр килеп үткәрелгән барлыҡ тантаналы, сағыу сараларға М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театрының яңыртылған төп сәхнәһендә тәүге тапҡыр күрһәтелгән "Аҡмулла" спектакле матур йомғаҡ-нөктә ҡуйҙы.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ҡыштың сатлама һыуыҡ бер көнө меңәрләгән милләттәштәр ҡатнашлығында күңелдәрҙе йылытыр, илһамландырыр, хәл ителәһе мәсьәләләр төйөрөн башлап һүтер, халҡыбыҙҙың яҡты киләсәгенә өмөт уятыр мәлгә әүерелде. Сөнки ул беҙҙең иң ҡәҙерле ҡиммәтебеҙ - туған телебеҙҙе хәстәрләгән, уның күркәмлеген сағылдырған, йәш быуынға әһәмиәтен аңлатҡан, Башҡортостанда татыу йәшәгән башҡа халыҡ вәкилдәрендә ихтирам тойғоһо уятҡан саралар, ваҡиғалар һәм кешеләр менән мөлдөрәмә тулы булды. Был матур йола киләсәктә тағы ла киңерәк ҡолас алып дауам итер, моғайын. Тик һәр йылдың 14 декабре милләттәштәребеҙҙең үҙ өйөндә туған телен йәшәтеү өсөн һалған тырышлыҡҡа, хөкүмәттең был өлкәләге иғтибарлы эшмәкәрлегенә, йәмәғәтселектең әүҙемлегенә йыл йомғағы кеүек булһын ине. Башҡорт телен йылына бер тапҡыр иҫкә төшөрөүгә әүерелеп ҡуймаһын берүк.**

**Сәриә ҒАРИПОВА әҙерләне.**

***✓ Галки ауылын азат итеү өсөн барған алышта дошмандың үҙйөрөшлө орудиеһын юҡ итә. Ошо алышта ул яралана, әммә яу яланында ҡалып, командирҙарын элемтә менән тәьмин итә.***



*ХӘҠИҠӘТИ ҺҮҘ*

# БОРОНҒО БАШҠОРТОСТАН

## Беренсе киҫәк. Боронғо дәүер.

### Өсөнсө бүлек. Иртә тимер эпохаһы



Ошо турала археология байтаҡ ҡына бәхәсһеҙ дәлилдәр бар. Мәҫәлән, иртә тимер быуатында ла Төньяҡ Ҡара диңгеҙ буйына Көньяҡ Урал баҡыры күпләп килтерелә. Был хаҡта б.э. тиклем VI-IV быуаттарға ҡараған күп кенә ҡомартҡыларҙа табылған баҡыр-бронза әйберҙәрҙең составын тикшергәндән һуң беленде: уларҙың 24-36% Көньяҡ Уралдан килтерелгән баҡырҙан ҡойолған. Бай археологик материал аша тауарҙарҙың кире йүнәлештә, йәғни Көньяҡ Уралға килтерелеүен асыҡлап була. Был осорҙа Төньяҡ Ҡара диңгеҙ буйында етештерелгән ювелир әйберҙәренән: ольвия көҙгөләренең, һырғаларҙың, һәм башҡа шундай нәмәләрҙең бында күпләп килтерелеүе күҙәтелә. Алтын һәм баҡыр ятмаларына хужа булыу өсөн исседондар, аримасптар һәм аргиппейҙар араһында йыш ҡына конфликттар ҡубып тора, был Геродот хеҙмәтендә сағылыш тапҡан. Ул, айырым алғанда, былай тип яҙа: "Барса был халыҡтар күршеләре менән йыш һуғышалар, беренсе булып аримасптар һуғыш башланы. Аримасптар исседондарҙы илдән ҡыуҙы, ә исседондар скифтарҙы ҡыҫырыҡлап сығарҙы".

Геродоттың юғарыла килтерелгән мәғлүмәттәре унан алдараҡ йәшәгән авторҙарҙың хеҙмәттәренә нигеҙләнә. Улар араһында исседондар иленә сәйәхәт иткән, б.э. тиклем VII быуатта йәшәгән шағир Аристей төп урынды биләй. Тап ул аримасптарҙың йылҡы өйөрҙәренең һәм мал көтөүҙәренең күп булыуы хаҡында яҙып ҡалдырған. Дамаста Сигейский мәғлүмәттәре бер ни тиклем үҙаллы булып күренә. Ул, мәҫәлән, үҙе белгән Риппей тауҙары буйлап һалҡын төньяҡ елдәренең даими иҫеп тороуы хаҡында яҙа, ә был тулыһынса ысынбарлыҡҡа тап килә. Хәҙерге заман тикшеренеүҙәренә ярашлы, Көньяҡ Уралда, бигерәк тә уның көнсығыш итәктәрендә, йәйҙәрен төньяҡ елдәре өҫтөнлөк итә, ҡайһы саҡта уларҙың тиҙлеге 18-21 м/с етә. Тап ошо елдәр арҡаһында бында климат ярайһы уҡ һалҡыная. Көньяҡ Урал тураһында ошондай деталдәрҙе тик бында булып киткән кешенең генә белеүе мөмкин.




*Карта № 3. Геродот мәғлүмәттәре буйынса (б.э. тиклем V б.) Көньяҡ Уралда һәм уға йәнәш территорияларҙа йәшәгән ҡәбиләләрҙең урынлашыуы (яҡынса). 1 - фиссагеттар; 2 - дай (даик, дахтар); 3 - исседондар, аримасптар, аргиппейҙар, иирктар; 4 - сактар, массагеттар; 5 - савроматтар.*

**Нияз МӘЖИТОВ.**
**Әлфиә СОЛТАНОВА.**

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ тәржемәһе.**
**(Дауамы. Башы 28-се һанда).**

*ӘҘЛӘНЕҮҘӘР*

# ӨФӨ УРТАҺЫНДА...

## яңы археологик табыш



**Октябрь революцияһы урамында барған ҡаҙыныу эштәре барышында 18-19-сы быуатҡа ҡараған ҡомартҡылар табылған. Эштәрҙе М.Аҡмулла исемендәге БДПУ-ның Тарих, хоҡуҡ һәм социаль-гуманитар белем биреү институты педагогтары, студенттары һәм аспиранттары алып барған.**

Законға ярашлы, төҙөүселәрҙең бөтөн эштәре лә археологик тикшеренеүҙәр менән ныҡытылырға тейеш. Октябрь революцияһы урамын ҙур реконструкция көтөү сәбәпле, ошондай эштәр былтыр әүҙем башҡарыла. Ватан тарихы кафедраһы доценты Николай Щербаков билдәләүенсә, мәҙәни ҡатлам башлыса ихаталарҙа табылған. Шулай уҡ юл ҡатламын яңыртыу көтөлгәс, унда ла тикшереүсе шурфтар һалынған. Һөҙөмтәлә, уларҙың береһендә бөгөнгө көнгә тиклем һаҡланған мәҙәни ҡатлам барлығы билдәле булған. "Быныһы беҙҙең өсөн бигерәк көтөлмәгән хәл булды. Октябрь революцияһы урамы күп тапҡыр яңырыу кисерә - иҫке йорттарҙы яңылары алыштыра, юлдар, тротуарҙар үҙгәртеп һалына, ағастар ултыртыла. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, мәҙәни ҡатлам һаҡланған һәм ул 18-19-сы быуаттарға ҡарай", - ти Николай Щербаков.

Тикшерелгән майҙан 2,5 мең квадрат метр тәшкил итә. Балсыҡтан яһалған керамика фрагменттары ғына ла 80-дән ашыу. Һарыҡ, кәзә һөйәктәре, ат тештәре бар. Шулай уҡ быяла әйберҙәр осраған. Алкоголле эсемлек шешәләренә баҫылған мисәт - пломба ла тарихсылар өсөн ҡыҙыҡлы асыштарҙың береһе. Был штамп өҫтөнән тағы ла таж һүрәте һуғылған. Белгестәр булған бөтөн каталогтарҙы ҡарап сығып, Өфөлә табылған штампҡа оҡшағанын тапмай. Был таждарҙың, ғәҙәттә, ике - немец һәм инглиз төрө була. Беҙҙә табылғаны инглиз төрөнә ҡарай. Бындай пломба-мисәттәрҙә таж аҫтына London тип яҙыла. Был өлгөлә латин хәрефтәре лә, кириллица ла осрай, йәғни, был ниндәйҙер реплика икәне асыҡ. Петр I 18-се быуат уртаһында дворяндарға шарап етештерергә рөхсәт итә һәм уларҙың инглиз шешәләренә оҡшатып, ошо рәүешле репликалар эшләй башлауы билдәле.

Яҙ ҡар ирегәс, ҡаҙыныу эштәре дауам итәсәк. Өс йыл буйына БДПУ тарихсылары тикшеренеү үткәреп, ғилми отчет яҙасаҡ. Шунан барлыҡ артефакттар дәүләт музей фондына тапшырыласаҡ.

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 77*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Днепр ярҙары - батырлыҡ майҙаны

58-се гв. атлы полкының ҡылыссылар взводы командиры ярҙамсыһы, өлкән сержант Шакирйән Йосоп улы Ғәтиәтуллин (Туймазы районы Мулла ауылынан, хәҙер Октябрьский ҡалаһы сиктәренә инә) үҙенең яуҙаштары менән дошман траншеяһына бәреп инә. Шул саҡта егет йылға аша кисеүселәрҙе утҡа тотоусы немец пулеметына иғтибар итә. Ул, дошман тылына үрмәләп барып кереп, немецтарҙың пулемет расчетын юҡ итә, пулеметты патрондары менән алып китә. Үҙебеҙҙең яугирҙар яғына йүнәлгәс, дошман һалдаттарына юлыға. Трофей пулеметынан мәргән ут асып, дошманды ергә һырыҡтыра. Советтар Союзы Геройы Шакирйән Ғәтиәтуллин һуғыштан аҙаҡ тыуған яғында ябай нефтсе булып эшләй, өлгөлө эшсе булараҡ та танылыу таба.

Ҡаҙаҡ ССР-ы Чимкент өлкәһенең Ванновка ауылында тыуып үҫкән егет, 60-сы гв. атлы полкының элемтә взводы телефонисы, ефрейтор Константин Грицынин үҙенең ике иптәш яугиры - старшина И. Жидко һәм рядовой Мәсғүтов менән 26 сентябрҙә төнөн Днепр йылғаһы аша йылға төбөнән телефон линияһы һуҙа. Уң яҡ ярҙа телефон аппаратын тоташтыралар, ул эшләмәй, тимәк, һөжүмгә барған десант эскадроны менән элемтә булмаясаҡ. Грицынин, элемтә сымының өҙөлгән урынын табыу маҡсаты менән, бер өҙөкһөҙ һалҡын һыуға сума-сума, бик ныҡ өшөүгә ҡарамайынса, байтаҡ ҡына араны йөҙөп уҙа. Ул сымдың өҙөлгән урынын ялғай, һул ярҙағы полк һәм дивизияның команда пункттары менән элемтә булдырыла. Һуңынан ул Галки ауылын азат итеү өсөн барған алышта дошмандың үҙйөрөшлө орудиеһын юҡ итә. Ошо алышта ул яралана, әммә яу яланында ҡалып, командирҙарын элемтә менән тәьмин итә. 1943 йылдың 12 октябрендә алған яраларынан вафат була, уға үҙе үлгәндән һуң Советтар Союзы Геройы исеме бирелә.

Шулай уҡ СССР-ҙың иң юғары наградаһына Украинаның Харьков өлкәһе Новобогдановка ауылында тыуып үҫкән Николай Калинич лайыҡ була. Ул 60-сы гв. атлы полкының 2-се эскадроны командиры ярҙамсы вазифаһында хеҙмәт итә. 1943 йылдың 18 сентябрендә яуҙаштары менән Чернигов өлкәһенең Березна һәм Бегач ауылдарын азат иткәндә беренселәрҙән булып атакаға бара, юғалтыуҙарға дусар ителгән немец һалдаттары ҡасыу яғын ҡарай. 27 сентябрҙә эскадрондың 2-се отделениеһы яугирҙары составында Днепрҙың уң яҡ ярына иң тәүгеләрҙән сыға, отделение, яр буйында дошман менән алышҡа инеп, плацдарм биләй, арттараҡ килеүсе подразделениеларҙы дошмандың тура утынан ҡурсалай.

Дивизиябыҙҙың Советтар Союзы Геройҙары иҫәбендә 58-се гв. атлы полкының беренсе медицина ярҙамы пунктында хәрби фельдшер вазифаһын башҡарыусы медицина хеҙмәтенең гв. өлкән лейтенанты Яҡупов Николай (Кәлимулла) Яҡуп улы ла бар. Ул Минзәлә кантонының Иштирәк ауылында (хәҙерге Татарстандың Туҡай районы) тыуған. Совет-фин һуғышында ҡатнаша, 1941 йылдың йәйенән бирле фронтта хәрби фельдшер хеҙмәтен башҡара, Ҡыҙыл Йондоҙ орденына лайыҡ була. Днепр аша сыҡҡанда, уң яҡ ярҙа плацдарм өсөн барған алыштарҙа яраланған яугирҙар күп була. Яҡупов балыҡсы кәмәһендә яралыларҙы һул ярға алып сыға, тәүге ярҙам күрһәтә. 26 сентябрҙән 27 сентябргә ҡаршы төнөн Днепр аша 27 тапҡыр сыға, яраланған 74 һалдат һәм офицерҙы ҡотҡара. Уң ярға боеприпастар ҙа ташый.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

✓ *Атайыбыҙ етди генә итеп бер әйтһә, беҙгә шул етә торғайны. Үҙе мәктәптә уҡытыусы, директор, силсәүит рәйесе лә булып эшләне. Беҙгә эштәрҙе бүлеп-бүлеп бирә лә, аҙаҡ уның шелтәһенә тарымаҫ өсөн тырышабыҙ инде.*



**15-20 йыллап элек Матбуғат йортонда эшләүселәр гәзит сыҡҡан көндәрҙә арҡаһына биштәрен аҫҡан олпат кәүҙәле ағайҙың редакцияларға ҡояштай балҡып килеп ингәнен күрә торғайны. Революция урамындағы "Киске Өфө" гәзите редакцияһына ла шулай килеп инә ине ҡояш-ағай. Килеп инә лә, яңы ғына сыҡҡан гәзит һандарын күмәртәләп һатып алып, нурын ҡалдырып сығып та китә. Таң менән шулай электричкала баш ҡалаға килеп, матбуғат баҫмаларын йыйып, кемдәргәлер үҙе яҙған мәҡәләләрҙе лә ҡалдырып китеүсе кеше - ул Белорет районының Манышты ауылы мәктәбе директоры Миһранов Нурулла Мөхөтдин улы ине.**
**Баҡтиһәң, ул Өфөлә уҡыған ул-ҡыҙҙарына ошо рәүешле ауыл күстәнәсе менән бергә башҡортса баҫмаларҙы ла алып барып ҡыуандырған булған икән. Ул бынамын тигән дүрт уланды, өс ҡыҙҙы тәрбиәләгән ҡаһарман атай, бының өсөн "Атай ҡаһарманлығы" тигән йәмәғәт наградаһына лайыҡ. Ҡаһарман атайҙың тырышлығы бушҡа китмәгәнен, уларҙан итәғәтлек, милли рух урғылып торғанын уның улдары менән ҡорған әңгәмәлә тойорһоғоҙ. Әңгәмәне аталары башлап ебәрер ҙә, Рөстәм, Нәзир, Раян улдары күтәреп алыр. Ҡайҙа кемгә уҡыуҙарын, хәҙер ҡайҙа кем булып эшләүҙәрен уларҙың үҙҙәренән белешәйек.**

**Һеҙгә фамилия биргән данлыҡлы Миһран олатайығыҙ хаҡында нимәләр әйтер инегеҙ?**

**Нурулла Мөхөтдин улы:** Миһран олатайыбыҙҙың дүрт ҡатыны булған. Ғаиләһе ишле булғас, хужалығында ялсы тотмаған. Олатайҙың ҡатындары өй эсендәге һәм хужалыҡтағы эштәрҙе тигеҙ бүлешеп башҡарған, малдарын да үҙенең балалары көткән. Ҡатындарынан тыуған балалары, артабанғы нәҫелдәштәре, күберәген Архангел районында йәшәгән һәм йәшәй. Минең әсәйем Белореттағы Мәйгәште ауылынан.

**Башҡортостандың халыҡ шағиры Мәжит Ғафури менән дә осрашҡан бит әле Миһран олатайығыҙ?**

рә. Ысынлап та, ауылда ошо ике генә йортта кеше йәшәгән була ул саҡта, ҡалғандар йәйләүгә күскән.

Олатайым ҡатындары менән сәй эсеп ултырған саҡҡа тура килә. Ғафуриға сәй эсерәләр ҙә, урын һалып бирәләр, үҙҙәре аласыҡҡа йоҡларға сығалар. Ул саҡта өйҙәрҙә ҡандалалар күп була. Ҡунаҡ уларҙан таланып, тәҡәте ҡороғас, соланға сығып ята. Унда ла ҡандалалар тынғылыҡ бирмәгәс, ауылдағы бер бушап ҡалған йортҡа барып, төн үткәрергә ҡарар итә. Унда кәзәләр ҙә була, хужалары йәйләүгә күсһә лә, кәзәләре күсмәгән булғандыр инде. Кәзәләр уға нигеҙ буйынан урын бирә. Иртәнсәк олатайым Ғафуриға сәй эсереп, ҡулына 5 һум аҡса тоттороп, ҡайтыр юлды өйрәтеп ебәрә.

Улар бер ваҡытта ла үҙҙәрен ике ярҙа тойманы.

**Ә бына һеҙҙең бала сағығыҙҙың ғүмер буйы онота алмаҫлыҡ ниндәй ваҡиғалары булды? Атайығыҙҙан ниндәй тәрбиә алдығыҙ?**

**Рөстәм:** Иң күңелле ваҡиғалар йәйге мәлдәрҙә, бесән сапҡан саҡтарҙа булғандыр. Атайыбыҙ етди генә итеп бер әйтһә, беҙгә шул етә торғайны. Үҙе мәктәптә уҡытыусы, директор, силсәүит рәйесе лә булып эшләне. Беҙгә эштәрҙе бүлеп-бүлеп бирә лә, аҙаҡ уның шелтәһенә тарымаҫ өсөн тырышабыҙ инде. Күп эшләне, бер ваҡытта ла өйҙә ҡул ҡаушырып ултырманы. Ул йә йорт янында нимәлер эшләй, йә яҙышып ултыра.

**Нәзир:** Атай ҙа, әсәй ҙә уҡытыусы, әммә улар беҙ уҡыған

йем". Ошоноң мәғәнәһен нисек аңлайһығыҙ?**

**Раян:** Бәлки, атайҙың һүҙе ҡанунға тиң булыуы хаҡындалыр был әйтем. Әгәр ҙә атайың ниндәйҙер һүҙ әйтте икән, уның һүҙе дөрөҫ булмаған хәлдә лә, уны инҡар итергә тейеш түгелһең. Һаҡал төшөнсәһендә абруй тигән мәғәнә лә ята кеүек.

**Рөстәм:** Бында атайҙың абруйы хаҡында ла һүҙ баралыр. Кем генә булмаһын, нисек кенә булмаһын, ул һинең атайың. Уның әйткәне һәр саҡ дөрөҫ. Беҙҙең яҡта хатта: "Тороп тор әле, һинән олораҡ ағайың бар", - тип тә әйтәләр. "Атайыңдан аша сыҡма, оло булма", тигән һүҙ ҙә бар халыҡта. Был әйтемдә тыйыу ҙа, олаларға ҡарата ихтирам тәрбиәләү ҙә ята.

**Нәзир:** Атайыңдың ризалығы булмайынса, һин бер нәмә лә

ҡабат уны ҡабатламаҫҡа һүҙ бирәм.

**Рөстәм:** Ҙурая биргәс, бер саҡ кис клубҡа сығырға рөхсәт һораныҡ. Атай-әсәйебеҙ рөхсәт итте. Уйынға әүрәп йөрөп, таңғы алтыла ғына ҡайтып индек. Ҡайтыуыбыҙға атайыбыҙ салғылар әҙерләп ҡуйып: "Киттек бесәнгә", - ти бит инде. Тоттоҡ та бесән сабырға киттек, һуңлап ҡайтҡан өсөн язаһы ла шул булды. Тик атай-әсәй һуңлап ҡайтҡаныбыҙ өсөн беҙҙе әрләмәне.

**Раян:** Атайыбыҙ силсәүит рәйесе сағында ауылда йыйылыштар үтә торғайны. Яңы фильм башланыр алдынан да атайыбыҙ сәхнәгә сығып, политинформация үткәрә. Бәләкәй генә булһаҡ та, шундай халыҡты ауыҙына ҡаратып ултыртып ҡуйған атайыбыҙҙың абруйына тап төшөрөргә ярамағанын тәрән аңлай торғайныҡ. Беҙ шул рәүешле үҙебеҙҙе тоторға өйрәндек, насар уҡымаҫҡа тырыштыҡ.

Әсәйебеҙ туғандарыбыҙға бәйле фәһемле тарихтар һөйләр ине. Туғандарыбыҙҙың береһе лә эскесе булмаған, енәйәт ҡылып төрмәгә ултырмаған. Шәхес культы ваҡытында халыҡ дошманы тип иғлан ителеп, иркенән мәхрүм ителеүселәр булған, әлбиттә.

# БЕҘ - МИҺРАН ҠАРТТЫҢ

**Нурулла Мөхөтдин улы:** Мәжит Ғафури эш эҙләп беҙҙең яҡҡа килеп сыҡҡан. Ул заманда ауыл һайын тиерлек приискылар эшләгән бит, шағир һәр береһенә инеп, эш һорашып йөрөгән. Шулай йөрөй торғас, ул Инйәргә килеп еткән. Унда ла эш булмағас, хәҙерге Архангел районына ҡараған Аҙау ауылының был яғындағы француз заводына юл алған. Унда ла эш таба алмағас, тыуған яғына ҡайтырға ҡарар итә. Әммә ул яҡтан тура ҡайтып китер урынға, ниңәлер, кире Инйәр яғына юлланыуы әле булһын мине аптырата.

**Етмәһә, ул заманда хәҙерге һымаҡ электричка ла йөрөмәгән тиһегеҙме?**

**Нурулла Мөхөтдин улы:** Эйе, шағир кирегә тартып, беҙҙең Манышты ауылына килеп етә. Инйәр йылғаһын кисеп сығып барғанда Ғафури көслө ағымға ҡаршы тора алмай һәм аға башлай. Ярай әле шул ваҡытта бер һыбайлы үтеп барған була. Ул шағирҙы атының ҡойроғонан эләктертеп һөйрәтеп алып сыға. Ошо урында уның ни өсөн урау юл булһа ла, Маныштыға килеүе лә аңлашыла. Сөнки беҙҙең ауылда Мәжит Ғафури менән мәҙрәсәлә бергә уҡыған егет йәшәгән. Ул кисләтеп ауылға килеп ингәндә, ике генә өйҙә шәм янған була. Шуларҙың береһе Миһран олатайыбыҙҙың өйөндә. Иң тәүҙә Ғафури һабаҡташының йортона инә. Әммә унда йоҡлап сығыу мөмкинлеге булмай сыға. Һабаҡташы уға Миһран ҡарттың өйөн өйрәтеп ебә-

**Рөстәм, Раян, Нәзир, атайығыҙҙың Миһран олатайығыҙ хаҡындағы ҡыҙыҡлы әңгәмәһен тыңлап алдыҡ. Ана ниндәй иҫтәлекле булған олатайығыҙ йортондағы тормош. Һеҙ нимәләр әйтерһегеҙ?**

**Раян:** Миһран олатайыбыҙ тураһында һөйләгәндә уны һунарсы булған, ағас, йәнлек тиреһе эшкәрткән, малы күп булған, дүрт ҡатын менән йәшәгән, тигән мәғлүмәтте килтереү менән генә сикләнәләр. Табылған документтар буйынса, 1735 йылда Маныштыла йөҙ ҙә һикһән самаһы хужалыҡ иҫәпләнгән. Ауылдағы мәҙрәсәнең аҙансыһы, имамы, мөғәллиме булған. Инйәрҙә йә Уҫманғәлелә мәҙрәсә булғанлығы тураһында уҡығаным юҡ. Мәҙрәсәлә уҡытырға ебәрелгән кешене мөғәллим итеп тәғәйенләү тураһында указ да һаҡлана архивта. Ауылыбыҙҙа дин тотоусылар күп булған.

**Нәзир:** Миһран олатайыбыҙҙың дүрт ҡатыны булып, уларҙан таралғандарҙың һаны өс йөҙҙән ашыу кеше. Былары әле табылғандары, теркәлгәндәре генә. Затыбыҙға ҡараусылар араһында күпселеге уҡытыусы, табип йә юрист, йә дин әһеле. Беҙ, асылда, ошо дүрт юлдың береһен һайлайбыҙ.

**Раян:** Совет осоронда ла ауылыбыҙҙа мулла булды. Намаҙын да уҡынылар, ураҙа ла тоттолар, йәғни ҡырҡа тыйыуҙар булманы.

Атайыбыҙ мәктәптә ғүмер буйы парторг булды, өләсәйҙәр, олатайҙар намаҙ уҡып ултырҙы.

кластарҙа уҡытманылар. Икеһе бер һүҙҙән булдылар, йәғни береһенең һүҙенә икенсеһе ҡаршы килмәне. Атайыбыҙ менән гел бергә йөрөргә тырыштыҡ. Француз заводы яғына барып, сәтләүек йыйыу ваҡиғаһы ла күңелгә уйылып ҡалған.

**Раян:** Иң иҫтә ҡалғаны - балыҡ тоторға барыу, шамбыға сығыу. Тағы шул: бер ваҡытта ла атай-әсәйебеҙҙең әрләшкәнен ишетмәнек. Әсәйебеҙ ҡыҙа башлаһа, атайыбыҙ тиҙ генә кейенә һалып сыға ла китә торғайны. Тышта йөрөп-йөрөй ҙә, ишекте асып: "Мөнирә, бөттөмө?" - тип һораша. Яңы йылға өйҙө биҙәү ҙә иң иҫтә ҡалғаны. Атайыбыҙ урманға барып, шыршы алып ҡайта ла, төбөн иҙәнгә, осон түбә таҡтаһына ныҒытҡас, беҙ биҙәргә тотонабыҙ. Яңы йыл кисендә Ҡыш бабай - атайыбыҙ үҙе.

**Һәр бала үҙ атаһын донъялағы иң көслө кеше итеп һанай, шулай бит?**

**Рөстәм:** Һикһән йәшенә тиклем дә беҙ өсәүләп күтәргән бүрәнә башын атайыбыҙ бер үҙе күтәрҙе. Әлбиттә, беҙҙең атай иң көслө кеше.

**Раян:** Бер заман Олоялан тигән ерҙәге һарҡыу урында аты йөктө тарта алмай туҡтап ҡалған. Шул саҡта атайыбыҙ атын туғарып, йөктө үҙе һөйрәп, ҡалҡыу урынға сығарып, атын киренән егеп ҡуҙғалып киткән.

**Халыҡта шундай бер әйтем бар: "Атайым һаҡал ебәрмәйенсә, мин мыйыҡ үҫтермә-**

эшләргә тейеш түгелһеңдер, мин шулай уйлайым. Беҙҙең халыҡта табынға ултырғанда ла иң тәүҙә оло кеше, атай ризыҡҡа үрелә, башҡалар унан һуң ғына ашай башлай.

**Беҙҙе атайыбыҙ образында әсәйҙәр тәрбиәләй. Һеҙҙе тәрбиәләүҙә әсәйегеҙҙең роле ниндәй булды?**

**Рөстәм:** Беҙҙе юғары белем алыуға этәреүсе күберәген әсәйебеҙ булды инде. Атайыбыҙ күп ваҡытын йәмәғәт эштәрендә үткәргәс, уны күрмәнек тә тиерлек. Әммә быуын ултырғас, әсәйебеҙ: "Һеҙ буласаҡ ирҙәр, ана, атайығыҙ янында йөрөгөҙ, уға ҡарағыҙ", - тине. Дөрөҫөрәге, ул беҙҙе атайҙар тәрбиәләрлек йәшкә тиклем үҫтерҙе. Аҙаҡ эстафета атайыбыҙға күсте.

**Нәзир:** Әсәйем беҙгә бер нәмәне лә тыйманы, бының менән ул беҙҙе үҙенең ышанысы аша ярамағанды эшләүҙән араланы. Нимә генә тимә, тыйылған татлы була бит инде. Эсергә, тартырға ярамай тип кенә әйтә инеләр.

**Малай саҡта эш боҙмайынса ла булмай. Эш боҙһағыҙ, ниндәй язалар алдығыҙ атай-әсәйегеҙҙән?**

**Раян:** Мине мөйөшкә баҫтыра торғайнылар. Башҡалар ашаған саҡта ла һаман баҫып тора инем. Тик ҡасан мөйөштән сығырға кәрәклеген улар әйтмәне. Йәғни ғәйебенде таныгандан һуң ғына мөйөштән үҙем сыға инем. Сығам да, үҙемдең ғәйебемде таныуымды белдерәм,

**Һөнәр һайлауығыҙҙа атай-әсәйегеҙҙең йоғонтоһо нисек булды?**

**Нәзир:** Һигеҙенсе класты тамамлағас, атай мине хәҙерге Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназияһына алып китте. Мине урынлаштырғас, өс һум бирҙе лә: "Ҡайтыр юлды беләһең", - тип, ҡайтып китте. Гимназияны тамамлағас, бер кем дә миңә һөнәр һайлау буйынса кәңәш бирмәне. Физкультура уҡытыусыһы булырға ҡарар итеп, Башҡорт дәүләт педагогия университетына барҙым, әммә инә алманым. Шәп йүгереүемде лә иҫәпкә алманылар, ниңәлер. Аграр университеттың ветеринария факультетына уҡырға индем. Шунда уҡып йөрөгәндә мөмкинлек барлыҡҡа килеп, иҡтисадсы һәм төҙөүсе һөнәренә уҡыу өсөн Төркиәгә юлландым. Хәҙер ошо алған һөнәрем буйынса Ишембайҙа торлаҡ-коммуналь хужалығында хеҙмәт итәм.

**Рөстәм:** Атайым силсәүит рәйесе булып эшләгәндә беҙҙең ауыл хакимиәтендә бер генә милиция хеҙмәткәре була торғайны. Силсәүит рәйесе үҙе лә штаттан тыш милиция хеҙмәткәре булып торҙо. Юл хәрәкәте хәүефһеҙлеге хеҙмәтенең штаттан тыш хеҙмәткәре лә атайыбыҙ. Атайымдың милиция органдарындағы шундай штаттан тыш вазифалары тәьҫир иттеме, мин дә шул йүнәлештәге һөнәр һайланым. Һигеҙенселә уҡығанда Илдар тигән дуҫым менән милиционерҙар тураһында ки-

*✓ Ә беҙҙә өйҙәр тығыҙ ултыра, әгәр ҙә берәүҙең өйө янып китеп, ярҙам итмәһәң, һинеке лә янасаҡ. Беҙҙең яҡта халыҡ бер-береһенә ярҙам итешмәһә, барыһы ла зыян күрә икәнен яҡшы аңлай.*



# БАЛАЛАРЫ



но ҡараныҡ. Фильмда милиция хеҙмәткәре бандиттарҙы тотоуҙа батырлыҡ күрһәтә. Картинаның йоғонтоһо шул тиклем көслө булды, иртәгәһенә мәктәп директоры: "Мәктәпте тамамлағандан һуң кем буласаҡһығыҙ?" - тигән һорау бирҙе. Илдар менән икебеҙ ҙә "Милиционер булабыҙ" тип яуапланыҡ. Ул беҙҙе әрләргә тотондо ла: "Һеҙ мәктәпте тамамлағанда 2000 йыл була, ул ваҡытта беҙ коммунизмға барып етәбеҙ. Ә коммунизмда милиция хеҙмәте кәрәк булмаясаҡ. Һөнәрегеҙҙе үҙгәртегеҙ", - тимәһенме директорыбыҙ.

Аптырашта ҡалдыҡ. Мәктәптән ҡайтышлай бик ныҡ уйландыҡ. Әсәйем миңә уҡытыусы һөнәрен тәҡдим итте. Педучилищеға киттем. Уны тамамлағас, әрмелә хеҙмәт итеп ҡайттым. Шунан Сибай институтында граждандар хоҡуғы буйынса юрисҡа уҡыным. Белорет Эске эштәр бүлегендә тәфтишселәр бүлеге начальнигы вазифаһына тиклем 27 йыл эшләргә тура килде. 2013 йылдан Өфөлә юридик институтта уҡытам.

**Раян:** Әсәйем олатайымдың кешеләрҙе нисек дауалауы тураһында һөйләй торғайны. Шул тәьҫир иттеме, Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназияһында уҡығандан һуң Башҡорт дәүләт медицина университетының дауалау факультетын тамамлап, Белоретта интернатура үтеп, участка табибы булып эшләп, аҙаҡ төрлө урындарҙа эшләгәндән һуң Йылайырға баш табип итеп ебәрҙеләр. Бөгөн Башҡортостан миграция үҙәге поликлиникаһында баш табип булып хеҙмәт итәм.

**▸ Нурулла ағай, һеҙгә бер һорауым бар. Бармаҡтың ҡайһыһын тешләһәң дә ауырта. Бармағығыҙҙың ҡайһыһын нығыраҡ тешләргә тура килде?**

**Нурулла Мөхөтдин улы:** Бер тигеҙ итеп тешләргә тура килде. Икенсенән, уландарым зирәк һәм аҡыллы булдылар, тешләргә сәбәп сығарманылар.

**▸ Уларға бағлаған өмөттәрегеҙ аҡландымы, бөгөн улдарығыҙҙы тап ошолай булып үҫеп етерҙәр тип хыялланғайнығыҙмы?**

**Нурулла Мөхөтдин улы:** Әлегә улар менән ризамын, артабан да һынатмаҫтар тип ышанам.

**▸ Бер халыҡта: "Улыңа дошман бул, үҫеп еткәс, ул һинең иң яҡын дуҫыңа әүерелер",- тигән әйтем бар. Быны нисек аңлайһығыҙ?**

**Нурулла Мөхөтдин улы:** Уландарын тәрбиәләй алмаған атай кеше әйткәндер был һүҙҙе. Әммә былдай фәлсәфә беҙҙең халыҡҡа ят.

**▸ Ә бына һеҙ, Рәстәм, Нәзир, Раян, был әйтемдәрҙе нисек аңлайһығыҙ?**

**Рөстәм:** Элек законда балаларға ҡул менән тейгән өсөн ата-әсәне язаға тарттырыу статьяһы бар ине. Ярар, уны алып ташланылар. Атайыбыҙҙың ҡамсы урынына кесерткән була торғайны. Ул кесерткәнде аҡыл сыбығы урынына күрһәтеп элеп ҡуя торғайны. Унының кибеп бөтөр ине. Уның һуғырлыҡ, саҡтырырлыҡ сифаты ла ҡалмай, әммә кесерткән кесерткән инде. Ҡайһы ата-әсәләр балаларын артыҡ шаштыра. Тәфтишсе булып эшләгәндә ундай осраҡтар күп булды. Бала бәләкәй сағынан яҙыҡ менән яҡшыны айырып өйрәнергә тейеш. Үҙемдең малайҙарыма ла нимәләр эшләр алдынан уйларға кәңәш бирҙем. Ҡайһы ваҡыт уларға енәйәт кодексын да биреп, уҡып сығырға ҡушам: ниндәй ҡылыҡ өсөн һиңә нимә булырға мөмкин, тигән һорау ҡуям.

"Улыңа дошман бул" тигән әйтемде лә тура мәғәнәһендә аңларға ярамайҙыр, бында талапсанлыҡ хаҡында һүҙ баралыр. "Ҡулындағы ҡамсы" ға килгәндә, бәләкәй саҡта Зөлфиә апайым менән һыу ташып йөрөгәндә юлда торған бер йөк машинаһының ярыҡ фарынан бәләкәй лампочкаһы күренеп тора. Атайымдың мотоциклының лампочкаһы булмауын иҫкә төшөрөп, тегене-быны уйламай, бороп алдым. Алып ҡайтып әсәйемә күрһәттем. Әсәйем урам буйлап шарылдатып алып барып кире борҙороп ҡуйҙы. Ғүмергә һабаҡ булырҙай ваҡиға булды ул.

**Раян:** Эшләгәнең минең өсөн, өйрәнгәнең үҙең өсөн, тиҙәр. Шуның һымаҡ, был әйтемдәрҙә балаларға ҡарата талапсан булыу зарурлығы яталыр. Ваҡытында ҡайыш алыу ҙурыраҡ бәләләрҙән яҡшыраҡ. Макаренконың "Өс йәшкә тиклем һәм унан һуң" тигән хеҙмәте бар. Унда әйтелгәнсә, баланы өс йәшкә тиклем тәрбиәләмәһәң, өс йәштән һуң һуң була.

**▸ Улдарығыҙҙың - атайығыҙға, ҡыҙҙарығыҙҙың әсәйегеҙгә оҡшауын теләр инегеҙме? Ни өсөн?**

**Рөстәм:** Балаларыбыҙға, әгәр ҙә ҡырын эш эшләһәгеҙ, затыбыҙға тап төшөрәһегеҙ, һеҙҙең өсөн иң тәүҙә олатайығыҙ менән өләсәйегеҙгә ҡыҙарырға тура киләсәк, тип өйрәтәбеҙ инде.

**Нәзир:** Мин ситуацияға ҡарап, балаларыма олаталары һәм өләсәләре менән булған ваҡиғаларҙы һөйләйем. Балаларымдың атайыма оҡшауҙарын бик теләр инем.

**Раян:** Атайыбыҙ нисек уҡ юнһа, беҙ ҙә уға ҡарап юнабыҙ, балаларыбыҙ беҙгә ҡарай. Генетика төшөнсәһе бар. Уҡыған саҡта бер профессор менән бәхәсләшеп киттек бер мәл. Һорау шулай ҡуйылды: ижтимағи тәрбиә көслөмө, әллә генетикамы? Профессор ижтимағи тәрбиәне өҫтөн күрә, мин - киреһенсә. Мин уға төрлө дәлилдәремде килтерҙем һәм үҙ һүҙемдә ҡалдым. Ни өсөн тигәндә, совет осоронда коммунистар өс быуын кешеләрен тәрбиәләүгә ҡарамаҫтан, 1991 йылдан һуң золом ҡорбаны булғандарҙың балалары, ейән-ейәнсәрҙәре алғы планға сыҡты. Мендель законы буйынса ҡарағанда ла, ике быуын элекке ата-бабаларының сифатын ҡабул итмәгән хәлдә лә, артабанғы быуындарҙа ата-бабаларҙың асылы өҫкә сыға. Шул уҡ ваҡытта йөҙ борсаҡтың унауы ваҡланып, сорттан бөтөнләй ситкә сығып китә, юғала.

**Рөстәм:** Раяндың дәлилдәренә өҫтәп, шуны ла әйтер инем. Хәҙерге ваҡытта нимәгәлер өлгәшкән кешеләрҙең нәҫел төптәрен ҡарай башлаһаң, шәжәрәләрендә муллалар ҙа, байҙар ҙа булыуы асыҡлана.

**▸ Һеҙгә уңайһыҙ һорау бирәйемме?**

**Нәзир:** Бирегеҙ, беҙ уға уңайһыҙ итеп булһа ла яуап бирергә тырышырбыҙ...

**▸ Ниңә Миһран олатайығыҙҙың рәсми рәүештә дүрт ҡатыны булған?**



**Раян:** Һәр бер ауылда заттар, аралар бар. Беҙҙең ауылда, мәҫәлән, йыуан беләктәр, йыландар, ҡарғалар һ.б. Ауылыбыҙҙа һәр кеше ниндәй затҡа ниндәй һыҙаттар хас булыуын да яҡшы белә. Был заттар кеше менән мөнәсәбәт ҡора белә, былары балта оҫталары, был затҡа ҡараусылар һунарсылар, тегеләре һатыу эшенә маһирҙар, анауҙары матур хәбәр һөйләйҙәр. Беҙҙең араның атамаһы тарамыш. Миһран олатайыбыҙ бай булған өсөн генә дүрт ҡатын алмаған. Ул ҡатындарына яйын таба белгән, улар ҙа уға тартылып торған. Әгәр ҙә унан бала тапһам, балаларым да аталарына оҡшар, тип уйлағандар. Был уңайһыҙ һорау түгел, генетик яҡтан ҡарағанда аңлайышлы, яҡшы һорау.

**▸ Нәзир, һин тарихта бер һарай гарем тотҡан Сөләймән солтан иленә, Төркиәгә уҡырға барып ҡайтҡандан һуң был мәсьәләгә ҡарашың нисек?**

**Нәзир:** Бында Төркиәлә уҡыуым-уҡымауымдың ҡыҫылышы юҡтыр ул. Беҙ ҙә күп осраҡта "Беҙ Миһран ҡарттың балалары", тибеҙ. Ислам дине буйынса, мөмкинлегең булһа, башҡа ҡатындарың риза булһа, ала алаһың. Был осраҡта башҡа ҡатындарыңдан, балаларыңдан баш тартырға тейеш түгелһең.

Яңыраҡ бер ағай менән һөйләшеп ултырғанда Миһран олатайыбыҙҙың 9 ҡатыны булғанлығын билдәләнек. Миң баш аты булған. Аттарын һанамаған, әммә бер ҡарауҙа көтөүҙә ике баш аты етмәүе хаҡында әйтеп бирә алған, тиҙәр.

**▸ Нурулла ағай, Миһран ҡарттың дүрт ҡатыны булған, ҡатындары нисек һыйышып көн итте икән, хәҙерге заманда был мөмкин дә түгел бит, шулаймы? Хатта закон рөхсәт иткән хәлдә лә...**

**Нурулла Мөхөтдин улы:** Заман башҡа, заң башҡа, тиҙәр. Ул заманда, бәлки, күп ҡатын менән йәшәү мөмкин дә булғандыр. Хәҙер иһә дүртәү түгел, ике ҡатын менән дә йәшәп булмайҙыр ул. Етмәһә, уларҙың береһе немецсә, икенсеһе русса һөйләшһә.

**Рөстәм:** Әгәр ҙә закон ҡабул ителһә, икешәр ҡатын менән йәшәрлек хәлле башҡорттар ҙа юҡ түгел.

**Раян:** Ниңә рөхсәт, ниңә закон, былай ҙа ике ҡатын менән йәшәүселәр бар бит инде.

**Нәзир:** Элек бит күп ҡатынлылыҡтың нигеҙендә ир-ат аҙғынлығы ятмаған. Ғаилә башлығы булған ирҙең вафатынан һуң балаларын етемлеккә дусар итмәү маҡсаты килеп тыуған һәм тол ҡалған ҡатынды балалары менән хәлле генә икенсе иргә биргәндәр. Яуға китер алдынан дуҫтар бер-береһенә: "Әгәр ҙә ҡайта алмаһам, балаларымды етем итмә", - тип тә әйтер булған.

**▸ Миһран ҡарттың ейән-ейәнсәрҙәре, бүләр-бүләсәрҙәре бер-береһен беләме, аралашамы?**

**Рөстәм:** Әле "Миһран ҡарт вариҫтары" тигән чат асҡанбыҙ. Осрашып торабыҙ, туғандар араһындағы берәүебеҙҙең проблемалары килеп тыуһа ла, ярҙам итешәбеҙ.

**Раян:** Тау зонаһында йәшәгәндәр менән далала йәшәгәндәр менталитеты ныҡ айырыла. Далала өйҙәр алыҫ ултырғас, ундағы халыҡ та тарҡау һымаҡ. Ә беҙҙә өйҙәр тығыҙ ултыра, әгәр ҙә берәүҙең өйө янып китеп, ярҙам итмәһәң, һинеке лә янасаҡ. Беҙҙең яҡта халыҡ бер-береһенә ярҙам итешмәһә, барыһы ла зыян күрә икәнен яҡшы аңлай, шуға ла "Минең йортом ауылдың ситендә", тигән принцип менән йәшәп булмай. Туғандар араһында ла берҙәмлек көслө беҙҙең яҡта. Ауылыбыҙҙа 90-сы йылдарҙа эскеселәр күп ине, хәҙер юҡ кимәлендә. Ағинәйҙәр хәрәкәте барлыҡҡа килде һәм улар иман юлында бик күп эштәр башҡара.

**Рөстәм:** Үҫмер йәшкә еткәс, әсәйебеҙ беҙҙе ҡыуып тиерлек клубҡа сығара торғайны. "Кеше араһында йөрөргә өйрән", тип әйтер ине. Шулай уҡ кәләштәребеҙ менән мөнәсәбәтте дөрөҫ итеп ҡорорға, улар өсөн яуаплы булырға ла өйрәтте. Миһран ҡарттың балалары араһынан барлыҡ ҡәйнештәренә лә әсәйебеҙ кәләш алып бирҙе. Ҡоҙа булып һөйләшергә барғанда ла уға мөрәжәғәт иттеләр. Ҡайһы ваҡыт барып һөйләшеп ҡайта ла, заттарын күҙ уңынан үткәреп, юҡ, быларҙан килен алмайыҡ, тип кире дүндерә белде. Шул уҡ ваҡытта ул димләп өйләндергән туғандарыбыҙ әле булһын матур итеп йәшәп яталар.

**Нәзир:** Сәғәт алтыла бесәндән ҡайтып, ул-был итеп, ауылға яңы килгән ҡыҙ менән танышырға, осрашырға клубҡа сығып китәбеҙ. Таңға ҡайтыуыбыҙға ул ҡыҙ тураһындағы барлыҡ мәғлүмәт әсәйебеҙгә мәғлүм була: кемдең балаһы, шәжәрәһе, зат-зәүере ҡайһылай һ.б.

**Рөстәм:** Әсәйебеҙ психолог ине. Утыҙ йылдан ашыу мәктәптә рус теленән һәм әҙәбиәтенән, немец теленән уҡытты, атайыбыҙ ҡырҡ өс йыл математика, физика, геометриянан һабаҡ бирҙе. Ул юғары белемде ситтән тороп уҡып алды. Уның мәктәптәге һәр балаға, өлкән кешегә үҙенсә айырым мөғәмәләһе булды. Балаларының проблемалары менән дә уға килделәр, ҡыҫҡаһы, ул мәктәптең генә түгел, ауылыбыҙҙың да психологы булды.

**▸ Ҡыҙыҡлы әңгәмәгеҙ өсөн оло рәхмәт һеҙгә, Миһран ҡарттың вариҫтары!**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

ЯҢЫ ЙЫЛ СЦЕНАРИЙЫ

# ШӘП ҠУЯН!

Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА



**Ҡатнашалар:**
**Ҡыш бабай**
**Ҡуян**
**Айыу**
**Бүре**
**Төлкө**
**Иргәйел**
**Арыҫлан**
**Һайыҫҡан**

*Байрамса биҙәлгән сәхнә. Йәнлектәр йүгереп килеп инәләр.*

**Йәнлектәр.** Ҡыш бабай килә, Ҡыш бабай!

**Ҡыш бабай.** Һаумыһығыҙ, йәнлектәрем-януарҙарым, әкиәт дуҫтарым! Айыу, Бүре, Төлкө, Ҡуян... О-о-о, бөтөнөһө лә бында! Хатта йылы яҡтан Арыҫлан да килеп еткән!

**Һайыҫҡан.** Шыҡырыҡ-шыҡырыҡ! Ә минсе! Юғарыға күҙ һал, бабай! Мин өҫтә!

**Ҡыш бабай.** Эйе, күп күреүсе, күп белеүсе һайыҫҡан да мине көтә!

**Һайыҫҡан.** Шунһыҙ булмай, мин бит урман телефоны. Иң алдан йөрөйөм.

**Йәнлектәр.** Ҡыш бабай! Үҙен нисек? Яҡшымы кәйефең?

**Ҡыш бабай.** Нимә тип кенә әйтәйем...

**Айыу.** Ҡыш бабай, ауыр һулайһың.

**Арыҫлан.** Әллә арыттымы оҙон юл?

**Ҡыш бабай.** Яңы йыл көнө Ҡыш бабай арымай. Ошо көн өсөн ул йыл буйы ял итә, көс-ҡеүәт туплай.

**Төлкө.** Шулай ҙа кәйефең юҡ, Ҡыш бабай!

**Бүре.** Һинең дуҫтарың күп, әйт. Нимә борсой?

**Ҡыш бабай.** Таяҡ... Таяғым...

**Йәнлектәр.** Бәй, бабайыбыҙ таяҡһыҙ бит!

**Ҡыш бабай.** Тылсымлы таяғымды урланылар. Бер һелтәһәм, барлыҡ бүләктәр, ҡотлауҙар барып етә ине. Хәҙер дуҫтарым бүләкһеҙ тороп ҡалыр микән... байрамһыҙ. Ыһ...

**Айыу.** Нишләйбеҙ!

**Бүре.** Урман батшаһы, Айыу, хәлде төҙәтергә кәрәк!

**Айыу.** Дөрөҫ, Бүре. Борсолма, Ҡыш бабай. Яңы йылды бергә ҡаршы алабыҙ.

**Төлкө.** Таяҡты табырбыҙ, Яңы йылды ҡаршы алырбыҙ! Тәмле-тәмле күстәнәс менән.

**Ҡуян.** Бәлки, берәйһе шаяртҡан ғыналыр...

**Айыу.** Кит, Ҡуян. Бушты һөйләмә. Ҙур йәнлектәр кәңәш иткәндә, ҡыҫылма.

**Бүре.** Ваҡыт тығыҙ. Әйҙәгеҙ, тылсымлы таяҡты табайыҡ.

*Сығалар. Иргәйел инә.*

**Иргәйел.** Киттеләр шул. Ҡыш бабайҙы эйәртеп, әллә ҡайҙа олаҡтылар. Ә таяҡ миндә - Иргәйелдә. Үәт, алйоттар! Берәйһе шаяртҡан ғыналыр, имеш. Һы. Шаяртырмын мин һеҙгә. Иргәйел - бик етди бабай ул. Кемдә тылсымлы таяҡ, донъяға шул хужа. Ошо көндән алып, бөтөн байлыҡ, муллыҡ - Иргәйелдеке. Буш ҡапсыҡ - Ҡыш бабайҙыҡы. Үәт! Оттом бөтәһен дә!

*Көлә-көлә сыға. Һайыҫҡан шыҡырыҡлай.*

**Һайыҫҡан.** Ишеттем, белдем, таптым!

*Йәнлектәр инәләр.*

**Арыҫлан.** Һайыҫҡан, тылсымлы таяҡты таптыңмы?

**Һайыҫҡан.** Бурҙы таптым!

**Айыу.** Кем ул яуыз?

**Һайыҫҡан.** Иргәйел.

**Ҡыш бабай.** Әй, әтәгенәһе. Һаман шул Иргәйел. Ғүмер буйы минең менән ярышты. Һаҡалы үҫте, аҡылы ғына үҫмәне.

**Төлкө.** Иргәйел - бик көслө, хәйләкәр.

**Арыҫлан.** Тылсымлы таяҡты кем унан тартып алыр?

**Ҡыш бабай.** Дуҫтарым! Өндәшмәйһегеҙме? Кем таяғымды алып килә, Яңы йылға шуның исемен бирәм!

**Айыу.** Һоп. Мин бында! Тайыш табан.

**Бүре.** У-у-у-у, мин дә бында.

**Төлкө.** Йылғыр төлкө күптәрҙе төп башына ултыртты. Мин әҙер!

**Һайыҫҡан.** Ашыҡмағыҙ ул хәтлем. Ана бит Ҡуян! Уны ла онотмағыҙ.

**Ҡуян.** Эйе... Ней... Тап шулай... "Һайт" тигәнгә, мин дә "тайт" ...

**Айыу.** Ҡуян, арткараҡ күс. Кеше көлдөрмә.

**Йәнлектәр.** Күс, артҡа күс! Шыл.

**Һайыҫҡан.** Бәй, ул да йәнлек. Ҡыумағыҙ!

**Айыу.** Урмандың иң ғәйрәтле януары - тайыш табаны - изге бурысты үҙ өҫтөнә ала, Ҡыш бабай.

**Һайыҫҡан.** Нишләп Арыҫлан өндәшмәй?

**Арыҫлан.** Мин ҡунаҡ. Иргәйелде лә танымайым.

**Төлкө.** Беләм мин, арыҫландар ялҡауҙар....

**Ҡыш бабай.** Төлкө, нимә бышылдайһың?

**Төлкө.** Әй, ней... һе-һе-һе... Урман батшаһы Айыуханға изге юл теләйем.

**Ҡыш бабай.** Әйҙәгеҙ, Айыуханды күмәкләп оҙатайыҡ.

*Сығалар. Музыка. Иргәйел күренә. Айыу инә.*

**Айыу.** Һоп-һоп... Иргәйел, мин һине таныйым!

**Иргәйел.** Күптән танышбыҙ шул, дуҫ.

**Айыу.** Ниндәй дуҫ? Ҡыш бабайҙың тылсымлы таяғын ҡайтар, уғры!

**Иргәйел.** Ҡайтарам. Был донъяла бер нәмә лә мәңгелек түгел. Иң башта өйөмә ин. Унда ун миска бал әҙер. Һиңә Ҡыш бабай ул тиклем күстәнәс биргәне юҡ.

**Айыу.** Күстәнәс күп булмай.

**Иргәйел.** Хәҙер заман үҙгәрҙе. Бар, минең күстәнәстәргә күҙ һал.

**Айыу.** Эйе шул. Бал шәп инде. Ҡышҡылыҡҡа күпме запас, ә!

**Иргәйел.** Әһ-һә, инеп китте. Тамағына хужа була белмәгән мәсекәй Айыу. Ултырһын шул ситлектә. Тамаҡҡа алданды. Көс нимәгә, аҡыл булмағас?

*Көлә. Музыка. Бүре инә.*

**Иргәйел.** О-оо, Бүре мине килеп тапты! Бүрекәй, мин һиңә яңы урман бүләк итәм. Һиңә иркен донъя.

**Бүре.** Беҙҙе һатып алып булмай. Ҡыш бабайҙың таяғын бир! Югиһә, елкәңдән тешләп, шыршы янына алып китәм. Уйынсыҡ итеп эләм.

**Иргәйел.** Уҫал, әммә хәйләһеҙ януар Бүре... Тукта, һине лә төп башына ултыртайым. Уйынсыҡ, тигәндән.... Балаларың күп һинең. Бүрехан, бына бәләкәй генә өй. Шунда бөтөн уйынсыҡты йыйҙым. Инеп күҙ һал.

**Бүре.** Алдаша был Иргәйел. Шулай ҙа тикшерәйем.

**Иргәйел.** Шалт-шолт! Ситлекте бикләнем. Бүре хәҙер - миндә тотҡонлоҡта. Ә Ҡыш бабай таяҡһыҙ!

*Көлә.Төлкө инә.*

**Иргәйел.** Бәй, Төлкө, нишләп йөрөйһөң был тирәлә?

**Төлкө.** Иргәйел, туным ҡар менән ҡапланды. Таяҡ менән ҡағырға ине. Анау ҡулыңдағы таяҡ менән.

**Иргәйел.** Был хәйләкәр төлкө мине оторға итә... Бәлки, һиңә өр-яңы тун кәрәктер?

**Төлкө.** Иҫкеһе лә ныҡ.

**Иргәйел.** Таяҡ заманы үтте бит, Төлкө. Саң һурғыс, автомат йыуғыс кәрәк. Ҡайһыныһы күңелеңә яҡын?

**Төлкө.** Ҡулыңдағы таяҡ менән бер һыпырһаң...

**Иргәйел.** Ул тылсымлы таяҡ. Әле бер һелтәгәйнем, алтын алҡа, беләҙек, тәңкәле селтәрҙәр шауҙырлап ҡойолдо. Ныҡ байыным. Тик мин ҡарт бабай. Биҙәүестәрҙе кемгә бирергә?

**Иргәйел.** Биҙәүестәр? Аһ... ҡайҙа улар?

**Иргәйел.** Күрәһеңме бәләкәй өйөмдө? Эсе лыҡа тулы. Йә, таяҡ менән туныңды ҡағайыҡмы?

**Төлкө.** Тукта, алтын тәтәйҙәрҙе инеп кенә ҡарайым да...

**Иргәйел.** Һа, инде сығыу юлы бикләнде. Хәйләкәр төлкө мәкерле Иргәйелде отмаҡсы, имеш. Эйе, шулай булмаһын тағы. Оттормон мин һиңә! Һинең ише төлкөләрҙе күп күрҙем. Был оҙон ғүмерҙә әллә кемдәрҙе отто́к. Төп башына ла, тишек кәмәгә лә ултырттыҡ. Иҫәбе-хисабы юҡ!.. Таяҡҡа һунар итеүселәр бөттө. Бахы-ы-быр Ҡыш бабай... Хәҙер уның үҙен зинданға бикләйһе ҡалды. Юҡ, бикләмәйем. Лутсы ҡайтып китһен боҙҙар иленә. Был әкиәт донъяһына ике ҡарт һыймай. Әкиәт донъяһы, Яңы йыл - хәҙер Иргәйелдеке!

*Музыка, бейей.*

**Иргәйел.** У-у-у-у, кем унда килә ята? Януарҙар батшаһы арыҫландың ялбыр башы күренде. Бөттө баш былай булғас... Биш километр һаҡалымды бөртөкләйәсәк. Ул ялҡауға нимә етмәй? Ҡунаҡ булып ҡына ятһа, булманымы икән? Тукта, Арыҫлан бит мине танымай! Иргәйелде күргәне юҡ. Һаҡалды сәлләгә итеп урайым. Биткә маска кейәйем. Ул хәҙер модала. Бына бөтәнләй икенсе ҡиәфәттәмен!

**Арыҫлан.** Һаумы, бәләкәй зат!

**Иргәйел.** Бәләкәй, но аҡылым ҙур. Башҡа һыймай китә. Күрҙеңме, сәллә менән уратып, нығытып бәйләп ҡуям.

**Арыҫлан.** Кем булаһың, аҡыллы баш!

**Иргәйел.** Аҡ сәллә, биттә битлек. Аңлашылып тора - мин табип. Ҡулымда таяҡ түгел, укол ҡаҙайым. Шприцым шулай ҙур. Урман шприцы. Ауырып киттеңме, Арыҫлан?

**Арыҫлан.** Юҡ та... Мин Иргәйелде эҙләйем.

**Иргәйел.** Ниндәй эш боҙған ул?

**Арыҫлан.** Ҡыш бабайҙың таяғын урлаған.

**Иргәйел.** Күрҙем-күрҙем, ул һине күреү менән инеп боҫто. Ошо бәләкәй йортҡа. Бар, дөрөп сығар үҙен. Укол һалып, аҡылға ултыртайыҡ.

**Арыҫлан.** Рәхмәт, доктор!

**Иргәйел.** Шап-шоп! Аңра Арыҫланды ла бикләп ҡуйҙым. Донъя януарҙарының батшаһы, имеш. Иң аңраһы ул булып сыҡты. Хәҙер Иргәйел хужа донъяға. Бахыр Ҡыш бабай минә ҡурҡып баға, һа-һа-һа!..

*Көлә. Музыка*

**Иргәйел.** Бәй, был нимә тәгәрләп килеп төштө. И-и-и, бахыр ҡуян бит. Ниңә ул хәтлем ныҡ дерелдәйһең?

**Ҡуян.** Юҡ, Иргәйел, дерелдәмәйем. Мин күнекмә яһайым.

**Иргәйел.** Көлдөрмә, ныҡ көлһәм эсем ауырта. Үҙенә күҙ һал, йолҡош!

**Ҡуян.** Асыуға теймә. Бахыр түгел, донъялағы иң батыр ҡуян мин. Мин боксер. Хәҙер ҡундырам.

**Иргәйел.** Йә, көтәм, ҡундыр миңә. Зәғиф ҡуллы, Ҡуян. Ай-ай ай! Һин бит ҡундырманың, ә типтең! Боксер, имеш!

**Ҡуян.** Их-ма, буталдым, боксер түгел, каратист мин. Йә, нисек минең аяҡ?

**Иргәйел.** Ой-ой! Хәҙер тотам, күрәгенде бирәм! Ағастар араһына инеп ҡотолмаҡсыныңмы! Юҡ инде! Тотам һәм бер генә бер йотам. Ҡайҙа һикерҙең, бахыр Ҡуян? Мин дә шәп һикерәм!

**Ҡуян.** Мин йылғырыраҡ. Бер ағастан икенсе ағасҡа, һайт-тайт! Йә тот, йә, Иргәйел, һикер, ырғы, үрел! Йәбеш! Эй, ығыш!

**Иргәйел.** Уй-уй-уй! Ботаҡҡа эләктем! Буталды-буталды! Һаҡалым симәлде!

**Ҡуян.** Матур эленеп тораһың ботаҡта.

**Иргәйел.** Ысҡындыр мине!

**Ҡуян.** Йә, әйт, ҡайҙа тылсымлы таяҡ?

**Иргәйел.** Әйтәм-әйтәм. Тик башта ысҡындыр, Ҡуян батыр!

**Ҡуян.** Башта Ҡыш бабайҙың тылсымлы таяғы!

**Иргәйел.** Ана, ағас ҡыуышлығында.

**Ҡуян.** Күрҙем. Хәҙер мин уны... Уй-уй, ауыр бит!

**Иргәйел.** Мине ысҡындыр, каратист ҡуян, үҙем алып бирәм.

**Ҡуян.** "Бахыр ҡуян" тигән һүҙҙе онотто. Һаҡалың ныҡ, симәлеп тор, Иргәйел. Тик миңә ярҙамсы кәрәк.

**Иргәйел.** Ярҙамсың булырмын, батыр Ҡуян!

**Һайыҫҡан.** Һөйөнсө! Бур тотолдо. Тылсымлы таяҡ табылды! Йүкә телефон ишетте. Хәбәр таралды. Ҡуянға ярҙам кәрәк. Ҡыш бабай, һин ҡайҙа?

**Ҡыш бабай.** Уй, рәхмәт төшкөрә. Мин бында! Тылсымлы таяғым табылдымы? Бәй, бейек ағаста ниндәй уйынсыҡ эленеп тора. Ап-аҡ бауҙа рәхәтләнеп бәүелә...

**Иргәйел.** Уйынсыҡ түгел. Бауҙа түгел! Биш километр һаҡалым симәлде.

**Ҡыш бабай.** Бәй, ҡарт башың менән ағас башында һикерәнләп йөрөмә! Үҙ йәшеңде бел!

**Иргәйел.** Мине элеп ҡуйҙылар...

**Ҡыш бабай.** Кем ул баһадир? Уға Ҡыш бабай үҙе баш эйә.

**Ҡуян.** Мин...

**Һайыҫҡан.** Шыҡырыҡ-шыҡырыҡ!... Ҡыш бабай сәсәй-йүгәлләй. Бармы доктор!

**Ҡыш бабай.** Юҡ-юҡ, мин ҡышын ауырымайым. Ней, Ҡуян... Беҙҙең йоҡа тиреле ҡуян?...

**Һайыҫҡан.** Бер кем дә уйламаған да, көтмәгән дә, ивет! Ҡуян енеүсе, ҡотҡарыусы! Йүкә телефоным шәп эшләй. Хәҙер бөтә донъя беләсәк!

**Ҡуян.** Иргәйелгә генә көсөм етә минең. Тик таяғына көсөм етмәй, Ҡыш бабай. Ауыр икән! Ана, ағас өңөндә тора.

**Ҡыш бабай.** Ҡана, үҙем алайым. Ә теге батырҙарыбыҙ ҡайҙа булды?

**Һайыҫҡан.** Улар барыһы ла - Иргәйелдең тотҡондары. Бәй, Ҡыш бабай, йығылып киттең түгелме?

**Ҡыш бабай.** Йығырлыҡ хәбәр әйттең, Һайыҫҡан. Улар бит иң көслө януарҙар.

✓ - Һинең ағайың? Тимәк, ул беҙгә ҡаршы, минең атайыма ҡаршы ҡорал күтәргән! Ә һин беҙ ғәйепле түгел, тиһең! Һинең ғаиләңдә лә фашист булған! - Мир инде ярһыуҙың сигенә сыға, уны тыйып тотоу мөмкин түгел.



**Һайыҫҡан.** Атаҡ-атаҡ, Ҡыш бабай, үҙең бит беләкле берҙе йыҡһа, башлы унды йығыр, тинең. Тик быға береһе лә ышанмағайны. Теге көрәшселәрең тураһында әйтәм!

**Ҡыш бабай.** Улай булғас, көрәшселәребеҙҙе зиндандан сығарайыҡ. Байрамһыҙ ҡалмаһындар!

**Йәнлектәр.** Ҡыш бабай таяҡлы! Тылсымлы таяҡ унының ҡулында. Беҙҙе лә ҡотҡарҙылар. Рәхмәт! Кем ул батыр? Кем беҙҙе азат итте?

**Ҡуян.** Мин Ҡуян батыр.

**Һайыҫҡан.** Нимә шып-шым булдығыҙ? Бөтәһен дә күреүсе, белеүсе һайыҫҡанды тыңламанығыҙ, мин бит алдан уҡ шыҡырыҡланым! Ҡуянды онотмағыҙ, тинем.

**Ҡыш бабай.** Алҡыштар! Баш эйәбеҙ батыр Ҡуянға! Дуҫтарым! Мин Яңы йылды Ҡуян йылы тип иғлан итәм. Һеҙҙең фекер нисек!

**Төлкө.** Ҡуян, ней бит әле... Бөгөн бында, иртәгә тегендә, тигәндәй. Тегеләй-былай һуғылыу... Ышанысһыҙ түгелме?

**Ҡыш бабай.** Хәҙер тиҙләнеш заманы, Төлкө. Бер урында ғына ултырһаҡ, эш бармай.

**Арыҫлан.** Миндәге тыныслыҡ унда юҡ. Сабып йөрөп, ни эш ҡырмаҡ?

**Ҡыш бабай.** Кәрәк саҡта ул бик сабыр, Арыҫлан. Хатта өнө лә, тыны ла юҡ.

**Бүре.** Тирене йылына ике тапҡыр алмаштыра.

**Ҡыш бабай.** Бүрехан, бүтән һорауың юҡмы? Тәбиғәт үҙенең төҫөн дүрт тапҡыр алмаштыра һәм дөрөҫ эшләй.

**Айыу.** Хатта өйө лә, өңө лә юҡ.

**Ҡыш бабай.** Ҡуян тотош тәбиғәтте ярата. Һәм тәбиғәт уны үҙ итә. Тағы ла һорауҙар бармы? Иҫегеҙгә төшөрәм, дуҫҡайҙар. Беҙҙең Яңы йыл хуш күңеллеләрҙе ярата. Тәүәккәлдәр, тапҡырҙар, йылғырҙар һәр саҡ алда. Килешәһегеҙме?

**Бүре.** Килешмәй ҙә булмай. Ҡуян тиһәк тә, унда көс бар. Артҡы аяҡтары ныҡ көслө. Бүреләр ҙә аптырай ҡай саҡ.

**Айыу.** Былай беҙҙең ҡойроҡтар оҡшаш.

**Арыҫлан.** Башы йоморо ғына, минеке һымаҡ.

**Төлкө.** Наҙлана белә. Төлкөнән һис ҡалышмай. Йомшаҡ ҡына үҙе.

**Иргәйел.** Мин дә маҡтайым әле. Маҡтағым килә Ҡуянды! Тик ботаҡтан ысҡындырығыҙ!

**Ҡыш бабай.** Нишләйбеҙ, дуҫтар?

**Һайыҫҡан.** Ыршы байрамы үткәс, ысҡындырырбыҙ.

**Арыҫлан.** Ҙур ҡайсыбыҙ һәм бритвабыҙ бар, Иргәйел. Сәлләңде... әй... һаҡалыңды ҡырып алырбыҙ. Ботаҡтан ысҡындырырбыҙ.

**Иргәйел.** Юҡ, һаҡалымды әрәм итмәгеҙ.

**Ҡыш бабай.** Көймә, икенсе йылға тағы биш километр үҫә ул. Миндә бит тылсымлы таяҡ бар.

**Һайыҫҡан.** Эйе, тылсымлы таяҡ йомарт Ҡыш бабайҙың ҡулында. Иң изге теләктәр, иң шәп күстәнәс, бүләктәр кешеләргә барып етәсәк. Ер йөҙөндә шатлыҡ-ҡыуаныс артасаҡ.

**Ҡыш бабай.** Дөрөҫ, Яңы йыл менән һәр йортҡа бәхет ҡунһын, теләктәр ҡабул булһын.

**Айыу.** Беҙҙең изге теләктәр һеҙгә барып етһен, хөрмәтле дуҫтар! Йөрәгегеҙҙе тыныслыҡ һәм ҡыуаныс менән тултырығыҙ!

**Арыҫлан.** Шатлыҡты уртаҡлашҡандан, ул арта ғына бара.

**Бүре.** Күңел шәмегеҙ балҡыһын!

**Төлкө.** Бер-беребеҙҙе йыуатыр һүҙҙәрҙе йышыраҡ ҡабатлайыҡ.

**Ҡуян.** Туғандарығыҙҙы, яҡындарығыҙҙы, күршеләрегеҙҙе ҡотларға, һөйөнсөләргә ашығығыҙ!

**Һайыҫҡан.** Ҡуян, ҡайҙа саптың? Улай уҡ ашыҡма!

**Ҡыш бабай**. Ҡуянмы һуң инде бер урында ултырып сыҙай торған йәнлек.

**Һайыҫҡан.** Эйе, юлдағылар юлда булһындар!

**Ҡыш бабай.** Яңы йыл менән, дуҫтар!

*Музыка.*




Мир был уйҙарынан тулҡынланып китә, йөрәге ашҡынып дөпөлдәп тибергә керешә... Тальяны көтә, әсәһе, бәлки, Мөғлифә лә көтә торғандыр. Ниндәй икән ул хәҙер? Район үҙәгендә һатыусыға уҡып йөрөйөм тип яҙғайны бер хатында, ҙур ерҙә үҙгәргәндер, матур итеп кейенә башлағандыр, еткән ҡыҙ булғандыр инде... Ә Иоланта-Миләүшә? Ул ни эшләр икән? Сентябрь уртаһынан ул Магдебургта белем эстәй башланы, әммә аҙна һайын тыуған йортона ҡайтып йөрөй. Мир Коссмандарға ярҙамға бармаған булһа, йүгереп гарнизон янына килеп етә, теге ярыҡ буйында көнө буйы көтөп ултыра. Ҡыҙ ҙа ҡапыл үҙгәрҙе: буйға тартылды, сәстәрен дә ҡыҫҡа ғына итеп киҫтерҙе, битенә, күҙҙәренә буяҡ һөртөп, иренен ҡыҙартып ала. Мөләйем генә үҙе.

- Минең яратҡан башҡортом! - ти ул немец телендә. Бер тапҡыр Юрген ҡарт, яңы танышҡан саҡта, тәүгә өйҙәренә барып йөрөгән осорҙа уҡ әле, Мирға "Русский солдат" тип өндәшә торғайны.

- Ғәфү ит, герр Юрген, - тине Мир көтмәгәндә ҡаты итеп. - Мин урыҫ түгел! Мин башҡорт!

- Башҡорт! - тип аптыраны ҡарт. - Һин бит Совет иленән? Ә башҡорт ҡайҙа йәшәй? Ниңә һин Советтарҙа?

Мир тауышын күтәрмәҫкә, асыуын һиҙҙермәҫкә тырышып, башҡорттарҙың Уралда, Башҡортостан тигән үҙ илендә йәшәүен ҡыҫҡаса аңлатып бирҙе. "Башкир" тип түгел, ә тап үҙебеҙсә "башҡорт" тип әйтте.

- Башкорт, башкорт, - тип унының артынан ҡабатланы ҡарт менән Иоланта. - Ҡыҙыҡ ҡына икән - башкорт!

Шунан кире Мирға улар йә башҡорт тип, йә улым, йә Мир тип исемләп өндәшә башланылар. Ҡыҙ ғына күбеһенсә "Минең башҡортом" тип өндәшеүҙе ғәҙәт иткәйне, теге үбеүенән һуң хатта "Минең яратҡан башҡортома" әйләнеп китте. Һалдаттың ҡайтыр көндәре яҡыная башлаған һайын ҡыҙ киләсәк тураһында күберәк һөйләр, хыялланыр булып китте. Егетте бында ҡалырға өгөтләне. Мир иһә көлөп кенә ҡуйҙы:

- Бер ҡасан да! Мин бит офицер түгел, өйләнеп, йәшәргә тороп ҡалырға!

- Өйләнмәһәң, былай ғына ҡал! Йә хеҙмәт итергә, йә хеҙмәтеңде тултыр ҙа, берәй ергә эшкә төш! Былай ғына йәшәргә ҡал. Өйләнешмәҫбеҙ! Осрашып ҡына торорбоҙ!

- Юҡ, Миләүшә! - тине был өгөткә үҙенең дә бирешеп китеү ихтималлығын аңлап Мир. - Мин үҙ илемдең улы! Мин совет һалдаты! Минең хаҡым юҡ фашис... немецтар иленә хеҙмәт итеп йөрөргә! Улар минең атайҙы һәләк иткән! Мин һеҙҙең бөтәгеҙҙе лә күрәалмаҫҡа тейешмен! Ә мин... йүнһеҙ...

- Юҡ! Юҡ! - тип бүлдерә уны түҙемһеҙ ҡыҙ. - Был күптән үткән! Онотолған! Уға һин дә, мин дә ғәйепле түгел! Ҡәһәр һуҡҡан Гитлер! Гитлер ғәйепле!

- Бәлки, шулайҙыр, - ти һыуына башлай егет. - Әммә бында ҡалыуҙы уйлап та бирмә!

- Һин һәр ваҡыт беҙҙе ғәйепләйһең: мине, атайымды, немец халҡын... Уларҙы фашистарға тиңләйһең! Минең дә бит ағайым... ағайым шул һуғышта һәләк булған! Мин бит һине ғәйепләмәйем! Хатта ошоғаса ауыҙ ҙа асманым ул турала!

- Һинең ағайың? Тимәк, ул беҙгә ҡаршы, минең атайыма ҡаршы ҡорал күтәргән! Ә һин беҙ ғәйепле түгел, тиһең! Һинең ғаиләңдә лә фашист булған!

Мир инде ярһыуҙың сигенә сыға, уны тыйып тотоу мөмкин түгел. Күҙенә аҡ-ҡара күренмәй, ары һуғылып, бире һуғылып йөрөргә керешә. Уға нимәнелер емерергә, онтарға кәрәк! Юҡһа ул Иоланталы үлтерә һуғырға мөмкин. Ул төҙрә төбөндәге елле генә көршәкле гөлдө күтәреп, асыҡ тәҙрәнән тышҡа ырғыта.

- Һеҙҙең ғаилә, тимәк, миңә дошман! Улар, бәлки, атайым менән күҙгә-күҙ ҡарашҡандыр? Бәлки, ағайың атҡандыр атайыма?

Ихатала ниҙер эшләп йөрөгән Юрген ҡарт ашыҡмай ғына селпәрәмә килгән көршәкте алып, сүп һауытына ташланы, онтаҡтарын йыйып түкте. Шунан ғына ауыр атлап, өйгә инде. Ҡарашы һалҡын, өшәндергес ине.

- Тәҙрә асыҡ, бөтәһе лә ишетелеп тора, - тине ул Мирға ултырырға ымлап. - Һин фашистарҙы күрә алмайһың. Дөрөҫ. Беҙ ҙә күрә алмайбыҙ. Минең улым фашист булманы, ул да беҙҙең ише ябай крәҫтиән ине. Тәүге улым, тәүге шатлығым ине. Миңә 20 генә йәштә донъяға килгәйне ул. Аллаһы Тәғәлә башҡа бала бирмәне... - Ҡарт саҡ ҡына тынып торҙо. Стеналағы фотоһүрәткә ҡарап-ҡарап алды. - Уны, бөтөн егеттәрҙе саҡырған кеүек, мобилизация менән саҡыртып алып киттеләр. Тәүҙә мылтыҡ тоторға, атырға өйрәтеп яттылар. Унан һуғышҡа инде. Бер генә хаты килде... Әллә берәйһенә атып өлгөрҙө улым, әллә юҡ. Өлгөрмәгәндер, тип өмөтләнәм... Ул һуғышҡа китеп, ике-өс айҙан, хәбәрһеҙ юғалды, тигән хат килгәс, беҙҙең тормош туҡталды. Әбей ҙә, мин дә йәшәүҙән төңөлдөк. Хәйер, ул саҡта әбей-бабай түгел инек тә әле. Йәшәүҙән төңөлөп бөткәс, Раббыбыҙҙан тағы бала һораным. Сөнки артабан былай икәүҙән-икәү йәшәүҙең йәме лә, мәғәнәһе лә ҡалмағайны. Әллә ишетте үтенесебеҙҙе, улымдың үлеменән һуң, миңә 52, әбейгә 48 йәш тигәндә ошо Иолантабыҙ донъяға килде. Улымдың дауамы итеп ҡабул иттек уны... Яңынан йәшәргә, йылмайырға, һөйләшергә өйрәндек, тиһәң дә була... Бына шуға ла үтә ғәзиз, үтә ҡәҙерле һәм танһыҡ беҙгә Иолантабыҙ... - Ҡарт тағы шымды. Мир ҙа ниҙер әйтергә ҡыймаһы. Һүҙҙең дауамын көттө. - Бында ҡала алмайһың, башҡорт улым, унының беләм. Элек беҙ тәүҙә революционерҙарҙан, унан НКВД-нан ҡурҡып йәшәгән кеүек, һин дә КГБ-ның үткер күҙенән ысҡына алмаҫһың. Тыуған ерҙән айырылып йәшәү еңел түгел. Мин дә ерегә алмай этләндем. Ғәзиз тупрағымды һағынып илаған саҡтарыбыҙ булды атайым менән. Атайым ҡайтып, үҙ ерендә үлергә теләне, тик ҡайтыу менән НКВД тоҙағына эләгеребеҙҙе аңланыҡ. Һуғыштан һуң инде ул турала уйлауы ла ҡурҡыныс ине... Шулай үтте ғүмер. Ни хәл итәһең, түҙҙек, еректек. Һағыш өтөп алһа, йырыбыҙҙы йырлап, үҙ телемдә һөйләнеп, күңелемде бөтәйтәм... Тик бындай йәшәүҙе бер кемгә лә теләмәйем! Һиңә лә, башҡорт улым!.. Ҡайт, онот был ерҙәрҙе, беҙҙе. Бигерәк тә күҙ нурым, Иолантамды онот!

Иоланталың күҙҙәренән йәш бәреп сыҡты:

- Юҡ, атаҡайым! Юҡ! Онотмаһын ул мине! Мин дә, мин дә онотмам! - тип үкһене ҡыҙ, атаһын арҡаһынан килеп ҡосаҡлап...

...Ауыр уйҙар менән, уларҙы күтәреп барырға көсө етмәгәндәй, һәлмәк атлап, саҡ ҡайтып етте ул көндө өлкән сержант Зиннәтуллин казармаһына. Бер кемгә лә ҡарамай, һөйләшмәй, ауыҙына һыу уртлағандай уйланып йөрөнө.

Иоланта-Миләүшә егетте күҙ уңынан ысҡындырманы. Әммә егет тә ныҡ торҙо, күңелендә бөрөләнә башлаған хистәргә үҫергә, тамырланырға ирек бирмәне. "Бер нәмә лә булыуы мөмкин түгел! Ул немка!" тигән талап тойғоларын һүрелергә мәжбүр иткән иң көслө дәлил ине. Ҡыҙ ҙа бирешмәне. "Мин һинең менән генә йәшәргә теләйем! Мин һиңә ғашиҡ!" тигән һүҙҙәр "Һин тик минеке генә! Миңә башҡа берәү ҙә кәрәкмәй! Мин һинеке булырға теләйем!" тигән талап менән алмашынды. Мир был һүҙҙәргә артыҡ иғтибар итмәне. Һуңлап тыуған ҡарт ата-әсәнең иркә ҡыҙы, йыуанысы, уға бөтөн нәмә рөхсәт ителгән, теләгән әйберенә һис һүҙһеҙ хужа булып өйрәнгән. Ләкин совет һалдатының йөрәгенә түгел! Ошолай нығытты үҙен Мир. Ҡыҙ иркә һүҙҙәрен әйткән һайын унан йыраҡыраҡ булырға тырышты, икәүҙән икәү ҡалыуҙан ҡасты. Әммә... яҙмыштан ҡасып ҡотолоп булмай тигәнде иҫенән сығарҙы өлкән сержант. Барыбер бергә ҡалырға, йәндәре-тәндәре менән ҡушылырға насип булған ине уларға. Тәкәббер, үҙ һүҙле совет һалдатына һәм ул бөтә халҡын күрә алмаған немец ҡыҙына.

- Ҡурҡма, - тине Иоланта егеткә бар кәүҙәһе менән һырылып. - Бер кем белмәҫ. Һин дә мин генә. Йәнә Аллаһ. Миңә һинән бер иҫтәлек кәрәк. Беләһеңме нимә?

- Юҡ, әлбиттә. Әйтһәң, белермен.

- Миңә һинән бала кәрәк. Ҡурҡма, - тип ырғып торған егетте кире түшәккә этәрҙе ҡыҙ. - Әйтәм бит, һис кем белмәҫ. Мин тиҙ арала кейәүгә сығам. Баланың кемдән икәнен кем белә!

Ысынлап та ошо арала Иоланталы һоратып килеүҙәре, үҙҙәренең ҡаршы булмауҙары тураһында Юрген ҡарт әйтә биреп ҡуйғайны. Мир ышанманы, мине кире һүрер өсөн уйлап сығарҙы, шикелле, тип кенә ҡолаҡ осонан үткәргәйне. Тимәк, бабай ялғанламаған.

- Ә ҡасан кейәүгә сығырға уйлайһың?

- Һин армиянан ҡайтып киткәс тә. Шуғаса һин минеке. Аҙаҡ мин ошо бәхетемде иҫләп кенә, шуның менән йыуанып ҡына, хет әллә кем менән йәшәргә риза.

- Ә яратыу? Яратмайса нисек йәшәрһең?

- Һиңә булған һөйөүем хаҡына түҙермен. Кем яратып йәшәй? Бөтәһе лә ғәҙәт буйынса йәшәй... Яратыу үтә лә бөтә, йорт, хужалыҡ мәшәҡәттәре, бала-саға менән ғәҙәти йәшәү башлана.

- Тап немецтарса теүәл һәм аныҡ.

- Эйе, по расчету...

Илап оҙатты Иоланта-Миләүшә һалдатты. "Мин һине ғүмер буйына яратырмын, һағынырмын һәм көтөрмөн, минең яратҡан башҡортом!" "Хуш. Бәхил бул! Күрешеү мөмкин түгел. Көтмә!"

**(Дауамы. Башы 45-49-сы һандарҙа).**

ИНТЕРНЕТТАН



# ВАҠЫТЫНДА АША

■ Һуңғы 30 йылда балаларға тәғәйенләнгән телевизион каналдарҙың, тимәк, телевизор ҡараусы сабыйҙарҙың да һаны артты. Франция ғалимдары үткәргән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, был тапшырыуҙар һәм йәнһүрәттәр балаларҙың телмәр үсешенә кире йоғонто яһай. Тик үҙенең йәшенә тура килгән контент баланы, киреһенсә, үҫтерә икән. Улар телевизорҙа күргәндәрен яҡындарына ҡабатлап һөйләй, уйнап күрһәтә, тимәк, интеллектуаль яҡтан үҫә, шулай уҡ аралашыу кеүек сифаттары камиллаша.

■ Макмастер университеты үткәргән һуңғы тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, киҙеүгә ҡаршы яһатылған прививка пневмония, йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәрен иҫкәртеүгә ҙур ярҙам итә. Ғалимдар йөрәк сирҙәре менән яфаланыусы 5 мең пациенттың яҙмышын күҙәткән. Улар барыһы ла киҙеүгә ҡаршы вакцинация кимәле түбән булған илдәрҙә йәшәй. Ауырыуҙарҙы ике төркөмгә бүлгәндәр һәм тәүге төркөмдәгеләргә йыл һайын прививка яһағандар. Аҙаҡтан асыҡланыуынса, улар йөрәге ауыртып йәки киҙеү һәм тын юлдарын зарарлаусы башҡа сирҙәрҙән һирәк ауырыған, үлем кимәле 20 процентҡа кәмегән. Ябайлығын, осһоҙлоғон, хәүефһеҙлеген иҫәпкә алып, прививканы йөрәк сирлеләр йыл һайын яһатырға тейеш, ти ғалимдар.

■ Һуңғы ваҡытта йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәрен иҫкәртеү һәм метаболизмды көйләү маҡсатынан B3 витамынын ҡулланыу йышайған. Миссури университетында үткәрелгән яңы тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, был витаминды сикләүһеҙ ҡулланыу түш яман шешенә килтереүе бар. Күптәр быңдай биологик матдәләрҙе табип кәңәшенән тыш ҡабул итә, уларҙың сәләмәтлеккә ыңғай йоғонтоһонан тыш, зыяны ла бар, тип иҫкәртә белгестәр.

■ Һиндостан ғалимдары яңы йәшелсә уйлап тапҡан. Ул помидор һәм картуф гибриды, "помата" тип атала. Үҫемселек тикшеренеү институты ғалимдары күптән түгел картуф менән баклажанды берләштереп, бер үк үҫемлектән картуф та, баклажан да йыйып алғайны. Яңы гибрид бер миҙгелдә 3-4 кг картуф һәм 3 кг помидор уңышы бирә, имеш. Эксперименттың маҡсаты иһә - ҙур булмаған майҙанда аҙ ғына ашлама һәм һыу ҡулланып, күберәк йәшелсә алыу. Ғалимдар бындай һынауҙарҙы башҡа йәшелсәләрҙә лә дауам итергә уйлай.

■ Төнгөләккә ашауҙың файҙаһы юҡ, шулай уҡ иртәнге ашты ла һуңға ҡалдырырға ярамай. Ғалимдар быының һимереү менән бәйләнешен асыҡлаған. Тикшереүҙәрҙә һимереү менән яфаланған 16 кеше ҡатнашҡан. Уларҙың тәүге төркөмө ваҡытында ашаған, икенсеһе ошо уҡ күләмдәге ризыҡты 4 сәғәткә һуңлап ҡабул иткән. Уларҙың ҡан күрһәткестәрен, тән температураһын һәм сарыф ителгән энергия күләмен тикшергәндәр. Бынан тыш, май ҡатламы биопсияһы өлгөләре анализланған. Һөҙөмтәлә, һуңыраҡ ашау лептин һәм грелин тигән аппетитты көйләүсе гормондарҙың эшмәкәрлеген ныҡ боҙа һәм калорияларҙың янылыуна ҡамасау итә икән. Етмәһә, май ҡатламында май күҙәнәктәре бүленеүе арта, тимәк, май ҡатламы тағы ла арта.

СӘХИФӘНӘН

# ҺЫНАУҘЫР БЫЛ...

**Беҙҙең бала саҡ һуғыштан һуңғы яңы аяҡҡа баҫып килгән осорға тура килде. Ҡартатайҙар һуғышта ятып ҡалған, өләсәйҙәр тол, әсәйҙәр етем. Яңы-яңы һуғыш тамамланып, әҙәмдең тамағы икмәккә туйыр-туймаҫ ҡына саҡта ла әле донъя ауырлығы төшмәгән ҡатын-ҡыҙ иңенән, уларҙы йыйып, урман ҡырҡырға оҙатҡандар. Әсәйҙәргә ошо яҙмыш та яҙған...**



Беҙҙең өләсәйҙәр ал-ял белмәй, ғүмерҙәрен хеҙмәткә бағышланы. Һуғышта эсергә өйрәнеп ҡайтҡан, нервылары ҡаҡшаған ирҙәрҙән балалар тыуҙы.

Кем контузия менән, кем башҡа төрлө сирҙәр менән интеккәндәр етерлек ине инде ул ирҙәр араһында. Беҙ шуларҙы күреп үҫтек..

Беҙҙең заманда әле һуғыш ветерандары мәктәптәрҙә белем бирә ине. Кешелә артыҡ кейем, мебель булманы. Ауылда урындыҡ - һике бөтә нәмәне лә алыштырҙы. Урындыҡта ашайһың, йоҡлайһың, икмәк баҫаһың, һалма йәйәһең, ҡунаҡ һыйлайһың. Шунда сабый тыуа, шунда әҙәмгә йыназа ҡылып, хушлашып, һуңғы юлға оҙаталар...

Кейем элер өсөн һәр өйҙә урҙа аҫылынып торҙо. Иң ҡәҙерле нәмәләр генә өләсәйҙәрҙә һандыҡта ятты... Ошо булды малдан башҡа бөтә матди байлыҡ. Малды ла бер заман нисә баш булырға тейешлеген иҫәпләп, артығын тоторға рөхсәт итмәне хөкүмәт. Ә ишек, ҡапҡалар бер ҡасан да бикләнмәне...

Етмешенсе йылдарҙа әле артыҡ кейем юҡ ине кешелә. Әсәйемә килеп, ҡунаҡҡа барырға күлдәк, пальто, атайымдан толоп һорап алып китерҙәр ине...

Һыралар магазин алдында мискәләп һатылды. Һуғыштан һуңғы яңы тормош шулай башланғандыр, күрәһең. Һәм беҙгә уларҙың зыяны күп тейҙе...

Күҙ етһә, ул Мәскәүҙән, ул әллә ҡайҙарҙан иген йыйырға ярҙамға һалдаттар килер ине ауылға. Улар беҙгә инеп йыуынып, үтекләнеп алырҙар ине...

Атайым ауылда беренсе булып аҡ-ҡара телевизор һатып алды. Кисен кино ҡарарға бөтә күршеләр инер ине беҙгә. Беҙҙең өй кинотеатр ҙа, ҡунаҡхана ла. Сөнки совхоз бүлексәһенә килгәндәрҙең барыһы ла беҙҙең туғандар йә атайымдың дуҫтары булды. Хатта бер йылды ҡыш беҙҙең өйҙә Сәлим ауылынан килеп, өс көн буйына туй ҙа үткәрҙеләр...

Кешенең аяғында ҡар яуғансы эрзинкә итек булды. Ҡыш етеүгә иһә быйма кейҙеләр. Атайым оҫта ҡуллы булды. Эштән һуң кешеләрҙең быймаларын төпләп, самауырын, радио, телевизорын төҙәтеп бирер ине...

Әсәйҙәрҙең декретһыҙ-ниһеҙ шул сама бала тәрбиәләп, алһыҙ-ялһыҙ донъя көтөүен күҙ алдына килтереп, һаман да иҫ китә. Күберәген беҙ, балаларҙың өлкәндәре ҡараныҡ инде үҙебеҙҙең кескәй һеңле-ҡустыларҙы...

Шул етмешенсе йылдар тирәһендә тәүгә кримплен тигән материалдан ҡатын-ҡыҙҙар өсөн костюм, күлдәктәр һата башланылар. Шунан нейлон... Шунан шәшке яғалы пальтолар сыҡты, әсәйем дә ундайҙы үҙенә кредитка һатып алды. Магазинға тәүге күн итектәр килде, ҡыҙыл төҫтәгеһен апайыма ла алып бирҙеләр. Магазинда артыҡ нәмә булманы...

Етенсе кластарҙамы икән, походҡа барҙыҡ, аҙыҡ магазинында беҙ быға саҡ күрмәгән вафли һатыла ине. Ҡалған ғына аҡсаға иҫкергән вафли алып, ҡоҫҡансы ашағаныбыҙ хәтерҙә...

Шунан стационарҙар, промтауарҙар, китап магазиндары, хужалыҡ тауарҙары, аяҡ кейеме магазиндары асылды. Беҙҙә ул саҡта пекарня ла, дөйөм мунса ла, дөйөм ятаҡ та, ашхана ла, хатта дауахана, бала табыу йорто ла булды, шөкөр...

Был совет осоро ине...

Етмеш биштә ҡоролоҡ булып, бөтә әҙәм Латвияға, тағы ҡайҙалыр һаламға барҙы. Шунан колорадо ҡуңыҙы алып ҡайттылар "ҡустәнәскә..."

Бына килде 90-сы йылдар. Халыҡ ыҫҡынды, демократия тип һөрәнләй башланылар... Күпләп сит илдән тәм-томдар, пластик, ҡалай һауыттарҙа һыралар килеп тулды... Ауылдан ҡалаларға уҡырға киткән студенттар шул һыраларҙы һөйрәтеп йөрөп һемерергә өйрәнде...

Донъя үҙгәрҙе. Әллә ҡайҙан төрлө секталар килеп сыҡты. Сит ил косметикалары, витамин-маҙарҙар һатыусы пирамидалар барлыҡҡа килде. Ҡайһы бер кешеләр ҡапыл байып китеп, ныҡ ҡына шашынды.

Ике меңенсе йылда кеҫә телефондары күпләп күренә башланы. Унан смартфон, айфон һәм башҡалары...

Бер мәл ауылдарҙан күпләп ҡалаға күстеләр. Шунан тағы кире ауылға ҡайта башланылар...

Магазиндар, аптекалар аҙым һайын, быуа быуырлыҡ. Күңел асыу клубтарын әйтергә лә түгел...

Мәсеттәр төҙөлдө, муллалар күбәйҙе, дин етмеш төрлө йүнәлеш алып, әллә күпме төркөмгә бүленде. Аяттар, ҡөрьән аштары күп осраҡта табын тултырып, өҫтәл муллығы күрһәтеү өсөн генә үткәрелә...

Туйҙар, мәжлестәр күбеһе тамада менән үткәрелә башланы, ҡунаҡтарҙың кем ҡоҙа, кем килен икәнен дә белмәй ҡайтып киткәндәре лә булғылай хәҙер...

Ҡорама ҡорау, кейеҙ баҫыу кеүек элекке кәсептәр яңынан модаға инде, түшелдерек, селтәр, ҡашмау кеүек ҡатын-ҡыҙ биҙәүестәре тергеҙелә башланы.

Ҡатын-ҡыҙҙарҙың күбеһе яһалма ҡаштар, күпертмә ирендәр яһап ҡуйыуға күсте...

Интернет, инстаграмдарҙа геройҙар, хайп тотоусылар күбәйҙе...

Йыртыҡ, ямалған ыштан кейеү хәтәр модаға әүерелде...

Әҙәмдәрҙә ысынбарлыҡ һәм ихласлыҡ юғалды. Кем эреләнде, ә күптәре ваҡланды...

Туғандар бер-береһе менән интернет, ватсап, телефон аша ғына аралашыуға күсте. Телефондан шылтыратып, алдан хәбәр итмәйенсә, бер кемгә лә барыу юҡ хәҙер. Ошоноң менән аралашыу бөтөнләй бөттө...

Туғанлыҡ ептәре өҙөлдө. Көнсөллөк күбәйҙе. Кешеләр бай менән ярлыға бүленде...

Ерҙе, тәбиғәтте аяуһыҙ исрафлау дауам итә...

Әле килеп, Хоҙай Тәғәлә төрлө һынауҙарын ебәреп тора. Әҙәм балаһын уйланырға мәжбүр итә...

Был һынауҙыр... Ай-һай, һынауҙыр...

Ошолар тураһында минең төн йоҡоларымды йоҡламай һыҙланыу - уйланыуҙарым...

**Мәрйәм ЗӘКИРЙӘНОВА.**

СӘЛӘМӘТ БУЛ!

# КӨНСЫҒЫШ ДАУАҺЫНАН УН КӘҢӘШ

● **Һәр саҡ күҙҙәрегеҙ менән йылмайып йөрөүҙе, шул арҡылы йөрәгегеҙҙе мөхәббәт менән мөлдөрәмә тултырыуҙы онотмағыҙ.** Был бөтә ауырыуҙарҙы ла иҫкәртеү сараһы. Күңел төшөнкөлөгөнә бирелгәндә, илағанда йә борсолғанда тән ағзалары ағыу бүлеп сығара, ә быңа үҙеңде бәхетле тойғанда һәм йылмайып торғанда улар бал кеүек шифалы шыйыҡса сығара. Баштараҡ күңел менән көләп йөрөү алымын ҡулланыу, уның һөҙөмтәһен тойоу ҡатмарлыраҡ булыр. Әммә даими ҡулланғанда тормошоғоҙҙон айырылғыһыҙ бер өлөшөнә әүерелер. Ҡайҙа ғына йөрөгәндә лә, ултыраһығыҙмы йәки баҫып тораһығыҙмы - йылмайығыҙ, көҙгөгәнештән арынығыҙ, йөрәгегеҙҙе мөхәббәт менән мөлдөрәмә тултырығыҙ һәм бар донъяны һөйөүгә сорнағыҙ.

● **Әҙерәк һөйләгеҙ.** Нимә, ҡасан һәм нисек әйтерегеҙҙе уйлап, ентекле һайлап эш итегеҙ. Урынлы әйтелгән һүҙ - иң ҡиммәте, ә шым ҡалыу йәшәү көсөндә һаҡлай.

● **Әҙерәк борсолоғоҙ һәм күберәк эшләгеҙ.** Киләсәк һәм үткәндәр тураһында әҙерәк уйланығыҙ, сөнки тап шулар борсолоуҙарға сәбәпсе була, ә был үҙ сиратында стресс тыуҙыра. Быңың урынына бар ихтыярығыҙҙы тупларға тырышығыҙ. Башҡаларға ярҙамлашыу һәм ғәфү итеү менән килә был тупланыш.

● **Аҡыл ҡеүәһен үҫтерегеҙ.** Күп Көнсығыш телдәрендә, шул иҫәптән ҡытайса ла, "аҡыл" һәм "йөрәк" төшөнсәләрен бер үк һүҙ менән белдерәләр. Шәхси амбициялар онотолоп, үҙегеҙ хаҡында борсолоуҙы ситкә ҡуйып, йөрәгегеҙҙе үҫтереү кимәлнә ирешеү менән ауырыуҙарҙан арыны сараларын табырһығыҙ.

● **Башығыҙҙы ҡәҙерләгеҙ һәм аяҡтарҙы йылыла тотоғоҙ.** "Башты һалҡында, аяҡтарҙы йылыла тот" тигән ҡағиҙә бар. Был баште бик күп энергия йыйылып китеүҙән

## ҺАБАҠТАР

**Беҙгә, журналистарға, йыш ҡына гәзит уҡыусыларыбыҙға төрлө ярҙам күрһәтергә тура килә. Юрист та булабыҙ ҡайһы ваҡыт, психолог та. Ҡайһы берәүҙәре ниндәй ҙә булһа мәсьәләне хәл итеүҙе үтенә, икенселәре һеҙгә ҡыҙыҡлы тема булыр, тип, үҙе тарыған ғәжәп ваҡиға, әкәмәт хәл тураһында бәйән итеп, шул уҡ ваҡытта проблема күтәрә, ҡайғы-хәсрәте менән уртаҡлаша. Өсөнсөләр редакцияға күңелен бушатырға килә. Билдәле инде, күптәр ғәҙеллек, дөрөҫлөк эҙләп мөрәжәғәт итә. Улар йәшәйешебеҙҙең төрлө өлкәһенә ҡағыла. Кемдер ғаилә, күрше, хеҙмәттәштәре мөнәсәбәттәрендә хәҡиҡәт эҙләй, икенселәр власть эшмәкәрлеге, ҡабул ителгән закондарҙың кешелек ҡанундарына тура килмәүе менән риза түгел. Телефондан да шылтыраталар, хат менән дә мөрәжәғәт итәләр.**

# ЙЫУАШ БУЛҺАҢ - БАҪЫРҘАР



Яңыраҡ 20 йәшлек ҡыҙы менән бер ҡатын килеп инде. Ҡыҙы ҡайҙа ғына эшләһә лә, эш биреүсенең аҡсаһын биреп бөтөрмәүенә, ҡайһы берҙә бөтөнләй эш хаҡын түләмәй ҡайтарып ебәреүҙәренә зарланды әсәй. Һөнәре - бухгалтер, әммә стажы, эш тәжрибәһе булмағас, ҡыҙын бер ҡайҙа ла эшкә алмайҙар икән. Бер йылда алты эш урынын алмаштырырға өлгөргән: бер нисә урында официант булып эшләгән, баҙарҙа, магазинда аҙыҡ-түлек, кейем-һалым һатыуға ла сыҡҡан. Ҡыҙының бер урында оҙаҡ тоҡтарланмауын, эштән эшкә йөрөүен эшҡыуарҙарҙың ғәҙелһеҙлегенә килешә алмауы менән аңлатты ҡатын. Алдаҡсылар, оятһыҙҙар, тупаҫтар, әҙәпһеҙҙәр заманы, тип, бөгөнгө көндө, аҙмы-күпме эшләп киткән эшҡыуарҙарҙы әрләп бөткәнсе, ҡыҙы бер нәмә лә өндәшмәне. Һуңғы тапҡыр ни эшләп эштән китеүе тураһында һорап, ҡыҙға өндәшәм. Уныһы ыҡ-мыҡ иткәнсе, тағы әсәһе һүҙ алды:

- Ҡыҙым ни тиклем тырышып эшләһә лә, магазин етәксеһе уның менән бергә урынлашҡан ялҡау, эшкинмәгән икенсе ҡыҙҙы маҡтап, бөтәһенә өлгө итеп ҡуя, ә минекенең тырышлығын бөтөнләй күрмәй, киреһенсә, етешһеҙлеген табып, ваҡ-төйәккә бәйләнә. Бөтәһенә лә түҙер ҙә ине, бер үк эште эшләп, аҡсаһында ҙур айырма булғас, ризалашманы шул.

Күренеп тора, ҡыҙыҡай бик ҡыйыуһыҙ, әсәһенең күҙенә генә ҡарап тора. Килештермәһәм дә:

- Күпме түләнеләр һуң? - тип ҡыҙҙан һораным.

- Урынлашҡан ваҡытта айына 13 мең һумдан да кәм булмаясаҡ тигәйне, йәнә һатылған тауарҙан 5 процент түләйем, тип вәғәҙә иткәйне. Ай аҙағында вәғәҙә иткәненең яртыһын ғына бирҙе, - ти ҡыҙ.

- Эш хаҡын ни өсөн кәметеүен етәксеңдән һораныңмы һуң? - тим.

- Ул миңә барыһын да яҙып бирҙе, - тине лә, конверт һымаҡ бәләкәй генә сумкаһынан ҡағыҙ киҫәген сығарҙы. Унда сәбәпһеҙ һуңлап килгәне, эш урынын бысраҡ тотҡаны, дөрөҫ иҫәпләмәгәне өсөн эш хаҡы кәметелеүе хаҡында яҙылғайны. Өҫтәүенә, һатҡан әйберенең проценты ла бик аҙ сыҡҡан...

Ҡыҙҙың ҡалтыранған нескә тауышын ишеткәс, ҡапыл кешенең күңел донъяһын яҡшы белгән билдәле яҙыусы Антон Чеховтың "Размазня" исемле хикәйәһе иҫкә төштө. Унда бер байҙың гувернанткаһына ике айлыҡ эш хаҡын 80 һум вәғәҙә итеүе, бирер ваҡыт еткәс, алдап-йолдап уны 11 һумға тиклем кәметеүе тураһында бәйән ителә. Ябай ғына эпизод аша автор ике кешенең - байҙың һәм гувернантканың - психологик образдарын асып һала. Үрҙә атап кителгән ҡыҙыҡай һәм эш биреүсе осрағындағы кеүек, хужа гувернанткаһының эш хаҡын ни өсөн ҡыҫҡартҡанын яҙып барҙым тип, һәр береһен уҡытыусы ҡыҙға тәфсирләп аңлата. Һөҙөмтәлә ҡыҙҙың бөтәһе менән дә өнһөҙ килешеүе төп геройҙы сығырынан сығара. Аҙаҡтан ул был ҡылығын гувернанткаға эш биреүселәргә ҡарата ҡыйыуыраҡ булырға, асығауыҙ, бешмәгән булмаҫҡа һабаҡ биреү маҡсатында эшләүен әйтә. Түбәнһетеүҙәргә риза булып, өндәшмәй ҡалған өсөн һине алдарға, кәмһетергә тырышалар, уҫалыраҡ бул, үҙеңә тейешлене талап итергә өйрән, тип кәңәш бирә.

Күреүегеҙсә, яҙыусы күтәргән проблема бөгөнгө йәмғиәттә лә бар. Антон Павлович ул ваҡытта крепостнойлыҡ хоҡуғы бөтөрөлөү сәбәпле юғалып ҡалған, аҙ ғына эш хаҡына ла күнеп эшләргә мәжбүр булған Рәсәй халҡын бер ҡыҙ миҫалында күрһәтһә, редакцияға ярҙам һорап килгән ҡыҙ - бөгөнгө Рәсәйҙең ҡыҫҡартыу һәм ҡулайлаштырыу еле ҡорбаны. Әгәр ҙә бөтә предприятиелар ҙа элеккесә эшләһә, штат берәмектәре һаҡланһа, был йәш замандашыбыҙ ҙа үҙе һайлаған һөнәре буйынса урын табыр, стажы ла, тәжрибәһе лә булыр ине, моғайын. Әлбиттә, был ҡыҙҙың, Антон Чехов әйтмешләй, бешмәгәнлеге, асыҡ ауыҙлығы ла юҡ түгел. Бер нисә тапҡыр һуңлап килеүен, эш урынын бысраҡ тотоуын иҫәпкә алһаң, яуаплылыҡ та самалылыр, тип уйларға урын бар. Икенсе яҡтан, әсәһенең күҙ ҡарашынан ҡурҡып торған был бала эш биреүсегә ышанысһыҙ ҙа булып тойолоуы ихтимал. Шуғалыр ҙа, бәлки, унан төрлө юлдар менән тиҙ генә ҡотолоу яғын ҡарайҙарҙыр.

Ҡыҙ, бәлки, ул хәтлем төшөп ҡалғандан да түгелдер. Тәрбиәле, әҙәпле кеше, ғәҙәттә, тупаҫ һәм ҡаты күңеллеләрҙән айырмалы, өндәшмәй ҡалыуҙы хуп күрә бит. Әммә, Чеховтың "Размазня"-һындағы төп герой әйтмешләй, был донъяла бер нисек тә ебегәнлек күрһәтергә ярамай, көслө булғанда ғына йәшәүе еңел. Бөгөнгө заманда иһә көслө булыу өсөн төрлө яҡлы белемдән тыш, йәштәргә тағы ҡыйыулыҡ, тәүәккәллек, эшһөйөүсәнлек һәм бешмәгән булып күренмәҫ өсөн ҡайһы берҙә уҫаллыҡ та кәрәк. Боронғолар юҡҡа ғына, йыуаш булһаң - баҫырҙар, тип әйтмәгәндер бит.

**Лена АБДРАХМАНОВА.**

---

һаҡлай. Энергияны табандарға йүнәлтеп иһә, ҡан баҫымын түбәнәйтергә, ә аяҡтарҙы йылыла тотоп, йөрәк өйәнәген иҫкәртергә мөмкин. Шуға күрә, табандарҙы ышҡып йылытығыҙ ҙа, энергияны кендектә туплағыҙ, ул да йылы булырға тейеш.

• **Муйынды ла йылыла тотоу яҡшы.** Сөнки унда тәндең иң мөһим өлөшө - башҡа табан (йәки кирегә) йүнәлгән ҡан тамырҙары һәм нервылар күп. Шуға муйынға ла иғтибар итергә: уны йылыла тоторға, көсөргәнештән арындырырға кәрәк. Тойғоларға йыш бирелмәҫкә, ниҙелер оҙаҡ һәм юғары көсөргәнеш менән ҡарау йәки тыңлауҙан тыйылырға тырышығыҙ. Һиҙеү ағзалары артыҡ актив эшләһә, ауырыу барлыҡҡа килеүе ихтимал. Оҙағыраҡ йәшәү һәм ауырыуҙарҙан һаҡланыу өсөн көнөнә күп тапҡыр төкөрөк йотоу күнегеүен башҡарығыҙ. Йыуынғандан һуң йәки тирләп елгә сыҡмағыҙ.

• **Туҡланыуҙа - аҡыл.** Ашағандан һуң оҙаҡ ултырырға йәки ятырға тура килмәһен өсөн артығын ашамағыҙ, сөнки был ғүмерҙе ҡыҫҡарта. Туйынғансы өҫтәл артынан тороп китегеҙ һәм бер аҙ ял итеп йөрөп килегеҙ; йоҡлар алдынан ашамағыҙ. Әҙ, әммә йыш ашау файҙалы. Был аш һеңдереүҙе яҡшырта, төп биш ағзаға артыҡ көс төшөрөүҙән һаҡлай. Шулай уҡ башта эҫе, һуңынан йылы аштарҙы ашау яҡшы. Туҡланырҙан алда һәр ваҡыт еңелсә генә тын алып, аҙ ғына һауа йотоу мөһим. Артығын ашағандан һуң һыуҙы күп эсмәй тороғоҙ һәм ҡапыл йотмағыҙ. Оҙаҡ ваҡыт ас йөрөп, ҡапыл туйғансы ашағандан һуң ашҡаҙан насар эшләй. Ас ҡарынға сей емеш тә ашамағыҙ, сөнки улар ашҡаҙандың диафрагманан өҫкө өлөшөн йылыта.

• **Урталыҡ һаҡлағыҙ.** Самаһыҙ оҙаҡ йөрөү быуындарға зыян, ултырыу - мускулдарға, тик тороу - һөйәктәргә, ятыу - йәшәү энергияһына, артыҡ хыялдарға бирелеү ҡанға зыян килтерә. Асыуланыу, ҡайғырыу, үкенеү, бойоғоу артыҡ ныҡ шатланыу йәки ҡәнәғәтлек кисереү кеүек үк берҙәй зыянлы. Бар нәмәлә алтын урталыҡ һаҡлау мөһим.

• **Шатлыҡ Ци кимәлен (йәшәү көсөн) арттыра.** Оло шатлыҡ - ҙур Ци. Оло ҡайғы Ци ағышын туҡтата. Артыҡ актив енси тормош менән йәшәп, йәшәү көсөн тәләфләп бөтөүегеҙ ихтимал. Төкөрөк йотоу - уның асылындағы энергияны арттырыу тигәнде аңлата. Йотмаһаң, ул көсөн юғалта. Ауырығанда башты төньяҡҡа ҡарай һалып ятмағыҙ. Шулай уҡ йоҡонан уяныу менән хәбәрҙе күп һөйләй башлау ҙа йәшәү көсөн һура.

• **Миҙгелдәр.** Ҡышҡыһын аяҡтар йылыла, ә баш һалҡында булыуын хәстәрләгеҙ. Яҙ һәм көҙ быларҙың икеһенә лә һалҡынды тойорға ирек бирегеҙ. Ауырыған саҡта тирләһәгеҙ, һыуыҡ һыу эсеүҙән тыйылығыҙ, сөнки ул йөрәк һәм ашҡаҙанды боҙа.

Яҙ һәм йәй башығыҙҙы көнсығышҡа, ә көҙ һәм ҡыш көнбайышҡа ҡарай һалып ятығыҙ. Бер яҡ ҡабырғағыҙҙа, аяҡтарҙы бөкләп йоҡлағыҙ. Был йәшәү көсөн тупларға ярҙам итер.

Йәй һәм көҙ иртә йоҡларға ятып, иртә торорға, ҡышын иртә ятып, һуң торорға, ә яҙын яҡты саҡта йоҡларға ятып, иртә торорға ғәҙәтләнегеҙ. Таңда, төшкөһөн, төштән һуң, эңер һәм төн уртаһында тештәрҙе таҙартып, ауыҙҙы ете тапҡыр сайҡарға кәрәк - был ғүмерҙе оҙайта һәм һөйәктәрҙе, тештәрҙе, мускулдарҙы, тырнаҡтарҙы, сәстәрҙе нығыта.

**Шулай ҙа барлыҡ был кәңәштәр файҙалы мәғлүмәттәрҙең береһе генә булыуын һәм табипҡа мөрәжәғәт итеүҙән арындырмауын хәтерҙән сығармағыҙ. Сәләмәт булығыҙ!**

---

## УҢЫШ ҠАҘАН



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Ижадсы һеҙҙе ярата

Шулай итеп, даими рәүештә уникаль шәхес булыуығыҙҙы, Ижадсының һеҙҙе яратыуын, күҙгә күренмәҫ терәккә эйә булыуығыҙҙы үҙегеҙҙең иҫегеҙгә төшөрөп торорға тейешһегеҙ. Шундай көндәлек иҫкә төшөрөп тороуҙар арҡаһында һеҙ иң яҡшы булыуығыҙҙы, аҡса эшләү тураһындағы илаһи идеяларҙың һеҙгә уң яҡ мейе ярымшарының үтенесе буйынса килеүен һәм тап ошо идеялар тормоштоң алдынғы позицияларында булырға ярҙам итеүен ныҡлы үҙләштерерһегеҙ. Ижадсының бөтөн нәмә хәленән килә һәм һеҙ Уның сикһеҙ аҡылына ышанығыҙ.

Һеҙ быны көн һайын ҡабатлай алаһығыҙ. Уны емешле идеяларға күсеү сараһы итеп файҙаланығыҙ. Бынан тыш, һеҙ көн һайын шәхси аффирмацияларығыҙҙы ҡабатлай алаһығыҙ. Мәҫәлән, ошондайҙарҙы:

• Һәр саҡ, күҙҙәремде йомоп, өс тапҡыр тәрән итеп тын алып, көсөргәнештән тәрән арыныуға өлгәшәм. Минең яңы идеяларым барлыҡҡа килә. Мин проблемаларҙы хәл итәм. Юғары аң минең аңыма яуаптар һәм хәл итеү юлдарын табырға ярҙам итә. Шулай булһын.

Әгәр һеҙҙең бөгөнгә аныҡ ғәмәлдәр эшләү программағыҙ бар икән, шундай ҡуйылыштан һуң тиҙ генә уларға күсегеҙ. Ҡуйылышты үтәп һәм программалаштырыуҙы тамамлап, һеҙ шулай тип әйтә алаһығыҙ:

• Мин беләм, минең аңым Юғары аңдың кәүҙәләнеше. Мин уның ижади көсөнә ышанам. Мин, хатта үҙем уны һиҙмәгәндә лә, һәр саҡ алға барам. Мин ыңғай һөҙөмтәләр көтәм.

Был ҡуйылыштарҙың мәғәнәһе нимәлә? Нигеҙҙә, улар: "Мин хәл-торош алдында ихтыярһыҙ ҡурсаҡ түгел. Мин - хәл-торошто булдырыусы", - ти. Бынан тыш, улар: "Мин көсөргәнештән арынғанмын һәм үҙемә Аллаһы Тәғәләне индерәм", - ти. Һеҙ Ижадсының тормошоғоҙҙа көн һайын булып торған миһырбанлығын тирә-яҡтағыларға аңлатыуы ни тиклем ауыр булыуын аңларһығыҙ. Бәләкәй генә ысын мөғжизә тураһында һөйләһәгеҙ ҙә: "Тап килеү", - тиер күптәр һәм иңбаштарын ғына йыйырып ҡуйыр. Әгәр һеҙ ошо тап килеү - ул Ижадасының ярҙамы, тип аңлата башлаһағыҙ, әңгәмәсегеҙ һүҙҙе сәйәсәткә йәки һауа торошона күсерер.

Бер ниндәй һүҙҙәр ҙә "теге яҡ"тың ярҙамын яҙып аңлата алмай. Уның тураһында һөйләгәндә һеҙ бары тик энергияғыҙҙы ғына бушҡа әрәм итәһегеҙ. Киләсәгегеҙҙе үҙ һүҙҙәрегеҙ менән үҙгәртәһегеҙ. Әммә һеҙ, хатта иң изге ниәттәр менән етәкселек итһәгеҙ ҙә, бер нәмәгә лә өлгәшә алмаясаҡһығыҙ.

**"Теге яҡ"тан өҙлөкһөҙ ярҙам менән тәьмин иткән өс талап бар:**

• Аңығыҙҙы был донъяны көндән-көн яҡшыртыу өсөн файҙаланығыҙ

• Бындай мәсьәләләр буйынса теләһә кем, хатта ғаилә ағзалары менән фекер алышыуҙан тыйылығыҙ, ләкин уларға ла үҙегеҙ эшләгәнде эшләргә тәҡдим итегеҙ.

• Көн һайын доғалар, ҡуйылыштар һәм мөхәббәт ярҙамында Ижадсы менән бәйләнешегеҙҙе нығытығыҙ.

**Роберт СТОУН.**
**(Дауамы бар).**



## 19 ДЕКАБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро". [0+]
9.00, 3.00 Новости.
9.10 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.50 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.30 Х/ф "Сто дней после детства". [12+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
12.45, 14.15, 18.05, 23.45, 3.05 Информационный канал. [16+]
17.15 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Казанова в России". [16+]
22.45 "Большая игра". [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Дама с собачкой". [12+]
23.15 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.00 Д/ф "Арнольд Дейч. Последняя легенда". [12+]
2.40, 3.40 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
4.43 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Профилактика на канале с 7.00 до 14.00.**
**14.00 Новости недели (на рус.яз).**
**14.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**15.00 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**15.30 "Гора новостей".**
**15.45 Т/с "Бирешмә". [6+]**
**16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**17.00 Тәмле. Мы вместе! [12+]**
**17.45 Пофутболим? [12+]**
**18.00 "Бай". [12+]**
**18.30, 22.30, 0.30 Новости (на баш. яз).**
**18.45 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Авангард" (Омск). КХЛ.**
**22.00 Тайм-аут. [12+]**
**23.00 Башкирские каникулы. [12+]**
**23.45 Бәхетнамә. [12+]**
**1.00 "Башҡорт йыры". [12+]**
**1.45 Спектакль "Прекрасная возлюбленная". [12+]**
**4.00, 5.00 Вечерний телецентр. [12+]**
**6.00 "Это моя профессия". [12+]**

## 20 ДЕКАБРЯ ВТОРНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро". [0+]
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.40 "Жить здорово!" [16+]
10.30, 11.20, 14.15, 18.05, 0.45, 3.05 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Казанова в России". [16+]
22.45 "Большая игра". [16+]
23.45 Д/ф "Бомба. Наши в Лос-Аламосе". [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Дама с собачкой". [12+]
23.15 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.00, 3.00 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
4.00 Т/с "Личное дело". [16+]
4.50 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Ете егет. [12+]**
**10.45 Специальный репортаж. [12+]**
**11.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.30, 12.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 14.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**12.45 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 0.30 Новости (на баш. яз).**
**13.45, 23.45 Бәхетнамә. [12+]**
**15.00 Детей много не бывает. [6+]**
**15.30 "Гора новостей". [6+]**
**15.45 Т/с "Бирешмә". [6+]**
**17.00 "Дорога к храму". [0+]**
**17.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**18.00 "Елкән". [6+]**
**19.00 Брифинг.**
**20.00 "Сәнгелдәк". [0+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**20.30 Вечерний телецентр.**
**22.00 "Это моя профессия". [12+]**
**23.00 Атлас Баженова: Башкортостан. [6+]**
**23.30 История одного села. [12+]**
**1.00 "Башҡорт йыры". [12+]**
**1.45 Спектакль "Мама приехала". [12+]**
**4.30, 5.30 Вечерний телецентр. [12+]**

## 21 ДЕКАБРЯ СРЕДА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро". [0+]
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.40 "Жить здорово!" [16+]
10.30, 11.20, 14.15, 18.05, 0.45, 3.05 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Казанова в России". [16+]
22.45 "Большая игра". [16+]
23.45 Д/ф "Без права на славу". [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Дама с собачкой". [12+]
23.15 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.00, 3.00 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
4.00 Т/с "Личное дело". [16+]
4.50 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Тәмле. Мы вместе. [12+]**
**10.30 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [0+]**
**10.45 "Курай даны". [12+]**
**11.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.30, 12.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 14.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Дознание. [16+]**
**12.15 Пофутболим? [12+]**
**12.45, 3.45 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 0.30 Новости (на баш. яз).**
**13.45, 23.45 Бәхетнамә. [12+]**
**15.00 "МузКәрәҙ". [6+]**
**15.30 "Гора новостей".**
**15.45 Т/с "Бирешмә". [6+]**
**17.00 "Это моя профессия". [12+]**
**17.45 "Орнамент". [0+]**
**18.00 Тайм-аут. [12+]**
**18.45 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Амур" (Хабаровск). КХЛ.**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 Автограф. [12+]**
**1.00 "Башҡорт йыры". [12+]**
**1.45 Спектакль "Эх, друг Байтимер..." [12+]**
**3.30 История одного села. [12+]**
**4.30, 5.30 Вечерний телецентр. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

## 22 ДЕКАБРЯ ЧЕТВЕРГ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро". [0+]
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.40 "Жить здорово!" [16+]
10.30, 11.20, 14.15, 18.05, 1.15, 3.05 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Казанова в России". [16+]
22.45 "Большая игра". [16+]
23.45 "Горячий лед". Чемпионат России по фигурному катанию. Мужчины. Короткая программа. Пары. Короткая программа. [0+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Дама с собачкой". [12+]
23.15 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.00, 3.00 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
4.00 Т/с "Личное дело". [16+]
4.50 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Башкирские каникулы. [12+]**
**10.45 История одного села. [12+]**
**11.00, 22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.30, 12.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 14.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Историческая среда. [12+]**
**12.45 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 0.45, 2.00 Новости (на баш. яз).**
**13.45, 0.00 Бәхетнамә. [12+]**
**15.00 "Сулпылар". [0+]**
**15.30 "Гора новостей". [6+]**
**15.45 Т/с "Бирешмә". [6+]**
**17.00 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**17.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**18.00 Башкорттар. [6+]**
**19.00, 20.30 Вечерний телецентр.**
**20.00 "Сәнгелдәк". [0+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**1.15 "Башҡорт йыры". [12+]**
**2.30 Спектакль "Посетитель". [12+]**
**4.00, 5.00 Вечерний телецентр. [12+]**
**6.00 "Дорога к храму". [0+]**

## 23 ДЕКАБРЯ ПЯТНИЦА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро". [0+]
9.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.40 "Жить здорово!" [16+]
10.30, 11.20, 14.15, 1.35 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости.
18.40 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.45 "Поле чудес". [16+]
21.00 "Время".
21.45 "Голос. Дети". 10-й юбилейный сезон. [0+]
23.20 "Горячий лед". Чемпионат России по фигурному катанию. [0+]
0.40 Д/ф Премьера. "Олег Целков. Единственный из многих". [12+]
4.40 "Наедине со всеми". [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.15 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.30 Дуэты. [12+]
0.05 Улыбка на ночь. [16+]
1.10 Х/ф "Моё любимое чудовище". [12+]
4.19 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Атлас Баженова: Башкортостан. [6+]**
**10.30, 12.45 "Йома". [0+]**
**11.00, 5.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.30, 12.30, 16.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 14.45, 16.45, 22.00, 6.00 Интервью. [12+]**
**12.00 История одного села. [12+]**
**12.15 Патриот РФ. [12+]**
**13.15 "Курай даны". [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30, 0.45 Новости (на баш. яз).**
**13.45 "Байык-2022". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**15.00 "Городок АЮЯ". [6+]**
**15.15 "МузКәрәҙ". [0+]**
**15.30 "Гора новостей".**
**15.45 Т/с "Бирешмә". [6+]**
**17.00 Башкирские каникулы. [12+]**
**17.45 "Честно говоря". [12+]**
**18.45 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Адмирал" (Владивосток). КХЛ.**
**23.00, 4.15 "Ете егет". [12+]**
**23.45 Колесо времени. [12+]**
**1.15 "Башҡорт йыры". [12+]**
**2.00 Спектакль "Кадриль". [12+]**
**3.30 "Алтын тирмә". [0+]**
**5.00 Автограф. [12+]**

## 24 ДЕКАБРЯ СУББОТА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота". [0+]
9.00 "Умницы и умники". [12+]
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00 Новости.
10.15 Премьера. "ПроУют". [0+]
11.10 Премьера. "Поехали!" [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 Д/ф Премьера. "Бог войны. Укротители огня". [12+]
13.05 "Видели видео?" [0+]
15.30 "Горячий лед". Чемпионат России по фигурному катанию. Танцы. [0+]
17.00 "Горячий лед". Чемпионат России по фигурному катанию. Пары. Произвольная программа. Прямой эфир. [0+]
18.20 Премьера. "Снова вместе. Ледниковый период". [0+]
21.00 "Время".
21.35 "Клуб Веселых и Находчивых". Высшая лига. [16+]
23.55 "Горячий лед". Чемпионат России по фигурному катанию. Женщины. Произвольная программа. [0+]
1.40 Х/ф "Эвита". [12+]
4.10 "Моя родословная". [12+]

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 По секрету всему свету.
9.00 Формула еды. [12+]
9.25 Пятеро на одного.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Большие перемены.
12.35 Т/с "Склифосовский". [16+]
18.00 Привет, Андрей! [12+]
21.00 Х/ф "Народный артист". [12+]
0.50 Х/ф "Провинциальная Мадонна". [12+]
4.10 Х/ф "Сказки рублёвского леса". [12+]
5.52 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**7.30, 18.30 Новости (на баш. яз).**
**7.45 "Ете егет". [12+]**
**8.30 "Это моя профессия". [12+]**
**9.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**9.30 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**10.00 "Елкән". [6+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 Преград. Net. [6+]**
**11.00 "КультУра". [6+]**
**11.15 "МузКәрәҙ". [0+]**
**11.30 Детей много не бывает. [6+]**
**12.00 Тәмле. Мы вместе! [12+]**
**12.30 Новости (на баш. яз). [12+]**
**13.00 Автограф. [12+]**
**13.30 Башкорттар. [6+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 "Башҡорт йыры". [12+]**
**19.00, 4.15 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**19.45 Специальный репортаж. [6+]**
**20.00 "Сәнгелдәк". [0+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**20.30 "Байык-2022". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.30, 1.15 Новости недели (на баш. яз).**
**23.15 "Башҡорт йыры-2022". [12+]**
**2.00 Спектакль "Вот так случилось..". [12+]**
**5.00 "Млечный путь". [12+]**
**6.00 Үткән гүмер. [12+]**

## 25 ДЕКАБРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 6.10 Х/ф "Егерь". [12+]
6.00, 10.00 Новости.
6.55 Играй, гармонь любимая! [12+]
7.40 "Часовой". [12+]
8.10 "Здоровье". [16+]
9.20 "Мечталлион". Национальная Лотерея. [12+]
9.40 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.10 Премьера. "Жизнь своих". [12+]
11.05 Премьера. "Повара на колесах". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Видели видео?" [0+]
14.35 Х/ф "Мэри Поппинс, до свидания". [0+]
17.20 "Горячий лед". Чемпионат России по фигурному катанию. Показательные выступления. [0+]
18.50 Премьера. Церемония вручения народной премии "Золотой граммофон". [16+]
21.00 "Время".
22.35 "Что? Где? Когда?" Зимняя серия игр. [16+]
23.50 Д/с "Романовы". [12+]
0.50 "Моя родословная". [12+]
1.40 "Наедине со всеми". [16+]
3.05 Д/с "Россия от края до края". [12+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

6.15 Х/ф "Китайский Новый год". [12+]
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 Когда все дома с Тимуром Кизяковым.
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 16.00 Вести.
11.50 Х/ф "И в счастье и в беде". [12+]
17.00 Песни от всей души. [12+]
19.00 Вести недели.
21.00 Д/ф "Красный проект". [12+]
23.00 Москва. Кремль. Путин.
23.35 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.25 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
3.26 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз).**
**7.45 "Йома". [0+]**
**8.15, 2.45 Тормош. [12+]**
**8.45 "Курай даны". [12+]**
**9.00 Новости (на рус. яз).**
**9.30 "Бай". [12+]**
**10.00 "Книга сказок". [0+]**
**10.15 "Гора новостей". [6+]**
**10.30 "Сулпылар". [0+]**
**11.00 Территория женского счастья.**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**15.00 "Алтын тирмә". [0+]**
**15.45, 2.15 "Дорога к храму". [0+]**
**16.15, 3.15 Историческая среда. [12+]**
**16.45, 4.15 "Честно говоря". [12+]**
**17.30 "Уфимская волна-2022". Финал музыкального конкурса радио "Спутник ФМ". [12+]**
**20.00 Атлас Баженова: Башкортостан. [6+]**
**20.30 Формула меда. [12+]**
**20.45 Дознание. [16+]**
**21.00, 22.30, 3.45 Республика LIVE #дома. [12+]**
**21.30 Новости недели (на рус.яз).**
**22.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**23.00 "Млечный путь". [12+]**
**0.00 Спектакль "Дачники". [12+]**
**5.00 Финликбез. [12+]**
**5.30 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**6.00 Итоги недели (на рус. яз). [0+]**

СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ

# ҠУРАЙЫБЫҘ...

**Ошо көндәрҙә Рәсәй Федерацияһы Федераль Йыйылышының Федерация Советында Валентина Матвиенко халыҡ ижады үҙәктәре етәкселәре, мәҙәниәт һәм сәнғәт эшмәкәрҙәре менән ҙур осрашыу үткәрҙе.**

Сарала илдең 80 төбәгенән 213 вәкил ҡатнашты. Федерация Советы рәйесе Валентина Матвиенко, РФ мәҙәниәт министры Ольга Любимова, Федерация Советы рәйесе урынбаҫары Константин Косачев, Федерация Советының фән, мәғариф һәм мәҙәниәт буйынса комитеты рәйесе Лилиә Ғүмәрова, сенаторҙар, Рәсәй Президенты Хакимиәте етәксеһе урынбаҫары Магомедсалим Магомедов, Рәсәй Президентының йәмәғәт проекттары буйынса идаралығы начальнигы Сергей Новиков, халыҡ-ара мәҙәни хеҙмәттәшлек буйынса махсус вәкил Михаил Швыдкой, В.Д. Поленов исемендәге Дәүләт Рәсәй халыҡ ижады йорто директоры Тамара Пуртова, төбәктәрҙең мәҙәниәт министрлыҡтары етәкселәре, шулар араһында Башҡортостандың мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова ла булды.

Осрашыу барышында "Халыҡ мәҙәниәтенең алтын антологияһы" күрһәтелде, ундағы йөҙ исемлектә башҡорт халыҡ уйын ҡоралы ҡурайҙы эшләү ысулы ла теркәлде. Антологияға Рәсәй халыҡтарының йолалары һәм байрамдары, эпик ҡобайырҙар, һөнәрҙәр, кәсеп, йыр һәм бейеү традициялары индерелгән. Былар барыһы ла Матди булмаған мәҙәни мираҫ реестрын төҙөү мәсьәләләре буйынса федераль эксперт советында килешеү үткән. Исемлектәге ҡайһы бер объекттар 2022 йылдың йәйендә уҙғарылған фольклор экспедициялары барышында асыҡланған.

# ОРКЕСТР МЕНӘН...

**"Ставрополеның музыкаль көҙө" Халыҡ-ара фестивален йомғаҡлау сараһында Башҡортостан Республикаһы Халыҡ уйын ҡоралдары милли оркестры солисы, халыҡ-ара конкурстар лауреаты Арыҫлан Оморҙаҡов маэстро Андрей Долгов етәкселегендәге "ТеремА" халыҡ уйын ҡоралдары йәштәр оркестры менән бергә тәүге тапҡыр сығыш яһаны. Тамашасы иғтибарына Морат Әхмәтовтың "Ҡурай менән оркестр өсөн фантазия"һы тәҡдим ителде.**

- "ТеремА" йәш, әммә бик яҡшы оркестр. Андрей Долгов менән быға тиклем дә таныш инем. Тәүге тапҡыр Красноярскиҙа уҙғарылған дирижерҙар конкурсында күргәйне, бәлки, шул ваҡыттан уҡ бергә сығыш яһарға саҡырырға теләге булғандыр, - ти Арыҫлан Оморҙаҡов. - Программа бик бай эстәлекле һәм ҡатмарлы булды. Бында минән тыш тағы төрлө төбәктәрҙән йыйылған музыканттар яңғыҙ башҡарыусы булараҡ сығыш яһаны. Улар араһында дудукта Виталий Погосян, балалайка-контрабаста Михаил Дзюдзе, хомуста Юлиана Кривошапкина, вокалсы Ирина Крутова, балалайкала Георгий Нефедов булды. Мин оркестр менән бергә ҡурайҙа Морат Әхмәтовтың композицияһын башҡарҙым, сөнки тик ул ғына рус халыҡ оркестры өсөн һалынған. Концерт алдынан бер тапҡыр ғына уйнап ҡараныҡ. Нисек яңғырар икән тип борсолғайныҡ, барыһы ла яҡшы үтте. Тамашасы һоҡланып ҡабул итте.

Әйткәндәй, З. Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт институтын тамамлаған Арыҫлан Оморҙаҡов Башҡортостандың Халыҡ уйын ҡоралдары милли оркестрында өсөнсө йыл эшләй. Әммә ошо ваҡыт эсендә үҙен һәләтле музыкант булараҡ таныта. Башҡортостан Милли симфоник оркестры, Красноярск рус халыҡ оркестры, Новосибирскиҙа рус халыҡ уйын ҡоралдарының йыйылма оркестры менән яңғыҙ башҡарыусы сифатында сығыш яһаған. Рәсәй мәҙәниәтенең күп төрлөлөгөн үҙендә туплаған "ТеремА" халыҡ уйын ҡоралдары йәштәр оркестры менән яҡташыбыҙҙың беренсегә сәхнәгә күтәрелеүе булды, әммә һуңғыһы түгел, тип ышанғы килә.

# ЙЫР КӨСӨНӘ ЫШАНЫП

**Борон-борондан халкыбыҙҙа йыр жанрына ҙур иғтибар бирелгән. Йыр йырлап бишек бәүеткәндәр, йыр аша һөйөү тойғоларын белгерткәндәр, йыр аша нәфрәт тә, әсе көлөү ҙә, шаяртыу ҙа мөмкин булған. Йыр менән оҙатҡан-ҡаршы алғандар, йыр саҡырғанда яуға күтәрелгәндәр, йырлай-йырлай еңеү менән әйләнеп ҡайтҡандар һәм башҡалар. Шундай оло көскә эйә булған ул йыр.**

Һәм был бөгөн дә шулай! Бөгөн ул үҙ ҡеүәтендә һәм тәьҫирендә. Быны беҙгә Хәсәйен Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы артистары иҫбатланы. "Йыр көсө" тип аталған өр-яңы проект менән бөгөн республиканың ҡала һәм райондары буйлап сәйәхәт итә улар. "Илебеҙ еңел осор кисермәй, халыҡҡа рух ныҡлығы һәм берҙәм булыу зарур. Ә нимә беҙҙе бер залдарға йыя һәм бер тулҡында тирбәлтә ала? Әлбиттә, йыр! Рухлы, хисле, илһамлы концерттар. Тамашасыларға йыр аша мөрәжәғәт итеү, улар менән йырҙар аша һөйләшеү һәм күңелдәрен үҫтереү өсөн иң нескә һәм тетрәндергес йырмондарыбыҙҙы барлап, халыҡ араһына сыҡтыҡ", - ти был хаҡта филармонияның художество етәксеһе, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Сулпан Рәил ҡыҙы Асҡарова.

"Йыр көсө"н иң беренсе булып ҡарау бәхете баш ҡала тамашасыһына тәтене. Ҡаланың төрлө ойошмаларына, уҡыу йорттарына ла барып етте коллектив. Үткән шәмбелә Стәрлетамаҡ ҡалаһында йәшәүселәрҙе һөйөндөрһә, киләһе көндәрҙә Күмертау, Мәләүез яҡтарында булмаҡсы улар. Ғинуар айында иһә Сибай, Баймаҡ, Көйөргәҙе, Бишбүләк тарафтарында ла был тамашаны ҡарай аласаҡтар. Февралдә Белорет, Дүртөйлө, Борай, Ҡариҙел, Туймазы, Нефтекама, Ишембай халҡы был матур осрашыуҙы көтөп ҡаласаҡ. Һәм хатта май айына ҡәҙәр "Йыр көсө" Башҡортостан буйлап гастролдәрҙә йөрөйәсәк. "Халыҡ концертты бик тә ихлас ҡабул итә, - тип һөйләй филармонияның солисы, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Заһир Иҫәнсурин. - Илһөйәр, халыҡсан йырҙарға һыуһаған тамашасы күп йырҙарҙы күтәреп ала, ҡайһылары хатта аяғүрә баҫып тыңлай. Бына ошондай сараларҙа беҙ үҙебеҙҙең бер маҡсат һәм бер теләк менән йәшәүсе бер ил балалары икәнлегебеҙҙе яҡшы тоябыҙ. Йыр көсө тыңлаусыларын батырыраҡ, рухлыраҡ, ныҡыраҡ итә..."

Артистар ниндәй ваҡытта ла халыҡ араһында, алғы һыҙыҡта һәм кешеләр өсөн ижад итә, эшләй һәм йән дауаһы бирә.

**Юлия ПЕТРОВА.**

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**21-22 декабрь "Алтын аҫҡыс - Remake"** (А. Толстой), музыкаль мажара. 10.00, 12.00 6+
**22 декабрь "Джут һуңғы йәйләү"** (О. Жанайдаров), драма. 16+
**23 декабрь "Мираликундия"** (В. Лившиц, И. Кичанова), әкиәт. 10.00, 12.00 6+
**"Хыялый"** (С. Әбүзәр), лирик комедия. 12+
**24 декабрь "Мираликундия"** (В. Лившиц, И. Кичанова), әкиәт. 10.30, 12.00 6+
**"Бәхет хаҡы"** (Х. Мөҙәрисова), музыкаль мелодрама. 18.00 16+
**25 декабрь "Алтын аҫҡыс - Remake"** (А. Толстой), музыкаль мажара. 11.00, 13.00 6+
**"Мин - Марат"** (У. Ғәлиев, А. Абушахманов инсц.), провинциаль проза. 18.00 16+

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**19 декабрь "Новогодние приключения Длинноуха"** (Л. Исҡужина), әкиәт. 11. 00, 13.00 0+
**20 декабрь "Новогодние приключения Длинноуха"** (Л. Исҡужина), әкиәт. 11. 00 0+
**19-20 декабрь Премьера! "Холодное сердце"** (В. Гауф), әкиәт. 10.00, 12.00 6+
**21 декабрь "Пеппи ДлинныйЧулок"** (А. Линдгрен), әкиәт. 11.00, 13.00 0+
**22 декабрь "Аладдин"** (И. Казакова), әкиәт. 10.00, 13.00 6+
**"Зимняя небылица"** (А. Горбунов), әкиәт. 11.00, 13.00 0+
**23 декабрь "Новогодние приключения Длинноуха"** (Л. Исҡужина), әкиәт. 11. 00 0+
**Премьера! "Холодное сердце"** (В. Гауф), әкиәт. 10.00, 12.00 6+
**"Ҡыш бабай и Дед Мороз"**, Яңы йыл тамашаһы. 12+
**24 декабрь "Чиполлино"** (Дж. Родари), мажара. 11.00 0+
**"Волшебник Изумрудного города"** (А. Волков), әкиәт. 12.00 0+
**25 декабрь "Новогодние приключения Длинноуха"** (Л. Исҡужина), әкиәт. 12. 00 0+
**"Синяя птица"** (М. Метерлинк), әкиәт. 12.00 6+

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**22 декабрь "Мюзикл шоу"**. 6+
**24-25 декабрь "Главный Новогодний утренник Уфы" - "Урал батыр и Три богатыря"** эпик әкиәт. 11.00, 13.00 0+
**"Baby-елка"**, 3 йәшкә тиклемге балалы ғаиләләр өсөн тамаша. 12.00, 16.00 0+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

*Башҡорт опера һәм балет театрының Бәләкәй сәхнәһендә:*
**25 декабрь Премьера! "Щелкунчик"** (А. Гофман, Ю. Ким инсц.). 12.00, 14.00, 16.00 0+

## Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**25 декабрь Премьера! "Как Баба Яга Соловья-разбойника женила"** (Ю. Боганов), әкиәт. 12.00 0+
**"Ҡатын түгел - аждаһа!"** (Д. Салихов), комедия. 18.00 16+

## Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**20-29 декабрь Премьера! "Сказка о рыбаке и рыбке"** А.С. Пушкин, Л. Ниғмәтуллина инсц.), Яңы йыл тамашаһы. 10.00, 12.00, 14.00, 16.00 0+

## А. Мөбәрәков ис. Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**20-30 декабрь "Самый вкусный Новый год"** (Т. Ғилманова), әкиәт. 10.00, 13.00, 18.00 0+
**20-30 декабрь "Нарру Яңы йыл в сказочном царстве"** гастроль спектакле. 0+

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1444 һижри йыл.*

| Декабрь (Йомадиәл әүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалка | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ахшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 19 (25) дүшәмбе | 8:08 | 9:38 | 13:30 | 15:03 | 16:47 | 18:17 |
| 20 (26) шишәмбе | 8:09 | 9:39 | 13:30 | 15:03 | 16:47 | 18:17 |
| 21 (27) шаршамбы | 8:09 | 9:39 | 13:30 | 15:04 | 16:47 | 18:17 |
| 22 (28) кесе йома | 8:10 | 9:40 | 13:30 | 15:04 | 16:48 | 18:18 |
| 23 (29) йома | 8:10 | 9:40 | 13:30 | 15:05 | 16:48 | 18:18 |
| 24 (1) шәмбе | 8:11 | 9:41 | 13:30 | 15:05 | 16:49 | 18:19 |
| 25 (2) йәкшәмбе | 8:11 | 9:41 | 13:30 | 15:06 | 16:50 | 18:20 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*ҮӘТ, ШУЛАЙ!*

# НИСЕК ЯЛ ИТӘБЕҘ?

**Башҡортостандың Хеҙмәт министрлығынан Яңы йыл байрамдарында ял көндәре тураһында хәбәр ителә.** "Хеҙмәт ҡануниәтенә ярашлы (Рәсәй Хеҙмәт кодексының 112-се статьяһы), **1, 2, 3, 4, 5, 6 һәм 8 ғинуар** - Яңы йыл каникулдары, **7 ғинуар** - Раштыуа - байрам көндәре булып тора. 2023 йылда 1 һәм 8 ғинуарҙағы байрам көндәре йәкшәмбегә тура килә. Рәсәй Хөкүмәте ҡарары менән 1 ғинуарҙағы ял көнө 24 февралгә, йомаға, 8 ғинуарҙағы ял иһә 8 майға, дүшәмбегә күсерелде. 2022 йылда 31 декабрь шәмбегә тап килә.

Шулай итеп, **2022 йылдың 31 декабре һәм 2023 йылдың 1, 2, 3, 4, 5, 6, 7, 8 ғинуары ял көндәре булып иҫәпләнә"**, - тиелә ведомство белдереүендә.

Йыллыҡ түп йәки өҫтәмә түләүле отпуск бирелгәндә 1, 2, 3, 4, 5, 6, 7, 8 ғинуарҙағы байрам көндәре отпускының календарь көндәре иҫәбенә индерелмәй.

АФАРИН!

# ТЫПЫРҘАТЫП БЕЙЕМӘГӘС...

## бейеү буламы ни ул!



**Күптән түгел Өфөлә "Башҡортостан" дәүләт концерт залында йылдың иң сағыу тамашаларының береһе - "Байыҡ" бейеү конкурсының 15 йыллыҡ юбилей гала-концерты үтте. Ысын мәғәнәһендә рух байрамы булды ул! Халҡыбыҙҙың яугирлығы ла, саялығы, шаянлығы ла, һүнмәҫ дәрте лә сағылды бейеүҙәребеҙҙә.**

Башҡортостандың халыҡ шағиры Хәсән Назарҙың:

*"Ниндәй генә хәлдә лә башҡорт*
*Йырҙан башҡа һис көн итмәгән,*
*Аш ҡайғыһы юҡ, тип әйткәндә лә,*
*Йыр ҡайғыһы юҡ, тип әйтмәгән..."* - тигән шиғыр юлдарын тап бейеүгә ҡарата ла әйтеп була. Сөнки йыр-бейеү бер-береһенән айырылғыһыҙ! Әлеге байрамда ла шулай булды. Шаян йырҙар, таҡмаҡтар, ҡара-ҡаршы әйтештәр башҡорттоң ауыҙ-тел ижадының ни тиклем бай икәнен йәнә бер хәтергә төшөрҙө.

Юбилей байрамында бейеү сәнғәтенең алтын фондын тәшкил иткән бейеүҙәр ҙә, заманса бейеүҙәр ҙә берҙәй ҙур оҫталыҡ менән башҡарылды, гүйә, сәхнәлә халыҡ таланттары түгел, ә ғәскәровсылар бейей! Әйткәндәй, быйыл Ғәскәров Фәйзи Әҙеһәм улының тыуыуына 110 йыл тулды. Шул уңайҙан бөйөк шәхестең халҡыбыҙға мираҫ итеп ҡалдырған үлемһеҙ бейеүҙәре - "Гөлнәзирә", "Зaһиҙә", "Ҡороҡсолар", "Һунарсы", "Беҙҙең байрам" - "Байыҡ" сәхнәһененең иң сағыу биҙәктәре булды.

Ә легендар бейеүсе, балетмейстер Йәүҙәт Бикбирҙиндың бейеүҙәре һуң! Уның "Генерал Игзаков"ын Ҡырмыҫҡалы районынан Илнур Кучаев башҡарғанда кемдең генә йөрәге дөп-дөп типмәне икән! Ғорур һәм ҡурҡыу белмәҫ башҡорт яугиры беҙҙе 1812 йылғы Ватан һуғышы ваҡиғаларына алып ҡайтып, халҡыбыҙҙың данлы ла, шанлы ла үткәненә ҡарата ғорурлыҡ тойғоһон тоҡандырып ебәрҙе. Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре Йәүҙәт Зәйнулла улының тыуыуына быйыл 70 йыл туласаҡ. Ҡыҫҡа ғына ғүмере эсендә ул башҡорт бейеү сәнғәтен "Маршрут"," Бейеш батыр", "Каруанһарай", "Төйәләҫ", "Үҫәргән байығы", "Сонайым" кеүек тарихи бейеүҙәр менән байыта. Уларҙың бер нисәһен гала-концертта ҡарап кинәнгәндер тамашасылар.

Быйылғы "Байыҡ" юбилярҙарға бик бай булды. Халыҡ-ара бейеү бәйгеләре лауреаты Азамат Кәримов, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Эльвира Аҡназарова, Башҡортостандың халыҡ артисы Рәил Лоҡманов, Башҡортостандың халыҡ артисы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Риф Ғәбитовты тамашасылар, алҡыштарға күмеп, сәхнә түренә оҙатты. Ә инде 80 йәшен теүәлләгән бейеү алиһәһе Рәшиҙә Туйсинаның "Заһиҙә"һе сәхнәлә пәйҙә булғас, барыһы ла "аh" итте. Шул уҡ матурлыҡ, шул уҡ һомғоллоҡ, тәбиғи сафлыҡ... Сихри ҡурай көйөнә онотолоп китеп бейене Рәшиҙә Ғилметдин ҡыҙы. Гүйә, ул һаман да ун һигеҙҙә, һаман да шул уҡ Заһиҙә...

Ә бөтә юбилярҙарҙың бергәләшеп сәхнәне дер һелкетеп бейегәнен күрһәгеҙ! Уларҙағы дәрт-дарман, уларҙағы айбарлыҡ, сәм, ғәм йәштәргә биргеһеҙ! Бына ҡайҙа ул йәнең-тәнең менән бейеүгә бирелгәнлек, халҡыңа һөйөү, ижадҡа тоғролоҡ! Кемдәр бейетте тиһегеҙме сәхнә легендаларын? "Байыҡ" бәйгеһененең бейеүселәре - Хәйбулла районының "Ҡайтауаз" гармунсылар ансамбленә тәтене был бәхет.

Эйе, кемдәр генә бейемәй хәҙер "Байыҡ"та. Парлашып та, өсәүләп тә, бәләкәй ансамблдәр менән дә сығыш яһайҙар. Ә бит ул ҡасандыр яңғыҙ бейеүселәр өсөн генә тәғәйенләнгәйне. 15 йыл эсендә был уникаль проект бейеүселәр менән бергә үҙе лә үҫте, нығынды һәм Башҡортостанда ғына түгел, халыҡ-ара кимәлдә танылыу алды. Унын нәҡ башҡорт бейеү сәнғәтенең үҫешенә индергән өлөшө баһалап бөткөһөҙ. Шуға үҙенең тоғро дуҫтарын, иң шәп, иң оҫта бейеү ҡуйыусыларҙы ла баһалай беләләр бында. Былтыр нәҡ ошо маҡсатҡа тәғәйенләнгән 100 мең һумлыҡ премия менән данлыҡлы Стәрлетамаҡ Бейеү театрына нигеҙ һалыусы Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Хәлил Ишбирҙин бүләкләнһә, был юлы бындай хөрмәткә "Байыҡ" телевизион бейеү бәйгеһе проектына уның тәүге көнөнән тоғро хеҙмәт иткән Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Фәнил Әсәҙуллин лайыҡ булды.

Тағы ла бер сауаплы эш эшләнде "Байыҡ"та. Башҡорт бейеүенең аҡһаҡалы, бәйгенең алыштырғыһыҙ жюри рәйесе Ратмир Бәҙретдиновтың исемен мәңгеләштереү маҡсатында уның исемендәге махсус приз булдырылды. Был иҫтәлекле бүләкте Баймаҡ ҡалаһынан Нәркәс Исҡужина алып шатланды.

Шулай ҙа иң күп алҡыштар, гөлләмәләр, матур-матур бүләктәр сәхнәнең төп геройҙарына - бәйгеселәргә юлланды. Мин инде ун алты йәштән утыҙ биш йәшкә тиклемге ҡатын-ҡыҙҙар араһында Гран-при яулаған яҡташым, Ишембай районы Кинйәбулат ауылы ҡыҙы Айһылыу Шәмсетдинова өсөн айырыуса шатландым.

Өс сәғәткә яҡын барған тамаша бер тынала үтеп китте. Һәр кемдә аңлатып бөтә алмаҫлыҡ хистәр, кисерештәр уятты ул. Яҡында ғына ултырған ирҙең күҙ йәшен күреп, үҙем дә тетрәндем. Бына ниндәй ул ысын сәнғәттең тәьҫир көсө! Күңелдәрҙе сафландырған, рухландырған, милләтебеҙҙе берләштергән, тарихыбыҙҙы тергеҙгән, киләсәгебеҙҙе хәстәрләгән был ғәжәйеп тамашаның хужабикәһе, проект авторы Рита Өмөтбаеваға, уның ижади коллективына рәхмәт. Бөтә Башҡортостан буйлап таланттарҙы эҙләп табып, уларҙы бер сәхнәгә туплап, Рәсәйҙә тиңе булмаған ысын халыҡ байрамын ойоштороу - егетлек ул!

**Гөлнур ДӘҮЛӘТЙӘРОВА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ҒӘЙЕПҺЕҘ ДУҪ ЭҘЛӘГӘН...

## дуҫһыҙ ҡалыр

Ҡаҡма кеше ҡапҡаһын, үҙ ҡапҡанды ҡағырҙар.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер кеше урам буйлап үтеп барғанда тоҡсай тотоп торған ҡартты һәм уны уратып алған балаларҙы күреп ҡала. Ҡарт балаларҙың һәр теләген үтәй икән. "Мин уйынсыҡ машина теләйем", ти бер малай. Һәм ҡарт тоҡсайҙан уйынсыҡ машина алып бирә. "Ә миңә яңы күлдәк кәрәк", ти ҡыҙыҡай. Ҡарттың тоҡсайынан өр-яңы күлдәк килеп сыға. "Был бит тылсымсы", - тип уйлай күҙәтеп торған кеше. Һәм балаларҙың таралышҡанын көтөп ала ла, ҡартты тотоп алып, тоҡсайына тығып, өйөнә алып ҡайта. Тоҡсайҙы сисеп: "Хәҙер һин минең теләктәрҙе генә үтәйәсәкһең", - ти кеше.**

**- Ярар, - ти ҡарт, - әйт теләгеңде.**

**- Донъялағы иң шәп машинала йөрөгөм килә.**

**Ҡарт тоҡсайынан машинаның асҡысын сығарып бирә. Ә кеше ҡартты өйөнә бикләп сығып китә. Бер аҙнанан ҡайтып, ҡартты әрләргә тотона:**

**- Һин мине алдағанһың. Минеке кеүек ҙур һәм матур машиналар урам тулы. Миңә бер кем дә иғтибар итмәй.**

**- Ни кәрәк һуң һиңә?**

**- Миңә күп аҡса кәрәк.**

**Ҡарт тоҡсайынан чек сығарып бирә. Теге кеше өйөн бикләп, йәнә сығып китә. Аҙна үткәс, тағы асыуланып ҡайта:**

**- Һин мине алдағанһың. Мин баҙарҙа йөрөп, йәнем теләгәнде һатып алдым. Ләкин башҡа кешеләр ҙә шул уҡ әйберҙәрҙе һатып алды.**

**- Ни теләйһең?**

**- Донъялағы иң матур ҡатын-ҡыҙ минеке булһын, - ти кеше һәм ҡартты бикләп, тағы ла сығып китә. Бер аҙнанан һуң ҡайтып, йәнә ҡәнәғәтһеҙлеген белдерә:**

**- Иң гүзәл ҡатын-ҡыҙ өсөн барыһын да эшләргә әҙер булдым. Ә уға аҡсам ғына кәрәк булған икән.**

**- Һин өс теләк әйттең, ләкин теләгәндәреңде һораманың, - ти ҡарт.**

**- Нисек инде улай?**

**- Һин машина һораның, ә ысынында хөрмәт теләнең, аҡса һораның, тик үҙаллылыҡ теләнең, ҡатын-ҡыҙ һораның, ләкин мөхәббәт теләнең. Хөрмәт, үҙаллылыҡ һәм мөхәббәтте мин һиңә бирә алмайым. Уларҙы кешеләр үҙҙәре яулап ала. Хәҙер мин китәм.**

**- Мин һине ебәрмәйем, - ти кеше.**

**- Мин теләгән ваҡытта китә ала инем.**

**- Ни өсөн китмәй, теләктәремде үтәнең һуң?**

**- Бер ай ял итеп алырға теләгәйнем, ялым бөттө, - ти ҙә ҡарт, тоҡсайына инеп юҡ була".**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.
1 582218 911006 22050

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
БР «Республика Башкортостан» нәшриәт йорто ДУП филиалы - «Башҡортостан» республика нәшриәтендә баҫылды (450079, БР, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** **253-25-44**
**Хәбәрселәр** **252-39-99**
**Матбуғат таратыу** **252-39-99**

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
16 декабрь 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**
Тиражы - 3540
Заказ - 1591